ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ
# Киске Өфө
28-3 ғинуар - февраль (һыуығай - шаҡай) 2023
№3 (1045)
kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Яңы 2023 йылда ла "Киске Өфө" менән бергә ҡалыуығыҙға сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Әйләнә-тирәгеҙҙә гәзитебеҙгә яҙылырға өлгөрмәй йә онотоп ҡалыусылар булһа, әйтә күрегеҙ: улар "Киске Өфө"гә (ПР905 индекс) 17 февралгә тиклем яҙылып, марттан алдыра башлай ала. Дүрт айға яҙылыу хаҡы - 532 һум 40 тин тора. Бергә булайыҡ!**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Яугирҙарға түләүҙәр

4

Хаталар нимәнән башлана, йәки Һәр ата-әсә - ғаилә уҡытыусыһы

8-9

Күҙҙәр йомоҡ булғанда ла, күңел күҙе асыҡ булһын

10

Ир-егеттәр әүҙем булырға, ҡатын-ҡыҙҙан алда йөрөргә тейеш

12-13

ӘЙТӘГҮР!

Мәғариф

# УҠЫТЫУСЫ...

## хеҙмәт күрһәтеүсе генәме?

**Һорау: Рәсәйҙә быйылғы йыл Педагог һәм остаз йылы тип нарыҡланды. Был юҡҡа түгелдер, ысынлап та, уҡытыусы һөнәренең элекке абруйын ҡайтарыу тураһында хәстәрләр ваҡыт еткәндер?**

***Лиза ӘҒӘҘУЛЛИНА, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған һәм халыҡ уҡытыусыһы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы:*** Эйе, 2023 йыл Педагог һәм остаз йылы тип иғлан ителде, әммә, минеңсә, уҡытыусыға ихтирам бер йылда ғына түгел, ә даими рәүештә, һәр йыл, һәр көн булырға тейеш. Һуңғы йылдарҙа, бигерәк тә үҙгәртеп ҡороу йылдарында, уҡытыусыларға ихтирам, ярҙам кәмене. Тәү сиратта был уларҙың матди хәлендә сағылды. Уҡытыусылар етмәй, башланғыс синыф уҡытыусылары ике смена эшләргә мәжбүр. Ҡайҙа бында уҡытыусы һөнәренең абруйы? Ҡасан "ярлы уҡытыусыны" дәүләт элекке кеүек абруйлы уҡытыусыға әүерелдерер икән?

Былтыр 1 сентябрҙә Өфөлә "Уҡытыусы даны" скверы асылды. Әммә ундағы күп ағастар ҡороно, сөнки ултыртҡандан һуң һыу һипмәнеләр. Йәйгеһен мин ул скверға йөрөмәнем - табличкаһын урланылар, үләндәр һарғайып кипте, эскәмйәләрҙең бояуы ҡубып бөттө... Әйтерһең дә, был сквер уҡытыусыларға булған мөнәсәбәттең асыҡ сағылышы!

Төрлө республика һәм өлкәләрҙең һәр ҡалаһында тиерлек уҡытыусыға һәйкәл ҡуйылған. Мин баш ҡалала ошо мәсьәләне күтәргәнгә тиҙҙән 5 йыл була. Мин беренсе уҡытыусы һәйкәлен ҡуйҙыртып, Уҡытыусыға ихтирам белдерергә генә түгел, ә уның балалар менән дуҫлығын һәм мөхәббәтен күрһәткем килгәйне. Һәйкәл проектына конкурс уҙғарылды, унда парта артында ултырған уҡыусы һәм таҡта эргәһендә баҫып торған уҡытыусы һүрәтләнгән эскиз еңеп сыҡты. Уҡытыусыны уҡыусылар уратып алған һәм мин хуплаған эскиз өсөнсө урын алды. Минеңсә, һәйкәлгә Уҡытыусы һәм Бала күҙлегенән ҡарарға кәрәк, ә таҡта һәм партаны төп урынға ҡуйған чиновниктар күҙлегенән түгел...

(Дауамы 7-се биттә).

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ЫШАНЫСЛЫМЫ УЛ ДАРЫУ?



**Рәсәйҙә ҡайһы бер дарыуҙарға ихтыяж арта бара. Шуға, етештереүселәрҙең һәм тәьмин итеүселәрҙең ташыу буйынса ҡатмарлыҡтарына бәйле, ҡайһы бер дарыуҙарҙың дарыуханаларға оҙаҡ килтерелеүе ихтимал, тип белдерә Росздравнадзор.**

Ведомствонан хәбәр итеүҙәренсә, дистрибьюторҙар дарыуҙарҙы ташыу юлдарын үҙгәртеү һәм уларҙы дарыуханаларға ваҡытында килтереү өсөн тейешле саралар күрә. Шулай ҙа ваҡытлыса килеп тыуған хәлдән файҙаланырға торған мутлашыусылар күбәйеүе тураһында ла иҫкәртә. "Теге йәки был препараттарҙың дарыуханаларҙа ваҡытлыса булмай тороуын мутлашыусылар үҙ файҙаһына бора: ҡайһы бер намыҫһыҙ ойошмалар граждандарға кәрәкле дарыуҙы, шул иҫәптән ҡиммәтле торғандарының хаҡын нигеҙһеҙ арттырып йәки түбәнәйтеп тә, үҙҙәре алып килеп бирергә тәҡдим итәләр. Тик башта хаҡын түләргә ҡушалар. Шул уҡ ваҡытта һатып алыусыға бер ниндәй ҙә гарантиялар бирелмәй", - тип яҙылған ведомствоның хәбәрендә.

Алыпһатарҙар аша һатып алынған препараттарҙың сифаты насар һәм ялған булыуы ла ихтимал. Бындай хеҙмәттәр менән ҡулланған граждандар һаулығын һәм аҡса янсығын ҡурҡыныс аҫтына ҡуйыуын хәтерҙән сығармаһын ине.

*КЕМ АЛЫҠ?*

# ИҢ ШӘП БҮЛӘК - КИТАП!



**Быйылғы 2023 йылдың беренсе яртыһында ла "Киске Өфө" гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы, уҡымышлы, вайымлы уҡыусыларыбыҙға рәхмәтлебеҙ. "Аңлы уҡыусы" тип атауыбыҙ юҡҡа түгел, сөнки хәҙер гәзит-журнал-китап уҡыусылар тамам һирәгәйҙе. Күрәһегеҙ, был миҙгелдә лә уҡыусыларыбыҙ һаны кәмей төштө. Аҡ ҡағыҙ битендәге һүҙҙе һанлаусы, уның әһәмиәтен баһалаусы аңлылар сафы һирәгәйә барыуы борсолдора. Ә шулай ҙа уҡыусыларыбыҙҙы бөтөнләй үк юғалтып бөтмәгәнбеҙ әле. Бар әле гәзит һүҙен үҙ иткәндәр, "Гәзиттә бит шулай яҙылған!" тип, һәр һүҙен гәзит һүҙе менән йөпләүселәр - улар беҙҙә ҡағыҙ баҫмаларҙың киләсәктә лә йәшәйәсәгенә өмөт уята. Ә беҙ был өмөттөң аҡланыуынан дәртләнеп, уҡыусыларыбыҙҙы рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, йөкмәткеле яҙмаларыбыҙ менән танһыҡтарын ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ.**

**Шулай итеп, әлеге миҙгелгә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан түбәндәге уҡыусыларыбыҙ ошо матур китаптарға лайыҡ булды.**

(Дауамы 15-се биттә).

12+

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

***✓ Барса халыҡ ҡалаларға күпләп ағылған саҡта тыуған ауылыңда йәшәүең дә оло батырлыҡҡа тиң. Был иң беренсе нәүбәттә ауылды һаҡлап ҡалыуға булышыҡ итә.***



ӨС ДӘЛИЛ: АБВ

# АТАЙСАЛЫҢ - ТЫУҒАН ЯҒЫҢ




**2023 йыл Башҡортостанда "Атайсалға - изге ғәмәлдәр" йылы тип иғлан ителде. Атамаһынан уҡ күренеүенсә, һәр кем өсөн атайсалыңа изге ғәмәлдәр ҡылыу атай-әсәйеңә изгелек күрһәтеүгә тиң бурысың һаналырға тейешлеге бәхесһеҙ. Тыуған яҡтың атай, әсәй һүҙҙәре менән нарыҡланыуы ла юҡҡа ғына түгел, тимәк. Был мәсьәләгә өс күҙлектән ҡарайыҡ:**

**А Күҙгә күренгән ғәмәлдәр.** Ейәнсура районының Үтәғол ауыл хакимиәте башлығы, яҙыусы Сабит Фазлыев ул ғәмәлдәрҙе шулай билдәләй: "Был - ауылды һаҡлаусы, үҫтереүсе, төҙөкләндереүсе проект. Унда тыуған яғым тип янған һәр кем ҡатнаша ала. Был проект иң беренсе сиратта ситтә йәшәгән яҡташтарыбыҙға ҡағыла. Тыуған ауылы өсөн һәр кем файҙа килтерергә бурыслы. Ауылдарға иман ҡайта, мәсеттәр төҙөлә, улар байтаҡ сығым һорай. Ауылды уратып алған ер-һыу, урмандар, шишмәләр ярҙамға мохтаж. Быларҙың барыһын да хөкүмәт эшләр әле, тип көтөп ултырыу ялҡаулыҡҡа тиң. Атайсалың өсөн һис юғы тинлек булһа ла ярҙам итеү - проекттың төп мәғәнәһе.

Быйыл беҙ Үтәғол ауылында административ үҙәкте матурланыҡ. Шунда ял итеү урыны, спорт паркы төҙөнөк, периметр буйлап күк шыршы, йүкә ағастары ултырттыҡ. Шыршыларға аҡсаны ауылдашыбыҙ, Стәрлелә теш табибы булып эшләүсе Бирҙеғолов Ирәндек ағай бирҙе. Ауылда тир түккән фермерҙар ҙа ҡулдарынан килгәнсе ярҙам итергә тырыша. Әле Иҙәш ауылында мәсет төҙөргә тип, ситтә йәшәүсе ауылдаштар йөҙәр меңләп аҡса бүлделәр. Юнайҙа һалынасаҡ мәсеткә лә финанс ярҙамы күрһәтергә теләүселәр бар. Өмәләргә йыш сығабыҙ, был да тыуған ауылыңды яратыуҙы аңлата, уның киләсәген ҡайғыртыу хаҡында һөйләй..."

**Б Күҙгә күренмәгән ғәмәлдәр.** Элегерәк тыуған яғыма ҡайтһам, бер хужалыҡ етәксеһенең: "Машинаңа үҙебеҙҙең район территорияһындағы заправкала бензин ҡой. Аҙ ғына булһа ла, аҡсаһы үҙебеҙҙә ҡалһын", - тигән һүҙен шаяртыу тип кенә ҡабул иткәйнем. Хәҙер инде икенсерәк уйлайым. Тыуған яғыңа өс тинлек ярҙам күрһәтеп, өс меңлек реклама яһауға ҡарағанда, ул хужалыҡ етәксеһенең һүҙҙәрендә мин илһөйәрлекте күберәк күрәм. Тыуған яғыңа күрһәткән изге ғәмәлең хаҡында ваҡытлы матбуғатта, социаль селтәрҙәрҙә һөйләргә кәрәкмәй тип әйтмәйем, әгәр ҙә был осраҡта һин башҡаларҙы ла ошо юлға саҡыраһың икән, был хуплауға ғына лайыҡ.

Беҙ, журналистар, йәйҙәрен республикабыҙ буйлап командировкаларҙа йөрөгәндә юл ситендә картуф, еләк-емеш, бәшмәк һәм башҡа аҙыҡ-түлек менән һатыу итеүселәрҙе тап итәбеҙ. Шулар араһынан һәр ваҡыт үҙебеҙҙең милләт кешеләренең тауарын һатып алып киткән таныштарым бихисап. Был да атайсалың өсөн изге ғәмәл ҡылыуҙың күҙгә күренмәгән бер миҫалылыр. Ял көндәрендә ҡала урамындағы баҙар-йәрминкәләрҙә мин дә шулай итәм, атайсалыбыҙ үҫешенә аҙ ғына булһа ла инвестиция индерәм.

Егермеләп йыл элек кис бер егет миңә шылтыратып: "Мин яҡташығыҙ Мөхәмәт булам. Тимер юл вокзалында ултырам. Аҡсамды юғалттым, ҡайта алмай йөрөйөм. Миңә һеҙҙең номерығыҙҙы биргән кеше: "Ул баймаҡтарҙың барыһына ла ярҙам итә", - тигәйне, шуға һеҙгә шылтыратам", - тине. Егетте вокзалға барып табып, өйөмә алып ҡайттым, ҡунаҡ итеп йоҡлатып, иртәгәһенә юлына аҡса биреп оҙаттым. Мөхәмәткә минең телефонды биргән кешегә ғүмергә рәхмәтлемен. Миңә ышанғаны өсөн. Ауыр хәлгә ҡалған яҡташыңа хәлеңдән килгәнсе ярҙам күрһәтеүең дә шулай уҡ атайсалыңа изге ғәмәлдәр ҡылыуға тиңдер, тием.

**В Тыуған ауылыңда йәшәүең дә...** Шундай заманда йәшәйбеҙ, барса халыҡ ҡалаларға күпләп ағылған саҡта тыуған ауылыңда йәшәүең дә оло батырлыҡҡа тиң. Был иң беренсе нәүбәттә ауылды һаҡлап ҡалыуға булышыҡ итә. Ни өсөн тигәндә, йәштәр ауылда күпләп ҡалһа, мәктәп тә һаҡлана, тигән һүҙ, ә инде мәктәп ауылдың һаҡланыуының иң төп күрһәткестәренең береһе. Икенсенән, ауылда үҙ эшен асҡан, башҡаларҙы эш менән тәьмин итеүсе кеше һалымдарҙы ла урындағы бюджетты тулыландырыуға йүнәлтеп, ҙур эш башҡара. Нимә генә тимә, тыуған ауылында йәшәүсе, эшләүсе кеше атайсалы өсөн туранан-тура изге ғәмәлдәр ҡылыусы ла.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

БЫЛ АЙҘА...

# ИЛЕН ҺАҠЛАҒАН - ИРӘЙЕП ЙӘШӘГӘН

**Ҡыштың һуңғы айы шаҡай килә. Көләс яҙҙың күршеһе булһа ла, уҫал ғына ул шаҡай. Салт ҡояшлы көндәре лә булыуға ҡарамаҫтан, был осор селлә һыуыҡтары, әсе елдәре менән үҙәккә үтерлек. Дөрөҫ, быйыл уның өсөн һыуығай - ғинуар ағаһы ла ныҡ тырышты. Шаҡайға, бәлки, эш тә ҡалдырмағандыр ул?**



Хәйер, алдан фаразлауҙарҙың хәҙер файҙаһыҙ икәнен яҡшы төшөндөк һуңғы йылдарҙа. Хатта заманса ысулдар менән эш итеүсе метеорологтарҙы ла йыш "ултырта" һауа торошо. Уның көтөлмәгән уҫал "шаярыуҙары"на бер аҙ өйрәнгәндәй ҙә булдыҡ, ләкин һыуығайҙың быйылғы ҡылыҡтары тиҙ генә онотолорлоҡ түгелдер. Ул тарихта ҡалыр, моғайын: Башҡортостанда 44 йыл инде быңдай һыуыҡтың булғаны юҡ ине, тип яҙҙы мәғлүмәт сығанаҡтары. Һауа температураһы урыны менән 40 градустан да түбәнерәк төшкән урындар булды бит. Машиналар тоҡаны, торбалар шартланы, приборҙар сафтан сыҡты, таксиға өсләтә хаҡ күтәрелде, фатирҙар һыуынды... Хатта Өфөлә лә бит һуңғы 50 йыл эсендәге иң түбән температура - 39,1 градус теркәлде. Ә шулай ҙа, һыуығай шаҡай эшен эшләп китте, тип ҡыуанырға ашыҡмайыҡ, тигәндәй була һауа торошон фаразлаусы сығанаҡтар. Шаҡайҙың үҙ пландары. Күп йыллыҡ мәғлүмәттәр буйынса, ул ғинуар үҙенсәлектәренән әллә ни ныҡ айырылмаҫ, тиҙәр. Шулай итеп, 8 ғинуарҙан селлә һыуыҡтары башланған булһа, халыҡ күҙәтеүен яҡшы билгән кешеләр әйтеүенсә, 18 февралдә селлә сыға. Ә инде селләнең һыуытып инеүесығыуын халыҡ маҡтай: тимәк, мул уңышҡа был. Фенологтар фекеренсә, шаҡайҙың һуңғы ун көнлөгө яҙға тартым, йылы буласаҡ. Ярай, ниндәй генә булмаһын, көн яманы китер, ти. Иң мөһиме, күгебеҙ аяҙ, көндәребеҙ ҡояшлы, күңелдәребеҙ тыныс булһа икән...

...Алыҫта ҡалһа ла онотолмаясаҡ ул дәһшәтле йылдарҙа Ватаныбыҙҙы ғына түгел, ярты Европа илдәрен немец фашистары ҡоллоғонан ҡотҡарған көс - Совет Армияһы булды. Шаҡайҙың иҫтәлекле һәм күренекле көндәр календары кешелек тарихында иң ҡан ҡойғос алыш - Сталинград өсөн көрәштә немец илбаҫарҙарын тар-мар итеү датаһы **(2 февраль, 1943 йыл)** менән асыла. Ҡаланы дошман тарафынан 200 көн һәм төн буйына туҡтауһыҙ утҡа тотоу, бомбалар һәм пуля ямғыры аҫтында совет яугирҙарының һәр йорт, һәр метр ер өсөн тиңһеҙ ҡаһарманлыҡтар күрһәтеүе, ошо юлда йөҙәрләгән мең һәләк булыусылар - быңа ниҙән ғибәрәт ул Сталинград һуғышы. Дошман, был ҡаршылыҡты өҙөү илебеҙҙең эсенә үк үтеп инеүгә - Кавказдың нефть райондарын, Дон һәм Кубандең уңдырышлы ауыл хужалығы ерҙәрен ҡулға төшөрөүгә юл асасаҡ, тип өмөт итә һәм, ғөмүмән, Сталин исемен йөрөткән ҡаланы алыу ҙур мәртәбә күрелә, совет халҡының рухын ҡаҡшатыуға иҫәп тотола һәм был еңеүгә тиң буласаҡ тип план ҡорола. Шуға күрә лә вермахт бөтә көсөн Сталинград янына ташлай. Өҫтәүенә, был һуғышта Германияға Италия, Румыния, Венгрия, Хорватия, Словакия илдәренең армиялары ярҙамға килә. Ләкин Сталинград ныҡ тора, емереклеккә әйләнһә лә бирешмәй, көл-күмер аҫтынан ҡалҡып сыға. Талантлы полководецтар А.Василевский, Н.Ватутин, А.Еременко, С. Тимошенко, К.Рокоссовский, В.Чуйков етәкселегендәге армиялар ҙур ныҡышмалылыҡ күрһәтеп, "Уран" операцияһы һөҙөмтәһендә дошмандың төп көстәре юлын өҙә һәм ҡамауҙа тороп ҡалған Гитлер фельдмаршалы Паулюс штабындағы 24 генералы һәм иҫән ҡалған 91 мең һалдаты менән әсиргә төшә.

Был Совет Армияһының хәрби даны һәм ҡеүәте тураһында һөйләүсе бер факт ҡына, ә Бөйөк Ватан һуғышының башынан аҙағына

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров Архангел - Белорет автомобиль юлы участкаһын мобиль элемтә менән тәьмин итергә ҡушты. Уның фекеренсә, әлеге үтә хәүефле участкала сифатлы мобиль элемтә һәм интернет кәрәк. Яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса, трассаның 160 саҡрымдан ашыу участкаһында бәйләнеш булдырыу өсөн 14 яңы база станцияһы ҡуйырға кәрәк, икәүһенең бейеклеге 70 метр булырға тейеш. Бының өсөн 52 саҡрымдан ашыу оптика һәм 54 саҡрым электр тапшырыу линияларын төҙөү талап ителә. Был яҡындағы алты ауылды ла элемтә менән тәьмин итергә мөмкинлек бирер тип көтөлә.

✓Башҡортостанда шәхси торлаҡ төҙөүгә ҡеүәтле этәргес биргән газ үткәреү программаһын тормошҡа ашырыуҙы төҙөлөшкә ярҙам сараларының береһе тип әйтергә мөмкин. Республикабыҙ ер участкаларына тиклем газ һуҙыу бурысын үтәү буйынса Рәсәй субъекттары рейтингында алдынғы урындарҙы биләй. Башҡортостандың Төҙөлөш министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, республикала раҫланған план-графикка ярашлы, газ үтмәгән 1 439 тораҡ пункттағы 31 607 йортто "зәңгәр" яғыулыҡ менән тәьмин итеү ҡаралған. Бөгөнгә халыҡтан 33 меңгә яҡын ғариза ҡабул ителгән, шуларҙың 32 меңдән ашыуы буйынса килешеүҙәр төҙөлгән.

✓Башҡортостан 2022 йыл йомғаҡтары буйынса Милли туристик рейтингта 11-се урынды алды. Был хаҡта республика етәксеһе Радий Хәбиров "Бәйләнештә"ге сәхифәһендә хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, рейтингты төҙөүселәр хәүефһеҙлекте баһалаған, туристик тармаҡтың, ҡунаҡхана инфраструктураһының һәм шифахана-курорт йүнәлешенең үҫеш кимәлен, төбәктең популярлығын иҫәпкә алған. Республика иң популяр ун һәм хатта биш йүнәлеш иҫәбенә лә инергә мөмкин, тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓Башҡортостандың дәүләт автоинспекцияһы башлығы Владимир Севастьянов 20 ғинуарҙа үҙенең телеграм-каналында рейдтар хаҡында хәбәр итте. "Ғәҙәттәгесә, ял көндәрендә дәүләт автоинспекцияһы рейдтар ойоштора. Төп бурысыбыҙ - автомобиль аварияларына юл ҡуймау һәм транспорт ағымында хоҡуҡ боҙоусыларҙы асыҡлау. Тикшереүҙә мөмкин тиклем күберәк хеҙмәткәрҙәр ҡатнаша", - тип иҫкәртте ведомство етәксеһе. Эскән водителдәр тураһында ла хәбәр итергә мөмкин, тине ул."Инспекторҙар уларҙы тотоу буйынса тейешле саралар күрергә әҙер", - тип билдәләне Владимир Севастьянов.

тиклем күпме шундай ҡатмарлы хәрби операциялар, күпме тактик мәсьәләләр башҡарырға тура килә! Тыуған ил өсөн ғүмерҙәрен аямаған ябай һалдаттарҙан алып талантлы, алдан күрә белгән белемле командирҙар составы еңеүҙе тәьмин итеүсе төп көс иҫәпләнә. Ҡорал, ул ниндәй генә заманса һәм ҡеүәтле булмаһын, төп тере көстәрҙең хәрби әҙерлеге, квалификацияһы, грамоталы команда составы тәүге һүҙҙе әйтә һәм ҡоралды маҡсатлы, дөрөҫ файҙаланыуҙа хәл иткес роль уйнай. Бөгөн илдәге "киҫкен хәрби-сәйәси торғонлоҡ шарттарында армияның хәрби һәләтлеген тергеҙеү көнүҙәк бурыс", тип иҫәпләй Мәскәү дәүләт халыҡ-ара институтының (МГИМО) Хәрби-сәйәси тикшеренеүҙәр үҙәге директоры А. Подберезкин үҙенең "Аргументы недели" баҫмаһына әңгәмәһендә. Был фекерҙе ул Рәсәй оборона министры С.Шойгу тарафынан 2023-2026 йылдарға Рәсәй армияһында киң ҡоласлы үҙгәрештәр булдырыу хаҡында белдереүенә ҡарата әйтә. "Өс йыл эсендә быға нисек өлгәшергә? - тигән һорау ҡуя Хәрби-сәйәси тикшеренеүҙәр үҙәге етәксеһе һәм дауам итеп: - Хәрби училищеларҙың күпселеге юҡҡа сығарылды, офицерҙар, кесе состав командирҙар әҙерләргә кәрәк; ремонтсылар бригадалары кәрәк; хәрби ғилем өлкәһе, дөрөҫөн әйткәндә, шулай уҡ юҡҡа тиң, ә бит уны ла тергеҙергә кәрәк!" - ти һәм был бурыстарҙың халҡыбыҙҙың ҡулынан килмәҫтәй эш түгеллегенә, ләкин уны атҡарып сығыу өсөн ваҡыт кәрәклегенә баҫым яһай.

Әлеге көндә армияны һан яғынан 1,5 млн хәрби хеҙмәткәргә тиклем арттырыу тураһында юғары кимәлдә һүҙ алып барыла, шул уҡ ваҡытта контракт буйынса хеҙмәт итеүселәр һаны 695 меңгә еткереләсәк. Элекке Совет Армияһының нигеҙен тәшкил итеүсе дивизия һәм армиялар кеүек эре формированиелар ойоштороу маҡсатҡа ярашлы, тип ҡарала, күрәһең, тип фараз ҡыла ҡайһы бер эксперттар, сөнки әлеге СВО-ла хәрәкәт итеүсе БТГ (батальон-тактик төркөмдәр) концепцияһы үҙен әллә ни аҡлай алмауын күрһәтә, тигән фекерҙә улар. Армия реформаһында тағы бер яңылыҡ - ул да булһа, саҡырылыу йәшен 18-ҙән 21 йәшкә тиклем этаплап арттыра барыу. Һәр хәлдә, нисек кенә булмаһын, ил хәүефһеҙлеген тәьмин итеү өсөн беҙгә ҡеүәтле, мобиль һәм профессиональ армия кәрәк, бөгөнгө халыҡ-ара хәрби-сәйәси хәлдәр шуны раҫлай. Был Ватанды һаҡлаусылар көнө **(23)** генә түгел, ә 2015 йылдан алып билдәләнеүсе яңы хәрби дата - Махсус операциялар көстәре көнө **(27)** айҡанлы ла әйтелгән бер кәлимә булды.

Был айҙа тағы ла ошондай иҫтәлекле көндәр бар: Ҡатын-ҡыҙ табиптар көнө **(3)**, Кешелектең халыҡ-ара туғанлашыу, Һүгенеү һүҙҙәренә ҡаршы бөтөн донъя көрәш, Яман шеш сирҙәренә ҡаршы бөтөн донъя көрәш көндәре **(4)**, Метеорологтар **(5)**, Рәсәй фәне, Йәш антифашист геройҙар **(8)**, Граждандар авиацияһы, Теш табибы, Ҡышҡы спорт төрҙәре **(9)** көндәре, Ғашиҡтар, Компьютерсылар һәм Китап бүләк итеү көндәре **(14)**, Совет ғәскәрҙәрен Афғанстандан сығарған һәм Сит илдәрҙә хеҙмәт бурыстарын башҡарыусыларҙы иҫкә алыу **(15)** көндәре, Студент отрядтары, Бөтөн донъя мәрхәмәтлек **(17)**, Бөтөн донъя социаль ғәҙеллек **(20)**, Туған тел, Фельдшерҙар көндәре **(21)**, Ватан һаҡсылары көнө **(23)**, был көн шулай уҡ Советтар Союзы Геройы, Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры генерал-майор Миңлеғәле Шайморатовтың һәләк булыуына 80 йыл тула **(1943)**, БР Дәүләт флагы көнө **(25, 1992)**, Махсус операциялар көстәре көнө **(27)**, Ҡыштың китер көнө **(28)**.

**Шаҡайҙа тыуғандар:**

**1 -** журналист, публицист, Бөйөк Ватан һуғышы тарихсыһы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты **Фәрит Вәхитовҡа - 90 йәш** (1933).

**3 -** дәүләт һәм хужалыҡ эшмәкәре, 1992-1999 йылдарҙа Сибай ҡала хакимиәте башлығы, БДУ-ның Сибай институты директоры, профессор, иҡтисад фәндәре докторы, техник фәндәр кандидаты, Почет билдәһе ордены кавалеры, Башҡортостандың атҡаҙанған төҙөүсеһе **Зиннур Йәрмөхәмәтовтың тыуыуына - 75 йыл** (1948-2022).

**-** ҡурайсы, Стәрлетамаҡ дәүләт концерт-театр берләшмәһе артисы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы **Миңлеғәле Хәсәновҡа - 60 йәш** (1963).

**4 -** танылған рәссам, Рәсәй Художество академияһы академигы, СССР-ҙың халыҡ рәссамы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Әхмәт Лотфуллиндың тыуыуына - 95 йыл** (1928-2007).

**5 -** Советтар Союзы Геройы, сығышы менән Учалы районынан **Шәкирйән Мөхәмәтйәновтың** (Александр Матросов) **тыуыуына - 100 йыл** (1923-1943).

**7 -** табип, тел белгесе, дәүләт эшмәкәре **Мстислав Ҡулаевтың тыуыуына - 150 йыл** (1873-1959).

**9 -** инженер-механик, партия, дәүләт һәм хужалыҡ эшмәкәре, иҡтисад фәндәре кандидаты, Рәсәй газ сәнәғәтенең атҡаҙанған хеҙмәткәре, бокс буйынса СССР-ҙың спорт мастеры **Фәнис Исхаҡовҡа - 85 йәш** (1938).

**-** бейеүсе, мәҙәниәт эшмәкәре, Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Айҙар Зөбәйҙуллинға- 60 йәш** (1963).

**10 -** ҡурайсы, Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы **Ишморат Илбәковҡа - 60 йәш** (1963).

**14 -** тел белгесе, филология фәндәре докторы, БР Стратегик тикшеренеүҙәр институтының баш ғилми хеҙмәткәре **Луиза Сәмситоваға - 50 йәш** (1973).

**15 -** тау инженеры, Башҡортостандың атҡаҙанған геологы, Халыҡтар дуҫлығы ордены кавалеры, СССР Дәүләт премияһы лауреаты **Басир Мәһәҙиевтың тыуыуына - 90 йыл** (1933-2014).

**23 -** Башҡортостандың халыҡ шағиры, драматург **Әнғәм Атнабаевтың тыуыуына - 95 йыл** (1928-1999).

**-** журналист, драматург, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендә Рәсәй Федерацияһы һәм Салауат Юлаев исемендәге Башҡортостан дәүләт премиялары лауреаты **Флорид Бүләковтың тыуыуына - 75 йыл** (1948-2015).

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

*БЫНАҒАЙЫШ!*

# УҢЫШЛЫ ТӘЖРИБӘМЕ?



**Ил терәге - ир, тигән. Ил яуһыҙ булмаҫ; Ил яҙмышы ир ҡулында; Ир ҡайғыһы - илдә... Ил менән ир берлеге хаҡында халҡыбыҙҙың быуаттар буйына һыналған, күп томлыҡ романдарға һыймаҫ әллә күпме аҡыл хазинаһы - ҡанатлы әйтем-мәҡәлдәре бар.**

Беҙҙең заманға ла төштө был һынау - ил яҙмышы ир-егет яҙмышына әйләнгән хәл иткес дау. Уға аҫыл улдарын ебәргән халҡыбыҙҙың йөрәгенә төштө, быуынын алды был. Шуға ҡарамаҫтан, республикабыҙҙың ауыл-ҡалаларында Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы яугирҙарыбыҙға һәр кем ҡулынан килгәнсә ярҙамға тупланды: йылы кейем-һалым, аҙыҡ-түлек, медицина тауарҙары, көнкүреш кәрәк-яраҡтары тейәп, әллә күпме гуманитар йөк ебәрҙе һәм был эш әле лә дауам итә. Махсус операцияға киткәндәр араһында балалыҡ йәшенән сығып бөтмәгәндәре лә, күп балалы ғаилә терәге булған атайҙар ҙа бар. "Халҡыбыҙ илдә килеп тыуған хәлде аңлап ҡабул итте, - тине үҙенең Яңы йыл мөрәжәғәтендә Президент Владимир Путин. - Рәсәй тарихының бөтөн ҡатмарлы осорҙарындағы кеүек үк, күп милләтле халҡыбыҙ был юлы ла Ватаныбыҙ һаҡсыларын һүҙе менән дә, эше менән дә яҡлап-ҡурсылап, ҡаһарманлыҡ һәм сабырлыҡ күрһәтә", - тине ул.

Ошо тәңгәлдә, ҙур аҡсалар менән эш итеүсе, миллионлап эш хаҡы алыусы бизнес әһелдәре, юғары чиновниктар, депутаттар нисек ҡатнаша һуң махсус операцияға, һалдаттарыбыҙға ярҙам итеү буйынса бөтөн халыҡ эшендә, тигән һорау ҙа тыуа ул. Дөрөҫ, улар ҙа ситтә тороп ҡалмағандыр, халыҡ һәм армия бәйләнешенә үҙ өлөштәрен индерәлер, ләкин был хаҡта беҙгә ҡараңғы, ҡыҙғаныҫҡа. Ә бит, дөрөҫөн әйткәндә, илебеҙ халҡы күптән инде "кредит энәһендә" ултыра. Үткән йыл урталарындағы мәғлүмәттәргә генә ҡарағанда ла, Рәсәй граждандарының банктарға бурысы... 25 триллиондан ашып киткән. Үҙәк матбуғат яҙыуынса, һәр икенсе рәсәйле елкәһендә берәр генә булһа ла кредит түләүе бар, һәм уларҙың күпселеге ауырлыҡ менән түләнә. Кредиттарҙың яртыһы самаһы ҡулланыу проблемалары - көнкүреш мәсьәләләрен хәл итеү ихтыяждарынан сығып алынған, бәғзеләре иһә бурысын түләр өсөн икенсе, өсөнсө ҡатлы бурысҡа батҡан. Былтыр июлдәге мәғлүмәттән күренеүенсә, ипотека буйынса кредит бурысы булған граждандар бөтөн төр кредит алыусы бурыслыларҙың 50 процентын тәшкил иткән. Өҫтәүенә, кредитҡа йәшәүҙе норма тип иҫәпләүсе быуын үҫеп етте, һәм улар, шуға өмөтләнеп, үҙҙәренең шәхси ихтыяждарын сикләргә ашыҡмай. Ә тормош ҡиммәтләнә бара...

Ошондай шарттарҙа үҙенең популистик тәҡдимдәре менән билдәле Дәүләт Думаһы депутаты, "Ғәҙел Рәсәй - Хәҡиҡәт хаҡына" фирҡәһе башлығы Сергей Миронов Махсус хәрби операцияны финанслау өсөн махсус тәғәйенле облигация сығарып, халыҡтан аҡса йыйырға тәҡдим менән сығыш яһаны. Финанс министры Силуановҡа яҙған хатында ул 1942-1945 йылдарҙа сығарылған хәрби займдарҙы иҫенә төшөрөп, быны "уңышлы тәжрибә" тип атай. Ә иҡтисад фәндәре докторы Сергей Пахомов яҙыуынса, ул саҡта был ирекле заем тип әйтелһә лә, асылда, мәжбүри сара була һәм 1947 йылда аҡса реформаһы үткәрелеп, хәрби займдар 1:3 нисбәтендә конвертациялана һәм, һәр ваҡыттағыса, халыҡ аҡсаһыҙ һемәйеп ҡала. Эксперттар фекеренсә, халыҡтың бөгөнгө йәшәү кимәле шарттарында финанс башлыҡтары депутат Сергей Миронов тәҡдим иткән бәхәсле аҙымға бармаҫ, моғайын, сөнки беҙ бит хәҙер XX быуат уртаһында йәшәмәйбеҙ. Әлбиттә, халыҡ бер ваҡытта ла үҙ иле хаҡына һуңғы тинен генә түгел, йәнен дә йәлләмәҫ, тик бына башҡарма власть әһелдәре, хөкүмәт ағзалары, депутаттар ҙа ошо йәһәттән өлгө күрһәтһен ине.

**Әйткәндәй, был һанды әҙерләгәндә шул билдәле булды: РФ Дәүләт Думаһы бөтөн кимәлдәге депутаттарҙың килем күләме, күсемһеҙ милке хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе хәҙер әҙәм күҙенән йәшереү маҡсатында декларацияны элеккесә матбуғатта һәм башҡа мәғлүмәт сараларында баҫып сығарыуҙы 1 марттан тыя торған закон ҡабул итте. Бына һиңә - мә!**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Төҙөлөш тармағында, иҡтисадтағы дөйөм хәлгә һәм санкция баҫымына ҡарамаҫтан, ыңғай үҫеш йүнәлеше һаҡлап ҡалынды. Республиканың Төҙөлөш һәм архитектура министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, 2022 йыл торлаҡ төҙөлөшө темптары буйынса иң яҡшыһы булды. Уҙған йыл йомғаҡтары буйынса 3 миллион 10 мең квадрат метр күрһәткесенә өлгәшеү планлаштырыла. 2021 йылда республикала 2 миллион 906 мең квадрат метр торлаҡ сафҡа индерелгән.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы ҡарамағындағы Йәштәр йәмәғәт палатаһының составы билдәле булды. Уға сәйәси партияларҙан, йәмәғәт ойошмаларынан, юғары уҡыу йорттарының профилле органдарынан 15 вәкил инде. Конкурс буйынса һайлап алыуҙа еңеүселәр араһында Гөлгөнә Бәһауетдинова, Эмиль Буранғолов, Рөстәм Ғәйнетдинов, Альберт Ғәйнуллин, Наҙгөл Ҡасимова, Алина Нәбиуллина, Руслан Хәбиров һәм башҡалар бар.

✓Башҡортостандан махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан старшина Алмаз Сафинға үлгәндән һуң Рәсәй Федерацияһы Геройы исеме бирелде. Был турала указға ил Президенты Владимир Путин ҡул ҡуйған. Билдәләнеүенсә, Әлшәй районының Раевка ауылында тыуып үҫкән яҡташыбыҙ махсус операция барышында хәрби бурысын үтәгәндә күрһәткән батырлығы өсөн бүләкләнгән.

✓Рәсәйҙең Ҡораллы көстәре һаны 1,5 миллион хәрби хеҙмәткәргә тиклем арттырыла, тип хәбәр итте илдең оборона министры Сергей Шойгу. Ҡоралл көстәрҙең составын 2023-2026 йылдарҙа үҙгәртеү планлаштырыла. Рәсәйҙең оборона министры Мәскәү һәм Ленинград хәрби округтарын, илдең яңы субъекттары биләмәләрендә ғәскәр төркөмдәрен ойошторорға ҡушты. Бынан тыш, Хәрби-диңгеҙ флоты, Һауа-йыһан көстәре һәм Стратегик тәғәйенләнештәге ракета ғәскәрҙәре хәрби яҡтан көсәйтелә, тип өҫтәнеләр ведомствола.

✓Рәсәй менән Беларусь Олимпия уйындарын күрһәтеү хоҡуғынан мәхрүм ителде, тип хәбәр итә Lenta.ru Халыҡ-ара олимпия комитеты белдереүенә һылтанма менән. Билдәләнеүенсә, илдәр 2026-2032 йылдарҙағы ярыштарҙы күрһәтеүселәр исемлегенә инмәгән. Бындай медиахоҡуҡты Европа телевидениеһы союзы һәм Warner Bros. Discovery алған. Шул уҡ ваҡытта Олимпия уйындары донъяның 49 илендә күрһәтеләсәк.

ҠЫҪҠАСА

# БӘЙГЕЛӘ ЕҢҺӘҢ...

**Рәсәйҙең Мәғариф министрлығы 2023 йылдан "Йыл уҡытыусыһы" конкурсы еңеүселәренә 1 миллион һум түләргә тәҡдим иткән ҡарар проектын әҙерләгән.** "2023 йылдан башлап йыл һайын "Рәсәйҙең йыл уҡытыусыһы" һөнәри оҫталыҡ конкурсы еңеүсеһенә һәм призерҙарына аҡса түләргә. Уның күләме: еңеүсегә - 1 миллион һум, призерҙарҙың һәр береһенә - 500 мең һум", - тиелә документ тексында. "Рәсәйҙең йыл тәрбиәсеһе", "Рәсәйҙең йыл директоры", "Рәсәйҙең педагог-психологы", "Рәсәйҙең уҡытыусы-дефектологы", "Йыл оҫтаһы" һәм "Йөрәгемде балаларға бирәм" һөнәри конкурстары еңеүселәренә 200-шәр мең һум түләргә тәҡдим иткәндәр.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров өсөнсө йыл рәттән "Медиалогия" компанияһы төҙөгән медиарейтингта Волга буйы федераль округы буйынса коллегалары араһында беренсе урынды биләй.** Рәсәй төбәктәре башлыҡтарының дөйөм рейтингында ул етенсе баҫҡыста тора. Был рейтингта беренсе урында - Мәскәү мэры Сергей Собянин, икенселә Чечня Башлығы - Рамзан Ҡадиров, өсөнсөлә иһә Мәскәү өлкәһе губернаторы Андрей Воробьев. Тәүге унау араһында шулай уҡ Белгород өлкәһе башлығы Вячеслав Гладков, Санкт-Петербург губернаторы Александр Беглов, Ҡырым башлығы Сергей Аксенов, Татарстан президенты Рөстәм Миңлеханов, Түбәнге Новгород өлкәһе губернаторы Глеб Никитин һәм Курск өлкәһе етәксеһе Роман Старовойт бар. "Медиалогия" эксперттары Башҡортостан Башлығының юғары позицияһын Радий Хәбировтың Рәсәйҙең яңы төбәктәрендә йәшәүселәргә гуманитар ярҙам буйынса әүҙем эш алып барыуы, республиканың махсус хәрби операция зонаһында хәрби бурысын үтәгән яҡташтарыбыҙға, шулай уҡ уларҙың ғаиләләренә адреслы ярҙам күрһәтеүе менән аңлата.

✓ **Башҡортостан Башлығы Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Белоруссия менән хеҙмәттәшлек республиканың тышҡы иктисади эшмәкәрлегендә төп өҫтөнлөктәрҙең береһе булыуын билдәләне.** "Унда беҙҙең менән эшләргә әҙер булған эшлекле кешеләр, көслө етәкселәр йәшәй. Беҙ бик күп пландар, өмөт, оптимизм менән ҡайттыҡ. Беларусь, предприятиелар, белорустар менән мөнәсәбәттәрҙе үҫтереү мәсьәләһенә етди иғтибар бүлергә кәрәк, был беҙҙең эштә өҫтөнлөклө йүнәлештәрҙең береһе булып тора", - тине Радий Хәбиров. Ьынан алдараҡ Башҡортостан Башлығының Беларусь премьер-министры Роман Головченко менән осрашыуында предприятиеларҙы берләштереү мәсьәләләрен тикшереүҙәре хаҡында хәбәр ителгәйне. Осрашыуҙа яҡтар сәнәғәт өлкәһендә ғәмәлгә ашырылған кооперация проекттарын, лифт ҡорамалдарына, ашлыҡ киптереү комплекстары производствоһын булдырыуға ҡағылышлы проекттарҙы тикшерҙе. Уҙған йылдың 11 айы йомғаҡтары буйынса Беларусь менән Башҡортостандың тауар әйләнеше 10 процентҡа ашыуға артҡан.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЯУГИРҘАРҒА ТҮЛӘҮҘӘР



**Рәсәйҙең оборона министры Сергей Шойгу мобилизацияланғандарға социаль түләүҙәр тәртибен раҫланы.**

Бойороҡҡа ярашлы, мобилизацияланғандарға айлыҡ социаль түләүҙәр уларҙы хәрби вазифаға тәғәйенләгән көндән алып унан бушатылған көнгә тиклем башҡарылырға тейеш. Контракт төҙөгәндә был аҡса ул үҙ көсөнә ингәнгә тиклем иҫәпләнә. Тулы булмаған календарь ай өсөн пособие күләме ошо ай эсендә хеҙмәт иткән көндәрҙең һаны буйынса билдәләнә.

Әйткәндәй, Республика Башлығы Радий Хәбиров Башҡортостандың М.Шайморатов, А. Доставалов һәм С. Юлаев исемендәге ирекле батальондары хәрбиҙәренә 200 мең һум аҡса түләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Башҡортостандан үҙ теләге менән махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан яугир 180 көн хеҙмәт итһә, республика уға 200 мең һум түләй. "Беренсе контрактҡа ҡул ҡуйғанда 200 мең һум күләмендәге бер тапҡыр бирелә торған түләү бар ине. Мәсьәләне өйрәнгәндән һуң ғәҙел ҡарар ҡабул иттек, ул барыһын да тигеҙләй. Әгәр ирекле батальон яугиры алғы һыҙыҡта 180 көн хеҙмәт итһә, республика уға 200 мең түләй, тағы 180 көн хеҙмәт итһә, республика йәнә 200 мең һум бүлә. Хөкүмәттән был эште тиҙ арала ғәмәлгә ашырылыуҙы һорайым", - тине Радий Хәбиров.

# ГАЗ ҮТТЕМЕ ӘЛЕ?

**Башҡортостанда социаль газ үткәреүгә хоҡуҡлы граждандарҙың категориялары исемлеген киңәйтеүҙәре ихтимал. Был хаҡта республика етәксеһе Радий Хәбиров хәбәр итте.**

"2019 йылдан Башҡортостанда ғаиләләрҙең айырым категорияларына (Бөйөк Ватан һуғышы инвалидтарына, ветерандарына, хәрби хәрәкәттәр ветерандарына, күп балалы аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә) йортҡа газ һуҙыу өсөн сертификаттар тапшырабыҙ. Уҙған йылдың ноябренән махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың ғаиләләрен ошо исемлеккә индерҙек. Хәҙер исемлекте артабан киңәйтергә уйлайбыҙ. 2023 йылдың 1 ғинуарынан барлыҡ категориялар өсөн сертификаттың номиналы 100 мең һум тәшкил итә", - тип яҙҙы Радий Хәбиров.

Социаль газ үткәреү программаһын Рәсәй Президенты тәҡдим итте. Ул газ селтәрҙәре һалынған тораҡ пункттарҙа ғәмәлгә ашырыла. Былтыр 2 375 ғаиләгә газ үткәреү өсөн сертификаттарҙан файҙаланған, дөйөм сумма 178 миллион 587 мең һум тәшкил иткән. Программа башланғандан алып республикала 665 миллион 200 мең һумлыҡ 8 437 сертификат бирелгән. Сертификат алыуға иҫәпкә тороу өсөн граждандарға йәшәгән урын буйынса республиканың халыҡҡа социаль ярҙам үҙәгенә йәки күп функциялы үҙәккә мөрәжәғәт итергә кәрәк.

# АЛДА - ИМТИХАНДАР

**Республиканың мәғариф министры Айбулат Хажин 2023 йылда Берҙәм һәм төп дәүләт имтихандарын уҙғарыу ваҡытын иғлан итте.**

2023 йылда Берҙәм дәүләт имтиханын ваҡытынан алда тапшырыу осоро - 20 марттан 19 апрелгә, төп осор - 26 майҙан 1 июлгә, өҫтәмә осор - 6 сентябрҙән 19-ына тиклем. 26 майҙа төп осор география, әҙәбиәт һәм химия буйынса һынауҙар менән асыла. Информатика һәм мәғлүмәт-коммуникация технологиялары буйынса БДИ, шулай уҡ сит телдәрҙән имтихандың "Аралашыу" бүлеге өсөн икешәр көн ҡаралған. Сит телдәр буйынса имтихандың "Аралашыу" бүлеген - 16 һәм 17 июндә, информатика һәм мәғлүмәт-коммуникация технологиялары буйынса БДИ-ны 19 һәм 20 июндә үткәреү планлаштырыла. Беренсе мотлаҡ фәнде, рус телен, сығарылыш уҡыусылары 29 майҙа тапшыра. Нигеҙ һәм профиль кимәлендәге математика буйынса икенсе мотлаҡ имтихан бер көндә - 1 июндә була. 5 июндә - тарих һәм физика, 8 июндә - йәмғиәтте өйрәнеү, 13 июндә биология һәм сит телдәрҙән имтихан үткәрелә.

Туғыҙынсы кластар өсөн төп дәүләт имтиханын уҙғарыу ҙа өс осорға бүленгән: ваҡытынан алда (21 апрелдән 16 майға), төп (24 майҙан 1 июлгә) һәм өҫтәмә (4 сентябрҙән 23-нә тиклем). 2023 йылда имтихандарҙың төп осоро 1 июлдә тамамлана. Мәғариф министры һүҙҙәренсә, берҙәм дәүләт имтиханында ҡатнашыу өсөн ғаризаны - 1 февралгә, ә төп дәүләт имтиханына 1 мартҡа тиклем бирергә мөмкин.

# ЕҢЕҮ БАЙРАҒЫ КҮСЕРМӘҺЕ...

**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы депутаттары былтыр декабрь айындағы ултырышта аҙаҡҡы уҡыуҙа "Башҡортостан Республикаһының асыҡ власы органдарының Еңеү байрағы күсермәләрен ҡулланыуы тураһында" закон ҡабул итте.**

Уға ярашлы, 9 Майҙа дәүләт власы һәм урындағы үҙидара органдары бинаһарына дәүләт флагтары менән бер рәттән, Еңеү байрағы күсермәләре лә эленергә тейеш. Бынан тыш, яңы законда тантаналы саралар үткәргәндә һәм Бөйөк Ватан һуғышы һәйкәлдәренә сәскәләр һалғанда Еңеү байрағы күсермәләрен ҡулланыу тәртибе билдәләнә. Башҡортостан парламенты спикеры Константин Толкачев был яңылыҡтың тарихи хәтерҙе һаҡлауға һәм илһөйәрлек тәрбиәләүгә йүнәлтелгәнен билдәләне. "Еңеү байрағын күтәреү - ул тантаналы сара ғына түгел. Был, тәү сиратта, замандаштарыбыҙҙың фашизмды еңгән быуынға рәхмәт билдәһе. XX быуат тарихындағы героик һәм шул уҡ ваҡытта фажиғәле биттәр хаҡында хәтер быуындан-быуынға күсергә тейеш", - тип иҫәпләй Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы спикеры.

# БЕРЛӘШТЕРЕЛДЕ

**Республикала берҙәм пособие түләнә башланы. Бөгөнгә Башҡортостанда 17 йәшкә тиклемге 9 675 балаға берҙәм пособие тәғәйенләнгән, тип хәбәр иттеләр Рәсәй Социаль фондының республика буйынса бүлексәһенән.**

Әлеге ваҡытта Фондтың төбәк бүлексәһенә дәүләт хеҙмәттәре порталы аша яңы пособие алыу өсөн бөтәһе 35 меңдән ашыу ғариза килгән. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ғаризалар 28 декабрҙә ҡабул ителә башланы, 4 ғинуарҙа

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә юниорҙар араһында биатлон буйынса Рәсәй беренселеге һәм Бөтә Рәсәй ярыштары уҙғарыла. Ярыштар 3-10 февралдә биатлон буйынса олимпия резервы мәктәбенең спорт комплексында ойоштороласы. Ин көслөләр исеме өсөн Рәсәйҙең 28 төбәгенән 19-21 йәшлек 185 спортсы көс һынаша. Уларҙы суперспринт, ҡатнаш эстафета һәм масстарт кеүек ярыштар көтә.

✓Өфөнөң "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбле Силәбе өлкәһенең һәм Пермь крайының 10-дан ашыу ҡала һәм ауылдарына гастролдәргә сығырға ниәтләй. Быға ансамблдең икенсе йыл рәттән "Беҙ - Рәсәй" федераль программаһында ҡатнашыуы һөҙөмтәһендә өлгәшелде. 2023 йылда "Беҙ - Рәсәй" программаһы сиктәрендә бөтәһе 55 гастроль турын уҙғарыу күҙаллана, унда 51 ижади коллективтың ҡатнашыуы көтөлә. Гастролдәр илдең 81 төбәгендә һәм 216 ҡала-ауылдарында ойоштороласы. "Мираҫ" ансамбле федераль программала былтыр ҡатнаша башланы. Ул саҡта коллектив Ханты-Манси автономиялы округы - Югра буйлап гастролдә йөрөнө.

✓2023 йылдың февралендә Башҡортостанда йәшәүселәрҙе Ватанды һаҡлаусылар көнө уңайынан оҙайлы ялдар көтә. Килһе айҙа 28 календарь көн. Шуның аҙнаһына биш көн эшләгән граждандар өсөн 18 эш көнө - 17 тулы һәм 1 ҡыҫҡартылған көн, шулай уҡ 10 ял һәм байрам көнө. Быйыл Ватанды һаҡлаусылар көнө кесе йомаға тап килә, шулай уҡ ғинуарҙағы байрам көндәренең береһе 24 февралгә (йома) күсерелгән. Шулай итеп, йылдың икенсе айында граждандарҙы 23 февралдән 26-на тиклем оҙайлы ялдар көтә.

✓Илебеҙ уҡыусыларын "Мәктәп уҡыусылары өсөн мәҙәниәт.РФ" интернет-порталына ҡушылырға саҡыралар. Белем биреү онлайн-майҙансығы 2022 йылда асылған. Порталға инеү бушлай. Уның менән балалар, уларҙың ата-әсәләре һәм уҡытыусылары файҙалана ала. Ресурс мәҙәниәтте популярлаштырыуға йүнәлтелгән. Уны дәрес әҙерләгәндә өҫтәмә әсбап итеп тә файҙаланырға мөмкин. Ҡулланыусыларға ҡыҙыҡлы булһын өсөн материалдарҙы даими яңыртып тороу күҙаллана.

**"БАШИНФОРМ" материалдарын файҙаланылды.**

✓ *Өфөнөң бер нисә юғары уҡыу йорто ғалимдары бейә һөтөн эшкәртеү һәм һаҡлауҙың уникаль технологияһын булдырыу менән шөғөлләнә. Ул продуктты зарарһыҙландыра, шул уҡ ваҡытта уның файҙалы үҙенсәлектәрен һаҡлай.*



ата-әсәләрҙең мөрәжәғәттәрен Социаль фондтың клиент хеҙмәттәре лә ҡабул итте. "Ғаризаларҙы ҡарау 3 ғинуарҙа башланды, хәҙерге ваҡытта 17 йәшкә тиклемге 9675 балаға түләүҙәр хупланды. Берҙәм пособие биреүҙең ғәмәлдәге ваҡытын иҫәпкә алып, ғаиләләр тәүге түләүҙе ошо арала ала башланы. Аҡса документ тултырғанда күрһәтелгән иҫәпкә күсерелә. Шулай уҡ 143 йөклө ҡатын-ҡыҙҙың ғаризаһы буйынса ыңғай ҡарар сығарылды", - тип белдерҙеләр Рәсәй Социаль фонды Башҡортостан бүлексәһенең матбуғат хеҙмәтендә. Бынан тыш, ғинуарҙың тәүге көндәрендә уҙған йылдың аҙағына тиклем республика ғаиләләрендә 3 йәшкәсә 564 беренсе сабыйға түләүҙәр хупланды. Хәҙер был түләү берҙәм пособиеға инә һәм яңы ҡағиҙәләр буйынса рәсмиләштерелә. Шул уҡ ваҡытта, әгәр бала 2023 йылға хәтлем тыуған икән, ата-әсә пособиены бынан алда ғәмәлдә булған шарттар буйынса алырға мөмкин. Йәғни мөлкәтте иҫәпкә алмайынса һәм ғаиләнең килеме юғарыраҡ булған осраҡта - бер кешегә ике йәшәү минимумы сиктәрендә.

# ЙӘШӘҮ МИНИМУМЫ...

**Башҡортостан Хеҙмәт министрлығы хәбәр итеүенсә, 1 ғинуарҙан йәшәү минимумы, эшләмәгән пенсионерҙар өсөн страховка пенсиялары һәм хеҙмәткә түләүҙең минималь күләме арттырыла.**

2022 йыл өсөн индексация ике этапта - 2022 йылдың 1 июненән 10 процент һәм 2023 йылдың 1 ғинуарынан уҙҙы, тип билдәләнә. Шулай итеп, 1 ғинуарҙан страховка пенсиялары тағы 4,8 процентҡа, йәшәү минимумы - 3,3 процентҡа, ә хеҙмәткә түләүҙең минималь күләме 6,3 процентҡа артты. 2023 йылдың 1 ғинуарынан эшләмәгән граждандар өсөн ҡартлыҡ буйынса страховка пенсияһының уртаса күләме 21 864 һум була.

Башҡортостанда йән башына йәшәү минимумы - 12 650 һум, эшкә һәләтле халыҡҡа - 13 789 һум, пенсионерҙарға - 11 990 һум, балаларға - 12 271 һум. Минималь эш хаҡы күләме 16 242 һумға етте. Башҡортостанда район коэффициенты (1,15) менән бергә МРОТ - 18678,3 һум, Межгорье ҡалаһында иһә юғары район коэффициенты (1,7) менән бергә иҫәпләгәндә 27 611,4 һум тәшкил итә. 2023-2025 йылдарға Башҡортостанда минималь эш хаҡы тураһында социаль партнерлыҡ яҡтары ҡул ҡуйған килешеүгә ярашлы, 2023 йылдың 1 ғинуарынан республиканың бюджеттан тыш өлкә хеҙмәткәрҙәренә - 19 743 һум, ә бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәренә 18 678 һум күләмендә минималь эш хаҡы билдәләнә. Башҡортостанда бюджеттан тыш хеҙмәткәрҙәрҙең минималь эш хаҡы - 12,3 процентҡа, ә бюджет хеҙмәткәрҙәренеке 6,3 процентҡа арта.

# ОҘАЙЛЫ ТӨҘӨЛӨШКӘ...

**Башҡортостан - оҙайлы төҙөлөшкә ҡаршы көрәш буйынса иң яҡшы төбәктәр иҫәбендә. 2022 йылда республикала 66 алданған өлөшсөләр йорто проблемаһы хәл ителгән.**

Территорияларҙы үҫтереү фонды уҙған йылға йомғаҡ яһаны. Фондтың күҙәтеү советы рәйесе - Рәсәй Хөкүмәте вице-премьеры Марат Хөснуллин һүҙҙәренсә, 2022 йылдың 1 ғинуарына илдә 2,5 мең йорт проблемалылар иҫәбенә инһә, ә 2023 йылдың 1 ғинуарына проблемалы объекттарҙың берҙәм реестрында - 1,2 мең объект. "Территорияларҙы үҫтереү фонды менән субъекттарҙың берлектәге эше һөҙөмтәһендә оҙаҡ төҙөлгән йорттар 1315-кә, йәғни ике тапҡырға тиерлек кәмегән, - тип билдәләне Марат Хөснуллин. - Был объекттар өлөшсөләренең хоҡуҡтары федераль йәки төбәк механизмдары менән яҡланған. Улар фатир аҫҡыстары йәки үҙҙәренә тейешле компенсация алырға хоҡуҡлы", - тип билдәләне вице-премьер. Территорияларҙы үҫтереү фондының генераль директоры Илшат Шаһиәхмәтов объекттар һанын кәметеүҙә ыңғай динамика күҙәтелгән төбәктәрҙе атаны: "Мәскәү, Ленинград, Новосибирск өлкәләре, Краснодар крайы, Башҡортостан", - тине ул. "Башинформ" хәбәр иткәнсә, быйыл Башҡортостанда 39 проблемалы объекттың алданған өлөшсөләре мәсьәләһен хәл итеү бурысы тора. Бер йыл элек был һан 106 ине.

# БЕЙӘ ҺӨТӨНӘН...



**Башҡортостанда бейә һөтөн эшкәртеү һәм һаҡлауҙың уникаль технологияһы булдырылды.**

Өфөнөң бер нисә юғары уҡыу йорто ғалимдары бейә һөтөн эшкәртеү һәм һаҡлауҙың уникаль технологияһын булдырыу менән шөғөлләнә. Ул продуктты зарарһыҙландыра, шул уҡ ваҡытта уның файҙалы үҙенсәлектәрен һаҡлай һәм бейә һөтөн оҙаҡ һаҡлау мөмкинлеген бирә. Яңы технология аҙыҡ-түлек һәм косметика сәнәғәтендә киң ҡулланыла ала. "Проектты тормошҡа ашырыу һәм уны баҙарға сығарыу өсөн аҡсаны Инновацияларға булышлыҡ итеү фонды бүлде: уның авторҙары "Старт" федераль конкурсы сиктәрендә 3 миллион һум алды. Грант аҡсаһына улар һынауҙарҙы тамамларға, аҙ тонналы етештереү өсөн тулы үлсәмле ҡоролма әҙерләргә һәм быйыл яңы технологияны ҡулланып, ҡоролмалар етештереүҙе башларға мөмкин", - тине Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары һәм сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министры Александр Шелдяев.

Яңы технологияны эшләүҙе ӨДНТУ, БДАУ, БДМУ новаторҙар командаһы, шулай уҡ "Благзавод" ғилми-производство үҙәге алып бара. Лаборатор тикшереүҙәр үткәрелә, продукттың тәжрибә партиялары әҙерләнә, бейә һөтөн эшкәртеү ҡоролмаһының прототибы булдырыла. "Бейә һөтө балалар туҡланыуында һыйыр һөтөнә альтернатива булараҡ һәм косметикала ҡулланыла. Әммә ул баҙар күләмендә етештерелмәй, сөнки продуктты һаҡлауы ауыр. Һөттөң башҡа төрҙәренән айырмалы рәүештә, уны пастеризациялау ҙа, стериллəштереү ҙә мөмкин түгел - йылытыу бейә һөтөн файҙаһыҙ ризыҡҡа әйләндерә. Йылытҡанда май кислоталары окислана һәм хатта канцероген барлыҡҡа килә", - тип аңлата проект етәксеһе Гүзәл Ардаширова.

Башҡортостан ғалимдары тәҡдим иткән технология бейә һөтөн эшкәртеүҙең өс этабын үҙ эсенә ала. Беренсе стадияла ультрафиолет нурҙар тәьҫирендә микроорганизмдар күпләп үлә, шулай уҡ D витамины миҡдары ла арта. Һуңғы стадияла һөттөң бактериаль бысраҡлығы кәмей. Идея авторҙары бейә һөтөн эшкәртеү өсөн ике төр ҡорамал етештерергә ниәтләй: береһе - 5 бейә тотолған бәләкәй, икенсеһе - 200-гә тиклем бейә тотолған хужалыҡтар өсөн. Бынан тыш, косметика продукцияһы етештерелә һәм һатыуға әҙерләнә.

2022 йыл башынан Башҡортостандың 96 авторы Инновацияларға булышлыҡ итеү фондынан 304 миллион һум күләмендә грант ярҙамы алды. Әлеге ваҡытта "Старт-1" конкурсында ҡатнашыу өсөн ғаризалар ҡабул ителә, уның еңеүселәре проектты эшләү өсөн 4 миллион һумға тиклем аҡса ала. Шулай уҡ бында бушлай консультация алырға мөмкин.

ҠЫҪҠАСА

# УҢАЙЛЫҠТАР АРТА...

**"НефАЗ" маркалы тағы 35 яңы автобус Өфө маршруттарына сыҡты.** Республика уларҙы "Хәүефһеҙ һәм сифатлы автомобиль юлдары" милли проекты сиктәрендә һатып алған. Алдағы ике йылда дәүләт ташыусыһына ҡала маршруттарын хеҙмәтләндереү өсөн газ-мотор яғыулығында эшләгән 85 ҙур класлы автобус бүленергә тейеш. Яңы автобус аҫҡыстарын Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тапшырҙы. "Дүрт йыл элекке Өфө урамдары менән хәҙергеһен сағыштырғанда, пассажирҙар һәм халыҡ өсөн бөтөнләй икенсе шарттар. Шулай ҙа хәл ителмәгән мәсьәләләр бар, улар араһында - "Башавтотранс" автобус паркын яңыртыу", - тине Радий Хәбиров. Башҡортостан илдең яңы федераль программа буйынса яңы автобустар алған беренсе төбәге булды, тип билдәләне "Башавтотранс"тың генераль директоры Надир Самиев. Яңы автобустар 75-се "Пушкин сауҙа-сервис комплексы - Амстар йәмғиәте" маршруты буйынса йөрөй.

✓ **Баш ҡаланың Ленин районында урындағы инициативаларҙы тормошҡа ашырыуға (ППМИ) нигеҙләнгән йәмәғәт инфраструктураһын үҫтереү проекттары республика конкурсында ҡатнашыу өсөн 14 ғариза туплана.** Быйыл һәр еңгән проектҡа төбәк субсидияһын 1 миллион һумдан 1,2 миллион һумға тиклем арттырыу планлаштырыла, тимәк, урындағы бюджет, ҡала бюджеты өлөшө лә артасаҡ. Баһалау критерийҙары буйынса ла үҙгәрештәр көтөлә. Шулай уҡ муниципаль берәмектәрҙән ғаризаларҙы халыҡ һанына ҡарап сикләү ҙә күҙаллана. Шуға күрә Ленин районы буйынса барлығы 40 инициатива белдерелһә лә, иң беренсе тапшырылған 14 проект ҡына әҙерләнәсәк, башҡалары иһә киләһе йылға ҡала. Был конкурста ҡатнашып, Волга урамында йәшәүселәр юлдарға асфальт һалыу буйынса проект әҙерләй; Осоусылар урамы, Аксаков урамы, 62 адресы буйынса йорт ихатаһында, 35-се, 10-сы белем биреү үҙәктәрендә, 39-сы гимназияла, 24-се мәктәптә, 2,6, 138-се балалар баҡсаларында булған майҙандарҙы, шул иҫәптән резина ҡатлам түшәүҙе лә индереп, яҡшыртыу, 8, 330-сы балалар баҡсаһы территорияһында асфальт һалыу һәм яңы уйын ҡорамалын урынлаштырыу, Ә. Исҡужин исемендәге балалар сәнғәт мәктәбе эргәһендәге территорияны төҙөкләндереү проекттары тулыландырыла.

✓ **Өфөлә грек-рим көрәше буйынса Рәсәй чемпионаты ойошторола. Башҡортостандың баш ҡалаһына чемпион исемен яулар өсөн иң көслө спортсылар килә. Турнир Рима Баталова исемендәге спорт әҙерлеге үҙәгендә үткәрелә.** Чемпионатта Башҡортостандан 12 спортсы ҡатнаша. Республиканың йыйылма командаһына Белорет мәктәбе тәрбиәләнеүсеһе, халыҡ-ара класлы спорт мастеры Сәид-Хөсәйен Бакаев, Өфө мәктәбе тәрбиәләнеүсеһе, спорт мастеры Нохчо Лабазанов, халыҡ-ара класлы спорт мастеры, Рәсәй чемпионаты призеры, донъя һәм Европа беренселеге еңеүсеһе Ислам Опиев инде. Шулай уҡ команда составында келәмгә Максим Криницин, Аркадий Арикян, Александр Чегодаев, Фәнис Вәлитов, Данила Назаров, Алан Амриев, Эрик Шамилов, Басхан Саидов һәм Адлан Әмриев сыға. Чемпионат 7-9 февралдә уҙғарыла. Миҙалдар 10 ауырлыҡ категорияһында уйнатыла. Ярыштар Өфө ваҡыты буйынса иртәнге сәғәт 10-да башлана. Инеү иркле.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡара үлән

❖ Русса "чернушка посевная", ә башҡортса "ҡара үлән" тип аталған, халыҡта "черный тмин" булараҡ билдәле үлән иммунитет өсөн бик файҙалы сифаттарға эйә. Ул арыуҙы, подагра һәм ревматизм осрағында һыҙланыуҙы баҫа, эс ҡатыу, бөйөр һәм бәүел ҡыуығынан таштарҙы, үтте сығара, паразиттарҙы үлтерә, яман шешкә ҡаршы дауала ла ҡулланыла. Бер йылға көс-ҡеүәт тупларға булышлыҡ иткән дауаланыу ысулы ла бар. Ҡара үлән орлоғон күп итмәй генә алып ҡәһүә тартҡыста онтаҡларға һәм көнөнә ике тапҡыр берәр балғалаҡ ашарға. Орлоҡ онтағын оҙаҡҡа етерлек итеп алдан әҙерләп ҡуймаҫҡа. Был рәүешле 1 ай дауамында дауаланғас, 1 аҙна туҡталып торорға һәм тағы башларға, шунан тағы 1 аҙнаға туҡталып, тағы дауаланырға. Бөтәһе 3 ай килеп сыға. Әммә шуныһы бар: ҡара үлән орлоғон саманан тыш күп ҡулланыу аналыҡтың ҡыҫҡарыуына этәргес булып тора, ә был үҙ сиратында бала төшөүгә килтереүе ихтимал.

## Һарымһаҡ

❖ Өлкән йәштәгеләргә хәтер насарайыуҙы иҫкәртеү маҡсатында яҙлыкөҙлө һарымһаҡ төнәтмәһен эсеү файҙалы. Уны әҙерләү өсөн 350 грамм һарымһаҡты иҙеп, өҫтөнә 200 грамм араҡы ҡойорға һәм ҡара шешәлә ҡараңғы урында 21 көн тоторға. Көн һайын 3-5 тапҡыр болғатып торорға. Шунан төнәтмәне һөҙөп алырға. Көндә иртәнсәк бер стакан һөткә һарымһаҡ төнәтмәһен тамыҙып эсергә. 1 тамсынан башлап 25-кә тиклем еткерергә. Был дауа хәтер насарайыуҙы иҫкәртеү генә түгел, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары, иғтибарһыҙлыҡ, ҡолаҡ һәм баш шаулағанда, инсульт йәки инфаркт кисергәндән һуң да ярҙам итеүе ихтимал. Әммә ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙары менән сирлеләр һарымһаҡ менән дауаланғанда үҙен тойомлауға иғтибарлы булһын.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

**✓ Ҡабул ителгән сараларҙың һөҙөмтәһе күренә лә инде. Мәҫәлән, 2010 йылда иректән мәхрүм итеү урындарында 694 мең кеше булһа, 2022 йылдың ноябренә был һан 439 меңгә ҡалған.**



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

## Хәситә, әмәйҙек, дәүәт

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының биҙәүестәре араһында һул иңбаштан уң ҡултыҡ аҫтына төшөрөп түшкә ҡырын кейә торғандары ла бар. Улар хәситә, әмәйҙек, дәүәт атамалары менән билдәле. Диалектологик экспедициялар мәғлүмәттәренә ҡарағанда, хәситә һүҙе Бөрө, Нуриман, Благовар, Кушнаренко, Иглин, Өфө, Ҡырмыҫҡалы, Учалы, Ишембай, Белорет, Әбйәлил, Мәләүез, Күгәрсен, Баймаҡ, Күмертау, Ейәнсура, Хәйбулла райондарында һәм Ырымбур, Һарытау өлкәләрендә теркәлһә, әмәйҙек Яңауыл, Тәтешле, Мәсетле, Балаҡатай, Ҡыйғы, Салауат, Архангел, Ишембай, Стәрлебаш, Федоровка, Мәләүез, Бөрйән, Күмертау, Ейәнсура, Йылайыр райондарына һәм Пермь крайы, Свердловск, Силәбе, Ҡурған өлкәләренә хас. Ә бына дәүәт иһә Краснокама, Илеш, Дүртөйлө, Баҡалы, Саҡмағош, Бүздәк, Туймазы, Благовар, Шишмә, Дәүләкән, Бәләбәй, Бүздәк, Ауырғазы, Архангел, Әлшәй, Йәрмәкәй, Миәкә, Ғафури, Бишбүләк, Стәрлебаш, Ишембай райондарында һәм Ырымбур өлкәһендә күҙәтелә. Күренеүенсә, бер үк төбәктә бер нисә атаманың ҡулланылыу осраҡтары ла бар. Был төр биҙәүестәр тураһында тәүге мәғлүмәттәр XVIII быуаттың аҙаҡтарында башҡорттар араһында булып киткән академик Петр Палластың яҙмаларында сағылыш таба. Бына нисек һүрәтләй ул уны: яҫы, иңбаштан орден кеүек һалынып төшөп тора, ваҡ тәңкәләр, мәрйендәр, башҡа төр әйберҙәр менән биҙәлгән. 1905-1908 йылдарҙа башҡорт халҡының йәшәйешен өйрәнгән күренекле ғалим Сергей Иванович Руденко "Башҡорттар" исемле китабында хәситә, әмәйҙек, дәүәт араһындағы айырмалыҡтарға туҡталып китә. Уның яҙыуынса, 15-20 см киңлектәге таҫманан торған әмәйҙек ваҡ тәңкә һәм мәрйендәр менән биҙәлгән. Аҫҡы яғындағы селтәрҙең ситендә тәңкәләр тора. Иллюстрация рәүешендә ҡатай башҡорттарында төшөрөлгән фотоны килтереп, алғы рәттә ултырған ҡыҙҙарҙың тап әмәйҙек тағып алғанлығын күрһәтә.



Әйтергә кәрәк, күренекле этнограф С.А. Авижанская Силәбе өлкәһенә ойошторолған экспедиция ваҡытында бала өсөн эшләнгән әмәйҙекте күрә. Уның яҙыуынса, ул ярым түңәрәк нигеҙҙән тора, дүрт рәт мәрйен, боронғо һәм совет осоро аҡсалары, төймәләр, уртаһында тишеге булған мәрүәт пластиналар (һөҙән) менән биҙәлгән. Әмәйҙектән айырмалы рәүештә, дәүәттә С.И. Руденко мәрйендәр ҡулланылмауын билдәләй. Нигеҙенә тәңкәләр, эре аҡыҡ, ҡаштар тегелгән. Ҡайһы берҙә ситен уҡа менән дә биҙәгәндәр.

**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан.**

ХОҠУҠ



# ЕНӘЙӘТ КОДЕКСЫНА...

**Социаль селтәрҙәрҙә РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров хәбәр итеүенсә, Рәсәйҙең Енәйәт кодексының 76.1 һәм Енәйәт-процессуаль кодексының 28.1 статьяһына үҙгәрештәр индерелгән.**

Ул зыянды ҡаплауға бәйле енәйәт яуаплылығынан азат ителеү мөмкинлеге булған беренсе тапҡыр енәйәт эшләүселәрҙең, шул иҫәптән атап әйтелгән хоҡуҡи акттарҙың "Законһыҙ эшҡыуарлыҡ", "Законһыҙ банк эшмәкәрлеге", "Сит ил валютаһында йәки Рәсәй валютаһында аҡсаларҙы репатриация буйынса бурыстарҙы үтәүҙән баш тартыу тураһында"ғы пункттары буйынса язаға тарттырылыусыларҙы ла индереп, исемлеген киңәйтеүҙе күҙаллай. Шулай итеп, кеше һаналып киткән енәйәт эшләһә, алдан тикшереү һәм суд тәфтише барышында зыян күреүселәргә: граждандарға, ойошмаларға һәм дәүләткә килтерелгән зыянды ҡаплаһа, язанан азат ителә, енәйәт эше туҡтатыла. Бындай эш һуңғы 5 йылда даими алып барыла. Быға тиклем эшҡыуарға ҡарата эшҡыуарлыҡ йәки башҡа иҡтисади эшмәкәрлек буйынса Енәйәт кодексының 159, 160, 165, 201-се статьяларында телгә алынған енәйәттәрҙе ҡылыуҙа шик тыуһа, уларҙы һаҡ аҫтына алыу тыйылғайны. Шулай уҡ законда хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡын, пособиеларҙы һәм башҡа түләүҙәрҙе башҡармаған етәкселәрҙе, әгәр улар енәйәт эше ҡуҙғатылғандан һуң 2 ай эсендә бурыстарын һәм процентарын түләп бөтһә, енәйәт яуаплылығынан азат итеү яҙылған.

Ойошма һәм предприятиеларҙың, шәхси эшҡыуарҙарҙың эшен туҡтатмау маҡсатында енәйәт эше буйынса тәфтиш органдарына уларҙың электрон мәғлүмәт йөрөтөү сараларын тартып алыу тыйыла. Был үҙгәрештәр зыян күреүселәргә уның күләмендә зыянды ҡаплатыу, ә эшҡыуарҙарға артабан да эшмәкәрлеген дауам итеү мөмкинлеге бирә. Ҡабул ителгән сараларҙың һөҙөмтәһе күренә лә инде: енәйәт яуаплылығына тарттырылғандар һәм иректән мәхрүм итеү урындарында булғандар һаны кәмегән. Мәҫәлән, 2010 йылда иректән мәхрүм итеү урындарында 694 мең кеше булһа, 2022 йылдың ноябренә был һан 439 меңгә ҡалған.

# ТАШЛАМАЛЫ ИПОТЕКА

**Ташламалы ипотека программаһы 2024 йылдың 1 июленә тиклем оҙайтылды. Был хаҡтағы ҡарарға Хөкүмәт рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйҙы, тип хәбәр итә Хөкүмәттең матбуғат хеҙмәте.**

Яңы төҙөлгән йорттарҙа торлаҡ һатып алыуға, шәхси йорт төҙөүгә йәки уны төҙөү өсөн ер участкаһы һатып алыуға йылына 8 процентҡа тиклем ставка буйынса ташламалы ипотека кредитын алырға мөмкин. Ташламалы ставка буйынса кредиттың иң ҙур күләме Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта, Мәскәү һәм Ленинград өлкәләрендә 12 миллион һум тәшкил итә. Ҡалған төбәктәр өсөн 6 миллион һум. Тәүге иғәнә - 15 проценттан кәм түгел.

Кешеләр ошо сумма менән генә сикләнмәһен һәм торлаҡ һайлауҙа мөмкинлектәре күберәк булһын өсөн 2022 йылдың 1 майынан ташламалы ставканы 30 миллион һәм 15 миллион һумға тиклем файҙаланып, ипотека өсөн кредиттың иң ҙур күләме арттырылды. 12 миллион һәм 6 миллион һумды дәүләт субсидиялай, ҡалған сумманы баҙар йәки башҡа субсидияланған ставка буйынса бирергә мөмкин.

Яңы ҡарар менән ғаилә ипотекаһы программаһы шарттары ла киңәйтелде. Әгәр элек унда 2018 йылдың 1 ғинуарынан һуң барлыҡҡа килгән ғаиләләр ҡатнаша алһа, хәҙер иһә 18 йәше тулмаған ике балаһы булған ғаиләләр өсөн дә программа бар. Шул уҡ ваҡытта уларҙың тыуыу ваҡыты башҡаса әһәмиәткә эйә түгел.

Ғаилә ипотекаһы сиктәрендә кредит буйынса ставка элеккесә ҡала - йылына 6 процент. Субсидияланыусы кредиттың максималь күләме ташламалы ипотека шарттарына тура килә (айырым төбәктәр өсөн - 12 миллион, ҡалғандар өсөн - 6 миллион һум).

Ипотека программалары параметрҙары 2022 йылдың 15 декабрендә стратегик үҫеш һәм милли проекттар буйынса совет ултырышында Рәсәй Президенты ҡушыуы буйынса үҙгәртелде.

# МАШИНАЛЫЛАРҒА...

**Водитель таныҡлығының ғәмәлдә булыу ваҡыты 2022 йылдың 1 ғинуарынан 2023 йылдың 31 декабренә тиклемге осорҙа тамамланған ЮХХДИ биргән водитель таныҡлыҡтары автоматик рәүештә оҙайтыла.**

Ведомство хеҙмәткәрҙәре ваҡыты үткән таныҡлыҡтарҙы ҡабул итә һәм кәрәк булһа, уларҙы база буйынса тикшерәсәк. Рәсәйҙә 5 миллион автомобилсе таныҡлығының ғәмәлдә булыу ваҡыты оҙайтыласаҡ. Был яңылыҡтың инициаторы - Рәсәй Эске эштәр һәм Иҡтисади үҫеш министрлыҡтары. Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте вәкәләттәре сиктәрендә бойомға ашырылған һәм граждандар, бизнес өсөн административ көсөргәнеште кәметеүгә йүнәлтелгән. Таныҡлыҡ ваҡытын оҙайтыу транспорт өлкәһе предприятиеларын артыҡ көсөргәнештән азат итә, ил буйынса тауар ташыуҙы ябайлаштыра. Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты, Башҡортостандың Дәүләт автоинспекцияһының элекке етәксеһе Динар Ғилметдинов билдәләүенсә, дәүләт хеҙмәттәренә аҡса, документтар тултырырға ваҡыт сарыф итергә тура килмәйәсәк. Шулай уҡ Алыҫ Төньяҡ райондарында теркәлгән һәм хәүефле йөк ташыу өсөн тәғәйенләнгән транспорт сараларының диагностика картаһы 12 айға оҙайтыла. Был сара 600 компанияға ярҙам итәсәк.

# ҠАЙТАРЫП АЛ!

**2022 йылдан дауаланыу, балалар уҡытыу, хәйриә ярҙамын күрһәтеү һәм күсемһеҙ милек алыуҙан тыш, тағы физик культура-һауыҡтырыу хеҙмәтенә һалым ҡайтармаһын алырға мөмкин ине.**

Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев билдәләүенсә, һалым ҡайтармаһының күләме 120 мең һум билдәләнгән, ошо сумманың 13 процентын, йәғни 15600 һумды кире ҡайтарырға була. Уны алыр өсөн физик культура-һауыҡтырыу хеҙмәтенә түләгән сығымды раҫлаған документтарҙы, йәғни килешеү һәм касса чегы күсермәләрен тапшырыу мөһим. Ҡайтарма республиканың Спорт министрлығы исемлегенә индерелгән хеҙмәттәргә генә бирелә. Уны үҙең өсөн генә түгел, балалар өсөн дә алып буласаҡ. Документтарҙы эш биреүсе, шулай уҡ һалым инспекцияһы аша тапшырырға мөмкин. Эш биреүсе аша юллағанда йыл аҙағына тиклем тултырырға була ине. Был осраҡта һеҙҙең эш хаҡынан 13 процент НДФЛ тотолмаясаҡ, ә ул сумма һалым ҡайтармаһы түләнеп бөткәнсе һеҙҙең иҫәпкә күсерелеп барасаҡ. 2022 йылда түләнгән аҡсаның һалым ҡайтармаһын 2023 йылдан башлап алырға мөмкин. Шуны ла иҫәпкә алырға кәрәк: фитнес өсөн һалым ҡайтармаһы балалар уҡытыуға, дауаланыуға түләүҙән һәм хәйриә ярҙамынан тыш, башҡа социаль түләүҙәргә лә ҡушыла, йәғни, әгәр һалым осоронда үҙеңдең уҡыуыңа 10 мең һум түләү алырға тейеш булһаң, фитнес өсөн ҡайтарма 56 мең һумдан артмай.

# БЕРҘӘМ ПОСОБИЕҒА...

**2023 йылдың 1 ғинуарынан Башҡортостанда ярҙамға мохтаж йөклө ҡатын-ҡыҙҙарға һәм 17 йәшкәсә бала тәрбиәләгән ғаиләләр өсөн айлыҡ пособиелар билдәләнә.**

Аҡса алыусылар Башҡортостан биләмәһендә йәшәргә, ә йән башына уртаса килем төбәктәге йәшәү минимумынан артмаҫҡа тейеш. Пособиеға иртә иҫәпкә торған ауырлы ҡатын-ҡыҙҙар, шулай уҡ 17 йәшкә тиклемге балаһы булған ғаиләләр дәғүә итә ала. Түләүҙәр эшкә һәләтле халыҡтың йәшәү минимумы дәүмәленән 50, 75 йәки 100 процент тәшкил итә. Республика Хеҙмәт министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, Башҡортостан Башлығының ошо туралағы указы республикабыҙ биләмәһендә берҙәм пособие тураһында федераль законды тормошҡа ашырыу өсөн ҡабул ителгән.

3

# Мәғариф

"Киске Өфө"гәзитенең махсус бите

28 ғинуар - 3 февраль (һыуығай - шаҡай)

2023 йыл

№3 (1045)

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР



## КИРЕ ҠАЙТМАУ НӨКТӘҺЕ

Кире ҡайтмау нөктәһе (точка невозврата) тигән төшөнсә бар. Ҡурҡынысыраҡ төшөнсә, әлбиттә. Физика фәнендә ул бер мәғәнә аңлатһа, психологияла бөтөнләй икенсе мәғәнәгә эйә. Төрлөсә яңғыраһа ла, был күренештең асылы бер үк - кире ҡайтыр юл юҡ! Аңлайышлыраҡ булһын өсөн осоп барған самолетты күҙ алдына килтерәйек. Летчик алдан белә: яғыулыҡ шунсалыр километрға осоп барып кире әйләнеп ҡайтыуға етә - мәсәлән, мең километрға. Биш йөҙ километр ара үткәс, самолет кире бороларға тейеш, сөнки ул кире ҡайтмау нөктәһенә етте, летчик штурвалды ҡайтыу яғына бормаһа, һәләкәт буласаҡ.

Түбәндә һөйләйәсәк һүҙ ҙә кире ҡайтмау нөктәһен хәтерләтә һәм сикһеҙ борсой.

Бер көн улы атаһынан һораған:

- Элек һин яңы технологияларһыҙ нисек йәшәнең: интернетһыҙ, компьютерһыҙ, телевизорһыҙ, кондиционерһыҙ, кәрәҙле телефонһыҙ?

Атаһы яуап биргән:

- Һеҙҙең быуын йәшәгән кеүек: намаҙ-доғаһыҙ, башҡаларҙы йәлләмәй, намыҫ-выжданһыҙ, хөрмәт итә белмәй, оялмайса, тыйнаҡлыҡты онотоп, китаптар уҡымай...

Беҙ, 1939-1985 йылдарҙа тыуғандар, фатихалыбыҙ.

Беҙҙең тормош шуны иҫбатлай: уйындарҙа, велосипедта йөрөгәндә башҡа шлем киймәнек.

Мәктәпкә тәү көндән үк ҡурҡмайынса йөрөнөк.

Дәрестәрҙән һуң эңер төшкәнсе уйнай инек.

Бер ваҡытта ла ярты көнләп телевизор ҡараманыҡ.

Ысын дуҫтар менән уйнаныҡ, ә интернеттағылар менән түгел.

Сарсағанда шишмә һыуы эстек, шешәләрҙән түгел.

Йыш ауырыманыҡ, бер стакан һутты дүрт дуҫҡа бүлеп эсһәк тә.

Ябыҡ булдыҡ, яшыҡ инек, көн дә икмәк, картуф тызырһаҡ та.

Уйынсыҡтарҙы үҙебеҙ этмәләп, туйғансы уйнай инек.

Уртаҡ ине уйынсыҡтар ҙа, китаптар ҙа.

Атай-әсәйҙәребеҙ бай булманы. Һөйөүҙәрен бүләк иттеләр, рух ҡәҙерен аңлаттылар, кешелеклек ҡиммәттәрен аңдарыбыҙға һеңдерҙеләр - намыҫлы, тоғро булырға, оололарҙы хөрмәт итергә һәм эштән ҡурҡмаҫҡа өйрәттеләр.

Беҙҙә булманы: Смартфондар, YouTube, PlayStation, Xbox, видеоуйындар, ноутбуктар, интернет-селтәрҙәр. Әммә ысын дуҫтарыбыҙ булды!

Дуҫтарыбыҙға саҡырыуһыҙ ҙа йөрөнөк, беҙҙе ябай ғына аҙыҡтар менән һыйланылар.

Иҫтәлектәребеҙ ҡағыҙ фотоларҙа сағылды, әммә улар сағыу ине, ғаилә альбомдарын иҫтәребеҙ китеп ҡарай инек һәм олатай-өләсәйҙәр портреттарын ҡәҙерләп һаҡланыҡ.

Китаптарҙы сүпкә ташламаныҡ, сират баҫып ала инек уларҙы.

Шәхсән тормошобоҙҙо ситтәр хөкөмөнә дусар итмәнек, башҡаларҙыҡына ла ҡыҫылманыҡ, һинең һымаҡ кешенекенә ымһынманыҡ, үҙебеҙҙе инстаграмға ҡуйманыҡ, киң мәғлүмәт донъяһында ғаилә серҙәребеҙҙе асманыҡ.

Беҙ иң ғәжәп һәм иң сабыр быуын, сөнки беҙ ата-әсәләрен тыңлаған, балаларының һүҙҙәренә ҡолаҡ һалған һуңғы быуын.

Беҙ - ҡабатланмаҫҡа нәшер ителгәнбеҙ.

Беҙҙән өйрән!

Ҡәҙеребеҙҙе бел!

...Шулай итеп, поляк шағиры Петр Луканы Юрий Салатов русаға тәржемәләгән, мин башҡортсаға ауҙарып маташтым.

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

ӘЙТӘГҮР!

# УҠЫТЫУСЫ...

## хеҙмәт күрһәтеүсе генәме?



(Башы 1-се биттә).

Эйе, уҡытыусыға элек мөнәсәбәт икенсе ине. Уҡытыусы тигәндә, ошо һөнәргә һөйөү тәрбиәләгән үҙемдең һоҡланғыс уҡытыусыларымды, балалар йортонда эшләгән апайымды иҫемә төшөрәм. Нәҫелебеҙҙә педагогтар күп булды. Минең тәүге остазым - беренсе уҡытыусым Нәфисә апай. Тап уның өлгөһөндә киләсәгемде мәктәп, балалар менән бәйләнем дә инде. Һуңынан, урта синыфтарҙа ла, яҡшы уҡытыусыларға эләктем. Тулыр-тулмаҫ 17 йәшемдә ауылға пионер вожатыйы булып килгәс, ауылдың оло кешеләренең дә "апа" тип өндәшеүенә аптыраным, һуңынан абруйлы, ихтирамлы кешегә шулай өндәшкәндәрен аңланым.

Юғары белемде Бөрө ҡалаһында алдым, уҡытыусылар коллективы иң киткес ине, беҙгә бик яҡшы белем бирҙеләр, изге күңелле булырға өйрәттеләр. Шулай уҡ үҙемдең бик күп уҡыусыларыма ла остаз була алғанмындыр тием, сөнки улар бөгөн үҙҙәре башҡалар өсөн остаз. Улар менән бергәләп Олимпиада хәрәкәте остаздары ассоциацияһын ойоштороҡ, уҡыусыларҙы олимпиадаларға әҙерләйбеҙ. Был остаздар - студенттар, сессияла имтихандар тапшыралар, үҙҙәре лә олимпиадаларға йөрөйҙәр, төрлө конкурстарҙа ҡатнашалар, Рәсәй кимәлендә үҙ проекттарын яҡлайҙар һ.б.

Бөгөн уҡытыусы ниндәй булырға тейеш? Мәктәпкә балаларҙы яратҡан, улар менән мөнәсәбәт ҡора белгән, тирә-яҡтағыларҙы ихтирам иткән кешеләр барырға тейеш. Яңы эш башлаған уҡытыусы өсөн ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер торған коллегалары һәм шарттар булдырылған эш урыны булыуы яҡшы. Тураһын әйткәндә, бөгөн уҡытыусыға совет осорондағы хөрмәт һәм ихтирамды күрмәйем. Былтыр августа уҡытыусыларҙың Республика август кәңәшмәһендә ҡатнаштым. Бер аҙна алдан кәңәшмәнең темаһы "Балаларҙы һәм йәштәрҙе мәғлүмәт дәүерендә тәрбиәләү һәм социалләштереү" икәнен белеп, Мәғариф министрлығынан минә һүҙ биреүҙәрен һораным. Үкенескә күрә, Рәсәйҙең халыҡ уҡытыусыһы исемен йөрөткән берҙән-бер кеше - минә һүҙ бирмәнеләр, уның ҡарауы, Мәскәү ҡунаҡтары сығыш яһаны. Сығыштарҙа күберәген һандар ҙа, процентар... Тиҙҙән үҙебеҙ ҙә һандарға әйләнербеҙҙер. Ә ҡайҙа һуң Уҡытыусы - балаларҙың төп тәрбиәсеһе? Минеңсә, кәңәшмәнең темаһы асылманы, сөнки беҙҙең өсөн чиновниктар барыһын да үҙҙәре һәм үҙенсә хәл итә. Шуға күрә йылдан-йыл уҡытыусы булып эшләргә теләүселәр һаны ла кәмей бара.

Һуңғы 30 йыл мәктәптә эшләгәндә мин шуны аңланым - иң мөһиме, балаларға тәрбиә биреү. Юҡҡа ғына Бисмарк: "Һуғыштарҙы генералдар түгел, ә мәктәп уҡытыусылары еңә", - тимәгән дә, Уинстон Черчиль 1945 йылдағы Бөйөк Еңеүҙә совет мәктәбенең төп ҡаҙанышы тип билдәләмәгән. 90-сы йылдарҙа иһә мәктәптәрҙә балаларға тәрбиә биреүҙе тамырынан юҡҡа сығарҙылар, пионер, комсомол ойошмаларын бөтөрҙөләр, тәрбиәне үҙ ағышына ҡуйҙылар, ә уҡытыусыны бары тик белем биреү хеҙмәте күрһәтеүсе ролендә ҡалдырҙылар. Шулай итеп, быуындар бәйләнеше өҙөлдө. Хәҙер ҡабаттан тәрбиә эшенә иғтибар бирергә тырышалар, әммә быының өсөн бер тапҡыр уҙғарылған саралар ғына аҙ, ә уҡытыусының көндәлек хеҙмәте кәрәк.

Күп нәмәне юғалттыҡ. Мин бөгөн алдашыу, уҡытыусыға ихтирамһыҙ ҡараш һәм дөйөм мәҙәниәтһеҙлекте күреп оялам, сөнки ошондай кешеләр ҙә беҙҙең мәктәптәрҙә уҡыған бит. Тәрбиә системаһы йылдан-йыл ҡаҡшай бара. Совет осоронда мәктәп лидерҙар әҙерләне. Пионер йыйыны йәки комсомол йыйылышында балалар һөйләргә өйрәнде. Дәрестәрҙә таҡта алдында тигеҙләмәләр генә яҙып ҡалманылар, ә нимә тураһында яҙғандарын аңлата алалар ине. Бөгөн мәктәптән БДИ буйынса тест һорауҙарына яуап яҙырға өйрәнгән "телһеҙ" уҡыусылар сыға. Элек вуздарға ҡабул итеү имтихандары ваҡытында йәш кеше һөйләй, үҙ белемен, эрудицияһын телмәр аша күрһәтә ине, хәҙер вуздар тест һөҙөмтәһе буйынса "тоҡтағы бесәй" ҡабул итә. Балаларҙы уйларға, һөйләргә һәм ижади эшләргә өйрәтергә, кадрҙарҙы үҫтерергә кәрәк.

Оҙаҡ йылдар мәктәптә эшләү дәүеремдә төрлө һәләтле кадрҙар тәрбиәләнем. Мин - уҡытыусылар диңгеҙендәге бер тамсы ғына. Беҙгә, уҡытыусыларға, һәр уҡыусы ҡәҙерле. Ә бына уларға артабан ярҙам итеү - дәүләт, республика етәкселегенә бәйле. Бында буш һүҙ һөйләү кәрәкмәй, аныҡ ғәмәлдәр менән ярҙам итеү зарур. Күп талантлы йәштәребеҙҙең Мәскәүгә йәки башҡа төбәктәргә китеүе йәл. Ә башҡа төбәктәр уларҙы күтәреп ала, төрлө шарттар тыуҙыра...

Элек һәр класта уҡыусыларҙан "Кем уҡытыусы булырға теләй?" тип һораһаң, барыһы ла ҡул күтәрә ине, хәҙер береү ҙә теләмәй. Педагогик вуздарҙы тамамлаусылар мәктәптәргә бармай. Мәктәп директоры йәки директор урынбаҫары булып эшләргә теләүселәр йылдан-йыл кәмей. Ветеран уҡытыусылар тураһында хәстәрлек бөтөнләй юҡ. Ирекһеҙҙән, республика етәкселегенә: "Ҡасан уҡытыусы һәм уҡытыусы һөнәре тураһында хәстәрлек күрә башларһығыҙ?" - тип мөрәжәғәт итке килә.

Рәсәй Геройы, генерал-майор Минлеғәле Шайморатов бик аҡыллы, баҫалҡы, ғәҙел булған, тиҙәр. Әгәр иҫән булһа, ул, моғайын: "Иптәштәр, әйҙәгеҙ, тәүҙә мине уҡырға, яҙырға өйрәткән, тәрбиә биргән уҡытыусыға, һуңынан уның уҡытыусыһына - генералға һәйкәл асайыҡ", - тиер ине. Беҙҙә бит чинлы, вазифалы кешеләрҙең генә тәҡдимдәре тормошҡа аша. Ә уҡытыусы - ул ябай, рядовой. Башҡа ҡалаларҙа, хатта Башҡортостан райондарында уҡытыусыға һәйкәлдәр бар, ә баш ҡалала юҡ.

Әгәр улар уҡытыусыға ихтирам белдерһә, мәктәп эргәһенә иң элек - уҡытыусыға, ә һуңынан уларҙы дәрестәр араһында ашатҡан ашнаҡсыға һәйкәл ҡуйырҙар ине. Башҡортостан - ашнаҡсыға һәйкәл булған берҙән-бер, шул уҡ ваҡытта уҡытыусыға һәйкәл ҡуйылмаған берҙән-бер миллионлы ҡала! Был - уҡытыусыға ихтирамды һәм һөйөүҙе сағылдырыу объекты булыр ине.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

ТӘРБИӘ МӘКТӘБЕ

**Баланы шәхес итеп тәрбиәләүҙе ҡасан башларға? Мәктәп тейешле тәрбиә бирәме? Тәрбиә тик ғаиләлә генә булырға тейешме? Ошондай һорауҙар бихисап һәм һәр кем уға үҙе аңлағанса, үҙенең тәжрибәһенән сығып яуап та бирә ала. Мин дә тормош юлымда осраған ыңғай һәм ваҡыты менән проблемалар тыуҙырған хәлдәрҙән, үҙ балаларымды тәрбиәләү тәжрибәмдән, һуңғы йылдарҙағы күҙәтеүҙәремдән сығып, шулай уҡ хәҙерге осор менән сағыштырып, бала тәрбиәһе тураһында тыуған уйҙарым менән уртаҡлашмаҡсы булдым.**

# ХАТАЛАР НИМӘНӘН БАШЛАНА,

## йәки Һәр ата-әсә — ғаилә уҡытыусыһы

Тәрбиә һәр осорҙа ла бер төрлө ул. Тик электән килгән булһа ла, йөкмәткеһе үҙгәрмәһә лә, һөҙөмтәһе заманына ҡарата төрлөрәк була. Әйтәйек, һуғыш осоро балалары үҙ ваҡытына хас ауырлыҡтарҙан сығып, белем алыу, хеҙмәт тәрбиәһе бер тиң кимәлдә булырға тейеш, тигән маҡсатта тәрбиәләнгән. Шуға ла баланы үҙ йәшенә тап килгән эшкә йәлеп итеүҙәр ҙә йәмғиәт тарафынан хуплана килде. Улар ғаиләлә тейешле хеҙмәт күнекмәһе генә алманы, ғаилә эсендәге барлыҡ проблемаларҙы хәл итеүҙә ҡатнашты. Балаға үҙ хәлдәренән килмәгәндәй вәғәҙәләр бирелмәне. Йәғни, ай һайын күпме аҡса килә, ул нимәгә тотонола, был айҙа кемгә ниндәй кейем-һалым алынасағы һәр балаға билдәле булды. Ул мәлдә һәр ғаиләлә 7-8 бала тәрбиәләнә ине. Бөгөн улар бала саҡтарын хәтерләһәләр: "Беҙҙе ағай-апайҙарҙың кейемдәре өшөтмәне лә, кейемһеҙ ҙә итмәне, эшкә лә өйрәтте", - тиҙәр.



*Тәрбиә мәсьәләһе буйынса күпме генә яҙма, уны аңлатыу сикһеҙ. Һәр ата-әсәнең үҙ тәрбиә институты бар. Нисек кенә булмаһын, тәрбиә башта ғаиләлә, унан мәктәптә уҡытыусы менән берлектә, тығыҙ бәйләнештә бара. Шәхес тәрбиәләү шулай өйҙән мәктәпкә килә, артабан уны, һәр баланы шәхес итеп күҙаллап, уҡытыусылар коллективы дауам итә. Киләсәктә балаң үҙең белгән тормош позицияһынан күпкә юғарыраҡ булһын тиһәң, шуның өҫтөндә эшләргә бурыслыһың. Һәр ата-әсә - ғаилә уҡытыусыһы. Ата-әсә шулай эшләһә, төрлө алдынғы ысулдарҙан өлгө алһа, ундай ғаиләләге бала ысын мәғәнәһендә оло шәхес булып үҫәсәк, сөнки беҙ, ата-әсәләр, бала тыуғандан алып уны шәхес итеп тәрбиәләү маҡсатын ҡуйған ғаилә уҡытыусыһы булып ҡалабыҙ.*

Үҙемдең бала сағымдағы бер ваҡиға хәтерҙә ҡалған. Ағайым эшләй, уның ғаиләһендә ике бала, өсөнсөһөн көтәләр, әсәйем менән мин дә бергә йәшәйбеҙ. Еңгәйем менән әсәйем колхозда эшләй, береһе икмәк бешерә, икенсеһе - ашнаҡсы, ағайым - һауынсы. Ҡышҡы каникулдан һуң миңә интернатҡа уҡырға китергә кәрәк. Ағайым эш хаҡы алып ҡайтты. Мин ике айҙан ашыу ваҡытҡа ситкә китәм бит инде. Шуға ла ағайым мине ҡыуандырғыһы килгәндер инде, ҡулыма 2 һум 75 тин аҡса тотторҙо. Әсәйем ағайымдан күпме эш хаҡы алыуы тураһында һорай. "Дүрт һум етмеш биш тин", - ти ағайым. Мин, алтынсы класс уҡыусыһы, шунда, бәлки, беренсе тапҡыр үҙемсә шәп фекергә килгәнмендер - ағайым биргән аҡсаның 75 тинен генә үҙемдә ҡалдырҙым да, ҡалғанын ағайыма ҡайтарып бирҙем. Интернатта мин ас йөрөмәйем, яҡшы уҡығандарға оҙон тәнәфестәрҙә башҡаларҙан айырыбыраҡ берәр печенье, йә прәник бирәләр, класыбыҙҙа 38 уҡыусының яртыһынан күбеһе ошондай өҫтәмәне ала ине. Интернатта ла, бала тырыш, белемгә ынтылһын, тип, ошондай ҡыҙыҡтырыу сараһы ҡулланғандарҙыр инде...

Ауылда алтмышынсы йылдар башына тиклем шундай түбән генә эш хаҡы алып йәшәнеләр, тик бер ваҡытта ла зарланып ултырған кешене күрмәнек. "Юҡлыҡ таптыра, барлыҡ шаштыра", тиелә бит мәҡәлдә лә. Әллә шул юҡлыҡ халыҡты сабыр булырға өйрәткәндер ҙә. Ул осорҙа бер бала ла икенсе ғаилә балаһына кәмһетеп ҡараманы, кейгән кейемдәренә екһенеү булманы. Икенсенән, ул осорҙа уҡыусыларҙа берҙәм мәктәп формаһы булды: балаларҙы бер-береһенән айырып, етеш ғаиләнәнме, түгелме икәнен билдәләү ауыр ине. Мәктәптә лә хеҙмәт тәрбиәһе төп урынға ҡуйыла килде. Хеҙмәт нигеҙендә балаларҙың тормошҡа ҡарашы, шулай уҡ ғаилә, енси тәрбиә, әхлаҡ, этик-эстетик тәрбиә формалашты.

Бына ошо осорҙа тәрбиәләнеп, белем алып сыҡҡан быуын, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, үҙ балаларын тәрбиәләүгә икенсерәк ҡараштა булды. Талапсанлыҡ йәһәтенән бер аҙ йомшағыраҡ, шул уҡ ваҡытта бала тәрбиәһе, мәшәҡәттәре менән нығыраҡ ҡыҙыҡһындылар, тик уларға эш ҡушырға ашыҡманылар. "Беҙ эшләп үҫтек, улар ыҙа күрмәһен", - тинеләр. Һуңғы егерме йылда иһә тәрбиәне ата-әсә кеҫә сығымдары, планшет, ныҡ ҡиммәтле телефондар һәм яңы модалы кейемдәр менән сикләй башланы. Үҫә төшә ул балалар ғаиләлә ата-әсәһенә терәк буламы икән? Улар кер йыуа белмәй - уны кер йыуыусы машина башҡара, икмәк - магазин кәштәләрендә, кейем өсөн ата-әсә аҡса таба. Бына шул аҡса тип улар ҡайҙарға ғына йөрөмәйҙәр, Себерме, башҡа ерме, тик аҡса булһын. Ата-әсәгә балаһының шатлыҡлы йөҙөн күреү - үҙе бер ҡыуаныс. Тик был шатлыҡ киләсәктә ғазап булып, үҙҙәренә әйләнеп ҡайтҡан осраҡтар ҙа бик күп бит. "Бер ғүмерҙе өс өлөшкә бүлеп йәшәргә тейешбеҙ, - тип өйрәткән аҡыл эйәһе шәкерттәренә. - Беренсеһен бурысҡа алабыҙ, икенсеһенән бурыс ҡайтарабыҙ, өсөнсөһө - үҙебеҙ өсөн. "Үҙебеҙ өсөн әҙ түгелме, бурыс ҡайтармаһаҡ булмаймы?" - тип һорағандар. "Юҡ. Үҙебеҙ өсөн йәшәгән саҡта ошо бурыс үҙе ҡайта", - ти икән аҡыл эйәһе". Ниндәй һығымта яһайбыҙ һуң был риүәйәттән? Беҙҙең бурыс - бала тәрбиәләү, ҡайтарыу - ата-әсәйендең ҡартлығын хәстәрләү, бына шул өсөнсө өлөшөндә балаларыңдың янында булыуы үҙе алтын терәк була түгелме? Был алтын терәкте беҙ бишектән тәрбиәләйбеҙ.

Һикһәненсе йылдарҙа мәктәпкә "Этика и психология семейной жизни" дәресе индерелде. Шул предметты уҡытҡан саҡта ғаиләләр менән осрашырға, уларҙан тәрбиә ысулдарын һорап, яҙып алырға, матбуғат материалдары менән танышырға тура килде. Китапта яҙылған күпселек теорияларҙың тормош менән тап килмәгән, бәйләнеше булмаған осраҡтары ла бар ине, сөнки дәреслектең күп бүлектәре фән кандидаттары, профессорҙар, юғары белемле психологтар, социаль педагогтар тарафынан яҙылһа, практиктарҙың эш тәжрибәләре әҙ сағылыш алғайны. Бына минең шул осорҙағы ошо "Этика и психология семейной жизни" предметы буйынса уҡытыусы булараҡ, хәҙерге ата-әсәгә, уҡытыусыға кәңәштәрем бар.

***Иң беренсеһе*** балаһын мәктәпкә оҙатыусы ғаиләләр өсөн булыр. Һәр ғаилә мәктәптә балаһын уҡытҡан уҡытыусы менән хеҙмәттәшлек итергә тейеш. Шунһыҙ, үҙең хыял һәм өмөт иткәнде күреп булмаясаҡ. Бөтә балалар ҙа мәктәп талаптарына яуап бирә, тик барыһы ла юғары кимәлдә фекерләү ҡеүәһенә эйә түгел. Төплө фекерләргә һәләтле балалар өсөн һәр ата-әсәгә өйҙә уҡытыусы булыу зарур. Хәҙерге заманда быға өлгәшеү ауыр түгел, көн дә үҙең аңламағанды аңларға тырышып, ҡулға телефон алып, уҡытыусыға мөрәжәғәт итеү, йәки берәй буш ваҡытта уҡытыусының үҙенән консультация алыу зыян булмай. Уҡыу стандартының талаптары йыш үҙгәреп тороуы ла уҡытыусынан ата-әсә менән берлектә эшләүҙе талап итә. Ошонан сығып, уҡытыусыға ла шундай кәңәшем: һәр баланың ата-әсәһе менән индивидуаль осрашыуҙар, йәки телефон аша кәңәшләшеү-өйрәтеүҙәр, мәктәп талабы, уставы менән таныштырыуҙар тик файҙаға буласаҡ. Ата-әсәгә уҡытыусының үҙе башлап мөрәжәғәт итеүе һәм быны йышыраҡ булыуы тик һөҙөмтәгә килтереүе билдәле. Баланы ишек төбөндә ҡаршы алып оҙатыу, 45 минутта белем биреү - ул эштең яртыһы ғына икәнен уҡытыусы ла аңларға бурыслы.

***Икенсе кәңәшем:*** ҡайһы бер ата-әсәләр балаһын мәктәпкә ашатып, кейендереп ебәреү генә уның бурысына инә, тип уйлай. Шулай уҡ хата. Һәр ата-әсә балаһы уҡыған мәктәп ниндәй маҡсат менән ниндәй бурысты тормошҡа ашыра, ниндәй устав ҡабул иткән, ул ниндәй конституция нигеҙенән сығып төҙөлгән һәм ошо нигеҙҙә уның балаһы нимәне үтәргә һәм үҙе нимәләрҙе белергә тейеш икәнен дә онотмаһын ине. Дөрөҫ, балалар (ауыл ерендә) элекке кеүек сөгөлдөр утамай, картуф үҫтермәй, ырҙын табағында эшләмәй, трактор, комбайн йөрөтөргә өйрәнмәй, һыйыр һауып, ярыштарҙа ҡатнашмай, ауыл халҡы менән ауыл территорияһын таҙаламай. Күрәһегеҙ, мәктәп тормошо хәҙер шаҡтай еңел, тик белем ал ғына. Шулай ҙа балалар тәрбиәле булырға тейеш, тигән маҡсатты ата-әсәнән дә, уҡытыусынан да алып ташламанылар. Ул ниндәй заман килеп, ниндәй заң ҡағылһа ла үҙгәрешһеҙ ҡала.

Ошо урында ***өсөнсө кәңәшемде*** еткермәксемен. Яҙмамда дөйөм мәктәп формалары тураһында әйтеп киткәйнем инде. Бер ваҡыт баланы ғаилә хәленә ҡарап кейендереү модаға инеп китте. Ул осорҙа матур кейемле балаларҙың үҙҙәре шикелле кейенә алмаған балаларҙы ситләтергә, уларҙы кәмһетергә тырышыу күренештәре хасил була башланы. Бала үҙен белемгә түгел, кейемгә ҡарап баһаларға өйрәнеү дәүере алға сыға башланы. Кейеме шәпме, тимәк, ул коллективта иң шәбе. Башҡаларҙан үҙен өҫтөнөрәк тотоу күренеше лә күҙгә ташланмай ҡалманы. Балалар мәктәптә хатта партала ултырған иптәшен дә кейеменә ҡарап һайлау сағыла башланы. Бына һуңғы ун йылға яҡын араlыҡта был күренеш бөтә башлағандай тойола, ләкин икенсе күренеш күҙәтелә. Уҡыусылар хәҙер сәстәрҙе, тырнаҡтарҙы, керпектәрҙе теләгәнсә үҙгәртә, ҡайһы берҙә уларҙы уҡытыусымы әллә, тип ҡабул итергә лә

мөмкин. Матур кейем - ул һуңғы мода менән кейенеү түгел, ә кәүҙәңә, төҫөңә килешле итеп кейенеү. Һырға, балдаҡ, башҡа төр биҙәнеү әйберҙәре булған хәлдә лә, тырнаҡ үҫтереү, сәс буяу, самаһыҙ биҙәнеү килешле түгелдер, тип уйлайым. Шуға күрә ата-әсә ошо тәңгәлдә лә мәктәп коллективы менән бер фекерҙә булырға тейеш.

***Дүртенсе кәңәшем -*** иртә никахтар булдырмау өсөн ғаилә лә, мәктәптә лә енси тәрбиә мәсьәләһе күҙ уңынан ысҡынмаһын ине. 2000 йылдарға тиклем бындай осраҡтарҙы иҫкәртеү маҡсатында район буйынса мәктәп етәкселәре семинарҙарында дауахана гинекологы сығыш яһай һәм төплө кәңәштәр еткереү традицияға ингәйне. Хәҙерге осорҙа мәктәптәргә медицина хеҙмәткәрҙәре беркетеү, йәки улар менән осрашыуҙарға өҫтөнлөк биреүҙе хуплап ҡабул итергә кәрәктер. Был кәңәшем минең бигерәк тә ата-әсәләргә ҡағыла. Улар улдарының һәм ҡыҙҙарының яҡын серҙәше, дуҫы, кәңәш биреүсеһенә әйләнмәйенсә, иртә никахтарҙан ҡотолоу мөмкин түгел.

***Бишенсенән,*** шуны әйтергә теләйем: ғаиләлә теге йәки был проблеманы хәл иткәндә балалар менән бергә йыйылып һөйләшеү, һәр балаға, ата-әсәгә кәрәк нәмәләрҙе тормошҡа ашырыу асыҡ ғәҙәткә әйләнһен ине. Шул ваҡытта ғына ул үҙен ғаиләнең тулы хоҡуҡлы, яуаплы ағзаһы итеп тоя, үҙ ихтыяждарын ғына ҡәнәғәтләндереүсе сифатынан баш тартасаҡ. Был минең 8 бала (бишәүһе - тәрбиәгә алынған етемдәр) тәрбиәләгән әсәй булараҡ биргән кәңәшем. Беҙҙең ғаиләлә шул ғәҙәт булды. Зыяны булманы, төрлө хәл иткеһеҙ проблемалар килеп сыҡманы. Барыһы ла ғаиләле: береһе - ғалимә, 6-һы юғары белемле, 2-һе махсус урта белемле. Ғаилә хәлен бала сағынан аңлап, бергә хәл итешеп өйрәнһә генә, баланан, беренсенән, үҙен генә ҡайғыртыусы сыҡмаясаҡ, икенсенән, көнләшеү йәки башҡаны кәмһетеү тойғоһо булмаясаҡ.

Тәрбиә мәсьәләһе буйынса күпме генә яҙма, уны аңлатыу сикһеҙ. Һәр ата-әсәнең үҙ тәрбиә институты бар. Нисек кенә булмаһын, тәрбиә башта ғаиләлә, унан мәктәптә уҡытыусы менән берлектә, тығыҙ бәйлелектә бара. Шәхес тәрбиәләү шулай өйҙән мәктәпкә килә, артабан уны, һәр баланы шәхес итеп күҙаллап, уҡытыусылар коллективы дауам итә. Киләсәктә балаң үҙең белгән тормош позицияһынан күпкә юғарыраҡ булһын тиһәң, шуның өҫтөндә эшләргә бурыслыһың. Һәр ата-әсә - ғаилә уҡытыусыһы. Ата-әсә шулай эшләһә, төрлө алдынғы ысулдарҙан өлгө алһа, ундай ғаиләләге бала ысын мәғәнәһендә оло шәхес булып үҫәсәк, сөнки беҙ, ата-әсәләр, бала тыуғандан алып уны шәхес итеп тәрбиәләү маҡсатын ҡуйған ғаилә уҡытыусыһы булып ҡалабыҙ.

Уҡытыусы ғаиләнең беренсе терәге, кәңәшсеһе, белем биреүсеһе булып һәм баланы илһөйәр шәхес итеп үҫтереүҙә төп ролде үтәүсе. Бөгөнгө көндә һин уҡытҡан предметтан ата-әсә репетитор эҙләй икән, тимәк, һинең биргән белемең талапҡа яуап бирмәй. Шуға күрә, уҡытыусы 40-45 минут ваҡыт эсендә балаға белем биреп һәм уны эҙләнеүгә, өҫтәмә материалдар менән эш итеү күнекмәһенә йүнәлеш бирергә бурыслы. К.Ушинский әйткәнсә: "Уҡытыусы тик үҙе уҡығанда ғына уҡытыусы булып ҡала". Тимәк, уҡытыусы ла үҙ белем даирәһен үҫтереү өҫтөндә туҡтауһыҙ эҙләнергә тейеш.

**Рәйсә ИҪӘНБАЕВА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы,**
**Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы алдынғыһы, хеҙмәт ветераны.**
**Баймаҡ ҡалаһы.**

***✓ Көнләшеү, асыу, ҡайғырыу, ҡурҡыу - былар бөтәһе лә балала психологик иммунитетты булдырыу өсөн тәбиғәт тарафынан бирелгән бүләк. Улар ул тойғоларҙың бөтәһен дә кисереп, үҙҙәре аша үткәреп өйрәнергә тейештәр.***

АТАЙ-ӘСӘЙҘӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ

# КӨНЛӘШЕҮ - УЛ СӘЛӘМӘТ КҮРЕНЕШ,

## йәки тәбиғи тойғолар тураһында бер нисә һүҙ

**Беҙ, ғәҙәттә, көнләшеү, асыу, ҡайғырыу, ҡурҡыу кеүек психологик күренештәрҙе насар тойғолар иҫәбенә индерәбеҙ. Һәм ул тойғоларҙы төрлө юлдар менән булдырмаҫҡа тырышып, бала саҡтан уҡ уларға ҡаршы көрәшә башлайбыҙ.**



Ә бит уларҙың бөтәһе лә тәбиғәт тарафынан кешеләргә тыумыштан уҡ бирелгән тәбиғи тойғолар. Йоғошло ауырыу һымаҡ, кемдәндер күсмәгән. Иң мөһиме: тәбиғәт кешеләргә бер ваҡытта ла яуызлыҡ уйламай, киреһенсә, йәшәһендәр, тип, бөтә шарттарҙы булдырырға тырыша. Шуға, үрҙә һанап киткән хис-тойғоларҙы ла беҙгә кәрәк булһын тип биргән ул. Уларҙың һәр береһе бала саҡтан кешелә ниндәйҙер һәләтте йәки сифатты барлыҡҡа килтерә. Тик ул тойғолар үҙенең тәбиғилеген юғалтырға тейеш түгел. Әйтәйек, көнләшеү йәки асыу тойғоһо барлыҡҡа килде икән, улар күңелдә ояларға түгел, ә күңелдән сығып китергә тейеш.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең тәрбиә уларҙы тыйыуҙы маҡсат итеп ҡуя һәм төрлө юлдар менән баҫырға тырыша. Әгәр ул тойғолар тыйыла йәки баҫыла икән, улар тәбиғилеген юғалта һәм кешегә кире йоғонто яһай башлай. Ни өсөн тигәндә, һәр тойғоноң психик энергияһы була. Утһыҙ һыу ҡайнамаған һымаҡ, энергияһыҙ эмоция барлыҡҡа килә алмай. Шуға, баҫылған тойғоноң энергияһы ла сығып китмәй, кире күңеленә - йөрәгенә инеп ята. Баяғы тойғоларҙың негатив булыуын иҫәпкә алһаҡ, энергиялары ла бысраҡ булып иҫәпләнә. Һәм улар кешелә йыйыла башлай. Ә был бик ҡурҡыныс күренеш. Ул, беренсенән, кешенең үҙен ашай, унда ниндәйҙер ауырыу барлыҡҡа килтерә. Икенсенән, ҡасан да булһа ул барыбер ташып, тышҡа сыға. Ул ваҡытта инде был тойғо тәбиғилеген юғалтып, ниндәйҙер "монстр"ға әйләнәсәк. Ә быныһы йәмғиәт өсөн бигерәк тә зыянлы. Әйткәндәремде яҡшыраҡ аңлатыу өсөн һәр бер тойғоға айырым туҡталып китәм...

### Көнләшеү һәм көнсөллөк

Көнләшеү - ул тәбиғи тойғо, ул балаға шәхес булып формалашырға ла ярҙам итә. Мәҫәлән, бала ағаһы йәки апаһының уҡый-яҙа белгәненә көнләшә һәм уның да шул һәләттәргә эйә булғыһы килә башлай. Күрше малайҙар һымаҡ, футбол тибергә, конькиҙә шыуырға өйрәнә, хатта уларҙан да яҡшыраҡ булырға хыяллана. Ул баланы сәмләндерә, алға этәрә, үрҙәргә әйҙәй. Ғөмүмән, көнләшеү - ул сәләмәт тойғо. Балаға көнләшергә ирек бирелә икән, киләсәктә ул был тойғонан тиҙ генә ҡотолорға ла өйрәнәсәк. Хатта көнләшеүе һоҡланыу тойғоһона әүерелеүе лә мөмкин. Әгәр тәбиғи торошо һаҡланһа... Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙә көнләшеү иң насар тойғолар рәтенә индерелгән. Уға ҡаршы ҡаты көрәш бара һәм уны төрлө юлдар менән тыялар. "Башҡаларға ҡарап көнләшеү яҡшы түгел - булғанына риза булып йәшәп өйрән", - тип тәрбиә бирәбеҙ балаларға. Шундай йөкмәткеле йырҙар, шиғырҙар ижад ителә. Хатта мәктәптәрҙә берҙәм кейем формаһы индерелеүенең дә бер сәбәбе - балалар бер-береһенән көнләшеп өйрәнмәһендәр, имеш...

Шундай мораль аҫтында тәрбиәләнгән балалар көнләшеү тойғоларын баҫып өйрәнәләр һәм ул ғәҙәткә әйләнеп китә. Ҙурайғас та ул күренеш дауам итәсәк. Бына шулай, көнләшеү тойғоһо барлыҡҡа килһә лә, ул сығып китмәй, ә баҫылып, күңел төптәрендә йыйыла һәм үҙгәреш кисерә - көнсөллөк барлыҡҡа килә (халыҡ телендә уны "ҡара көнләшеү" тип тә атайҙар). Ә көнсөллөк - ысынлап та, иң насар тойғоларҙың береһе. Ундай тойғоло кешеләр уңышҡа өлгәшкәндәргә, алда барғандарға ҡарап үҫергә ынтылмайҙар. Ә, киреһенсә, уларға нисек тә булһа аяҡ салырға тырыша башлайҙар. Шунан башлана инде ғаиләләрҙә, коллективтарҙа һәм башҡа урындарҙа ыҙғыш-талаштар...

### Ҡайғырыу һәм депрессия

Ҡайғырыу... Тормошта шундай ваҡиғалар була: ниндәйҙер ҡәҙерле әйберең-де йәки яҡын кешебеҙҙе юғалтабыҙ. Был тәбиғи күренеш. Донъяла бер нәмә лә мәңгелек түгел, теләмәһәк тә, улар менән ҡайһы берҙә хушлашырға һәм ҡайғырырға тура киләсәк. Шуға, ҡайғырыу ҙа - тәбиғи тойғо ул. Һәм кешеләр уны бала саҡтан уҡ тойоп һәм үткәреп өйрәнергә тейеш. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙ ул тойғоно яратмайбыҙ. Балаларға ла: "Илама, оят була! Ҙур үҫкәнһең бит инде! Бәпестәр генә илай ул!" - тип аҡыл бирәбеҙ. Бына шулай, балалар үҙҙәренең ҡайғырыуҙарына ҡаршы көрәш башлайҙар һәм, әлбиттә, уны баҫырға өйрәнәләр. Бигерәк тә малайҙар ныҡ тырыша, сөнки, ысын егет иларға тейеш түгел, тигән моралде баштарына һеңдерәбеҙ бит. Шулай итеп, ҡайғырыу тойғоһо боҙола - ул депрессияға әүерелә. Ни өсөн тигәндә, ҡайғырмаҫҡа өйрәтһәк тә, тормоштағы юғалтыуҙарҙы бөтөрә алмайбыҙ шул. Ҡайғырыуҙы кисереп өйрәнмәгәндәргә ҡасан да булһа шул юғалтыуҙар менән осрашырға тура киләсәк. Һәм, әлбиттә, шул ваҡиғаларға ярашлы ауыр тойғолар ҙа тыуыуы ихтимал. Улар бит илап өйрәнмәнеләр... Һәм уларҙа депрессия башланасаҡ. Ә уның эҙемтәләре бик ҡурҡыныс булырға мөмкин: эскелек, наркомания, суицид...

### Асыу һәм яуызлыҡ

Асыу - шулай уҡ сәләмәт тойғо. Әгәр тәбиғилеген юғалтмаһа, ул баланы "юҡ", "мин риза түгел" тип әйтергә өйрәтә. Ул тойғо ярҙамында тормоштағы ғәҙел булмаған күренештәргә ҡаршы торорға тәжрибә туплай. Асыуланған ваҡытта кеше менән дөрөҫ һөйләшергә, шулай уҡ асыуҙы ҡабул итергә һәм үткәреп ебәрергә өйрәнә. Йәғни ваҡыт үтеү менән ул тойғо нисек килеп инә, шулай уҡ тиҙ генә сығып китәсәк. Әгәр инде, асыуыңды тыйып өйрән, кешегә күрһәтмә, тип тәрбиә бирәбеҙ икән - бала асыу тойғоһон баҫырға ғәҙәтләнеп китә. Уны сығарырға өйрәнмәй, ул кешелә йыйыла башлай һәм бер көн килеп шартлаясаҡ. Бына шул ваҡытта асыу тәбиғилеген юғалта - ул яуызлыҡ һәм үс алыу тойғоһона әйләнә. Ә был тойғоларҙың кешелек йәмғиәтенә ниндәй зыян килтереүен һанап тороу кәрәкмәйҙер. Әгәр инде бөтә халыҡтың асыуы баҫтырылһа, уның һөҙөмтәһе атом бомбаһынан да ҡурҡынысыраҡтыр...

### Ҡурҡыу һәм шомланыу

Ҡурҡыу тойғоһо тураһында... Ул балала һаҡлыҡ сифатын тәрбиәләй. Йәғни ҡурҡҡан кеше һаҡ булырға өйрәнә. Ә һаҡлыҡтың төп маҡсаты - физик һәм психик һаулыҡты һаҡлау. Шулай уҡ ҡурҡыу ашыҡмаҫҡа, уйлап эшләргә өйрәтә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙ: "Ҡурҡыу - насар нәмә, ул ҡурҡаҡтарҙың ғына эше. Һин батыр булырға тейешһең", - тип тәрбиә бирәбеҙ. Ә бит ҡурҡып һәм уны үткәреп өйрәнергә кәрәк. Шуға ҡурҡыуҙы баҫып, уны кисереп өйрәнмәгән балалар, үҙаллы тормошҡа аяҡ баҫҡас, ул тойғо менән нимә эшләргә белмәйҙәр. Сөнки ул килә лә килә, килә лә килә... Бигерәк тә бөгөнгө мәғлүмәтле тормошта. Һәм ҡурҡыу оҙаҡҡа һуҙылған шомланыу тойғоһона әүерелә башлай. Ә ул, үҙ сиратында, кеше тормошонда бик күп проблемалар тыуҙырасаҡ...

### Йомғаҡлау

Һөйләгәндәремде йомғаҡлап, шуны әйткем килә: көнләшеү, асыу, ҡайғырыу, ҡурҡыу - былар бөтәһе лә балала психологик иммунитетты булдырыу өсөн тәбиғәт тарафынан бирелгән бүләк. Улар ул тойғоларҙың бөтәһен дә кисереп, үҙҙәре аша үткәреп өйрәнергә тейештәр. Шул ваҡытта ғына ниндәйҙер ауырлыҡтарға ҡаршы торорлоҡ психологик сифаттар, йәғни иммунитет барлыҡҡа килер. Һәм үҙаллы тормошта аҙым һайын осраған проблемаларҙың күбеһен үҙҙәренә һәм башҡаларға зыян килтермәй генә хәл итерҙәр. Шуға беҙҙең тәрбиә - ул тойғоларҙы тыйыу булмаһын, ә, киреһенсә, улар менән дуҫ булырға тейешбеҙ.

**Наил ЮЛДАШБАЕВ,**
**башҡорт теле уҡытыусыһы.**
**Ейәнсура районы.**

***- Кеҫәләрегеҙҙе тикшергән ваҡытта мин дә кеҫәләремдә йомғайным бит, - тип яуап бирә оло уҡытыусы. Йомоҡ күҙҙәр, йәғни тәртипһеҙлеккә, был осраҡта урлашыуға, күҙ йомоп ҡарау тураһындамы кинәйә? Юҡтыр.***



КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...

# КҮҘҘӘР ЙОМОҠ БУЛҒАНДА ЛА,

## күңел күҙе асыҡ булһын



Урам буйлап барған егет эргәһенән үтеп барыусылар араһында башланғыс кластарҙағы уҡытыусыһын танып ҡала. Ул бабай эргәһенә килеп:

- Һеҙ мине танайһығыҙмы? Бәләкәй сағымда мин һеҙҙең уҡыусығыҙ булдым, - тип өндәшә.

- Эйе, иҫләйем. Мин бит һеҙҙе өсөнсө класта уҡытҡайным. Әле ҡайҙа, кем булып эшләйһең?

- Мин - уҡытыусы. Бала сағымда тормошома онотмаҫлыҡ йоғонто яһанығыҙ, шуға күрә бәләкәй балаларҙы тәрбиәләү теләге шул саҡта уҡ тыуғайны.

- Шулай уҡмы ни? Ниндәй йоғонто яһаным икән?

- Минең менән булған бер күңелһеҙ хәлде иҫләйһегеҙме?

- Юҡсы.

- Улайһа, хәтерегеҙгә төшөрөргә рөхсәт итегеҙ...

Бер көндө класташтарымдың береһе ҡулына ата-әсәһе бүләк иткән күҙ ҡамашмалы сәғәт тағып килгәйне. Ул матур бүләген парта аҫтына һалып ҡуйҙы. Ә мин шундай сәғәт тураһында нык хыяллана инем. Сыҙаманым, малай күрмәгәндә, ялтырауыҡлы сәғәтте кеҫәмә тыҡтым. Тиҙҙән юғалтыуҙы һиҙгән уҡыусы һеҙҙең эргәгеҙгә барып, бәләһен һөйләп бирҙе.

Һеҙ бөтә класҡа ҡарап: "Кем дә кем ошо малайҙың сәғәтен алған, кире ҡайтарып бирегеҙ", - тип әйттегеҙ.

Мин нык ояլдым, әммә сәғәттән айырылғым килмәгәс, өндәшмәнем. Һеҙ кабинеттың ишеген эстән бикләнегеҙ ҙә, беҙгә стена буйлап теҙелеп баҫырға ҡуштығыҙ. "Мин хәҙер һеҙҙең кеҫәләрегеҙҙе тикшереп сығам, тик һеҙ күҙҙәрегеҙҙе йомоп торорғоҙ", - тинегеҙ. Беҙ, әлбиттә, бер һүҙһеҙ буйһондоҡ. Мин ояլышымдан ер тишегенә инерҙәй хәлгә төштөм.

Бер-бер артлы тикшерә-тикшерә, минә яҡынайғандан-яҡыная башланығыҙ. Кеҫәмдә ятҡан сәғәтте алғас та, һеҙ һаман строй буйлап тикшереүҙе дауам иттегеҙ. "Балалар, күҙҙәрегеҙҙе асһағыҙ ҙа була, урындарығыҙға ултырығыҙ", - тинегеҙ.

**Сәғәтте хужаһына ҡайтарып биргәс, был турала бер һүҙ ҙә әйтмәнегеҙ. Шул көндә һеҙ мине уңайһыҙ хәлдән ҡотҡарҙығыҙ, йәнемдә аянығыҙ, намыҫыма бысраҡ ташламанығыҙ - бур, алдаҡсы, эшкинмәгән бала кеүек аяуһыҙ һүҙҙәр эргәмдән урап үтте. Һеҙ хатта аҙаҡ был турала минең менән һөйләшеп тә торманығыҙ. Ҙурайғас ҡына ниңә былай эшләмәүегеҙҙе аңланым. Сөнки, ысын уҡытыусы булараҡ, әле шәхес булып формалашып етмәгән баланың намыҫын бысратҡығыҙ килмәгәндер. Шуға күрә мин уҡытыусы һөнәрен һайланым да инде. Бөгөн мине күреп танығас, шул хәл иҫегеҙгә төшмәнеме ни?**

- Кеҫәләрегеҙҙе тикшергән ваҡытта мин дә кеҫәләремдә йомғайным бит, - тип яуап бирә оло уҡытыусы.

Йомоҡ күҙҙәр, йәғни тәртипһеҙлеккә, был осраҡта урлашыуға, күҙ йомоп ҡарау тураһындамы кинәйә? Юҡтыр. Бәлки, бәләкәй балаларҙың саф күңелен китергә ярамау тураһындалыр? Әллә һүҙ күңел күҙе тураһындамы икән? Бәлки, ғәйепле кеше һәр саҡ кәрәкле язаһын алырға тейешлек тураһындалыр?

Эйе, ғәйеп ташларға яратабыҙ: уңлыһуллы һелтәйбеҙ, үс ҡаныр ҙа енелерәк булып ҡалыр тип уйлайбыҙ, шикелле. Сөнки башҡаны ғәйепләү еңелерәк, үҙеңде ғәйепләү бик ауыр. Ә ғәйепле табыла...

Ошо урында күрше йәшәгән ике ғаилә тураһындағы тағы бер кинәйә иҫкә төшә. Күршеләрҙең берәүҙәре көнө-төнө ирешеп-талашып йәшәгән, икенсе ғаиләләгеләр тыныс булғандар, ир менән ҡатын бер-береһенә һис ҡасан да тауыш күтәрмәгән. Ғауғалы ғаиләнең ҡатыны иренә: "Бар, шуларҙы күҙәт әле, улар нисек шулай татыу йәшәй ала икән", - тип бойорған. Ни эшләһен, баҫымһаҡ ир күршеләренең тормошон ситтән күҙәтә башлаған. Бына бер көндө күрше ир өҫтәлдә ултырған ҡиммәтле вазаны төшөрөп ватҡан. Шундуҡ ҡатынынан ғәфү үтенә башлаған: "Ғәфү ит мине, алабарманды!". Ҡатыны иһә: "Юҡ, һин мине ғәфү ит, өҫтәл ситенә ҡиммәтле нәмәне ултыртып ҡуйған кешене", - тип үҙ һүҙен әйткән.

Был хәлде күргән ир ҡатынына ҡайтып былай ти икән: "Беҙҙең бер-беребеҙҙе ғәйепләүҙән баш сыҡмай, күршеләр үҙҙәрен ғәйепле һанай, шуға татыу йәшәйҙәр". Тимәк, ғәйепләү - бола сығанағы, ғәфү үтенә белеү - кешеләрҙе яраштырыу сараһы.

Психологтар раҫлауынса, кешеләр, ғәҙәттә, яҡындарын күберәк рәнйетәләр. Сәбәбе ябай: яҡын кешең, әгәр һин ғәйепһеҙгә йәберләһәң дә, ғәфү итер, тигән өмөт бар. Хәлеңдән килһә, ана, урамдағы таныш булмаған берәүҙе рәнйетеп ҡара! Ят ярлыҡамаҫ, үҙеңде үлтермәҫ, ти халҡыбыҙ.

Эйе, кинәйәләге малай ғәйепле. Ул бәләкәй генә йөрәге менән выждан ғазабы кисерә, бындай мәлдә гөлсәрҙәй саф күңелен селпәрәмә килтереү өсөн күп кәрәкмәй. Келт итеп Мостай Кәримдең "Йәйәүле Мәхмүт" тип аталған моңһоу комедияһындағы Инсаф Мисбаховтың монологы иҫкә төшә: "Бишенсе класта уҡый инем... Беҙҙе тимер юл районы алдынғыларының слетын ҡотларға әҙерләй башланылар. Мин бары дүрт кенә һүҙ әйтергә: "Беҙ атайҙар юлынан барасаҡбыҙ!" - тип залға ҡарап ҡысҡырырға тейеш инем. "Бармайым да, әйтмәйем дә", - тип мин ҡырт киҫтем. Мәктәптә өйөрмә ҡупты. Вожатый - класс етәксеһенә, класс етәксеһе - завучка, завуч директорға йүгерҙе. Һәр береһе мине алдан байтаҡ ҡайыҙлап, директор ҡаршыһына килтереп баҫтырҙылар. Өгөтләп тә, янап та, ҡурҡытып та ҡараны директор. Нык торҙом: "Юҡ, бармайым!", "Юҡ, әйтмәйем!" - тип ҡарыштым. "Улайһа, хәҙер үк атайыңды саҡыртабыҙ", - тине директор. Кинәт тыным ҡыҫылды, башым әйләнеп китте. "Барам, әйтәм", - тип бышылданым. "Бына шулай тыңлаусан, күндәм бул", - тип директор арҡамдан ҡаҡты. Ҡулы тос, ҡаты ине. Слет көндө сәхнә алдына баҫып: "Беҙ атайҙар юлынан барасаҡбыҙ!" - тип өҙөп-өҙөп асыҡ итеп ҡысҡырҙым. Ҡысҡырҙым да, сәхнә артына сығып, тәгәрәй-тәгәрәй иланым... Был ваҡыт минең атайым хөкүмәт милкен урлағаны өсөн дүрт йылға төрмәгә ябылғайны. Шунан алып әҙер һүҙҙе һөйләргә, "эйе шул" тиергә күнектем. Хатта йыйылыштарҙа ла мин һүҙемде минән алда һөйләүсенең мәғәнәһеҙ һүҙҙәрен йөпләүҙән башлайым. Бына шундай кеше мин..." Автор был персонажға ҡылыҡһырлама биргәндә уның тураһында ике генә һүҙ - "эйе шул", тип ҡуйған. Уҫал уҡытыусы ҡулына эләгеп, һығылмалығы булмаған күп балалар аҙаҡ ана шул "эйе шул"дарға әйләнә бит. Ҡыҙғаныс, әммә тормошта була торған хәл...

**Бөйөк совет педагогы Шалва Александрович Амонашвилиның: "Бәләкәй баланды тәрбиәләүҙе ышанып тапшырған өсөн, рәхмәт һиңә, Аллам!" - тигән һүҙҙәре бар. Гуманлы педагогика концепцияһы авторы булараҡ, атаәсәләр ҙә, уҡытыусылар ҙа был һүҙҙәрҙе көн һайын ҡабатларға тейеш, ти ул.**

Был мөнәсәбәт балаларҙы "һындырмай", тәрбиәләмәй, уларҙы нисек бар, шулай ҡабул итергә өйрәтә. Бер көндө лекцияһын тыңларға килгән педагогтарға Шалва Амонашвили ошондай һорау бирә: "Күҙ алдына килтерегеҙ: дүртенсе класта дәрес биргән ваҡытта бер уҡыусығыҙ 20 минутҡа һуңлап килһә, ни эшләр инегеҙ? ".

- Кластан сыҡ!

- Көндәлегеңде бир!

- Урыныңа ултыр, дәрес аҙағында һөйләшербеҙ! - кеүек яуаптар ишетелгән. Башҡа төрлө яуаптар ҙа булған, әлбиттә.

Ахырҙа: "Ә һеҙ ни эшләр инегеҙ? " - тип һораған уҡытыусылар.

Шалва Александровичтың яуабы уларҙы шаҡ ҡатырған, сөнки уның әйткәне элекке тәрбиәүи стандарттарға бөтөнләй тап килмәгән.

"Иң тәүҙә мин бар күңелемдән: "Һаумы, бәләкәс, әйҙә, үт, урыныңа ултыр, һине көтөп, дәресте башлай алмайбыҙ", - тип әйтер инем. Был ихлас һөйөү тип атала, һалма рәүештә улай ҡыланып булмай", - тип яуап биргән ул.

"Ә икенсе көндө ярты сәғәткә һуңлап килһә, ни эшләр инегеҙ?" - тип, уҡытыусылар тағы һораған.

"Икенсе көндө тағы ла ихласыраҡ итеп: "Һаумы, матурым, мин һине күптән көтәм, тиҙерәк үт, урыныңа ултыр. Беҙ тағы ла һинһеҙ дәресте башлай алмай торҙоҡ", - тип әйтер инем ,- тигән оло йөрәкле уҡытыусы. - Әгәр ҙә баланы шулай 4-5 тапҡыр ихлас һөйөү менән ҡаршылаһаң, ул дәрескә һуңлауҙан туктаясаҡ. Сөнки бала күңеле саф һөйөү хистәрен шундуҡ һиҙә. Һөйөү булған урынға ул йүгереп киләсәк".

Ысынлап та, балаларҙың психикаһы шулай ҡоролған: уны һөйгән, шәхес күреп, хәҙер иткән ергә ул ҡыуанып бара. Уҡытыусыға баланың башынан һыйпау, ҡосаҡлау, яурындарына ҡул һалыу ҙа етә. Ихлас иғтибарҙы тойған уҡыусы дәрес материалын иҫендә яҡшыраҡ ҡалдыра...

**Атайым мәрхүмдең һөйләгәнен иҫләйем. Улар ауыр һуғыш йылдарында аслы-туҡлы килеш күрше Хәлил ауылындағы ете йыллыҡ мәктәпкә йөрөп уҡыған. Ҡыш көндәрендә өшөп барһалар, уҡытыусы апайҙары (ҡыҙғаныҫҡа, исеме иҫтә ҡалмаған): "Эй, балаҡайҙарым, өшөп кенә килгәнһегеҙ", - тип, йылы мейес артына ултыртып ҡуя торған булған. Йыш һөйләй ине яратҡан уҡытыусылары тураһында. Бәлки, миңә, уҡытыусы кешегә, ана шулай бул, тигән ишара ла булғандыр...**

...Кинәйәләге йомоҡ күҙҙәр темаһына әйләнеп ҡайтайыҡ. Эйе, күҙҙәр йомоҡ булырға мөмкин. Әммә уҡытыусының күҙҙәре асыҡ, ул күрә, һиҙә. Маңлай күҙҙәре менән генә эш итһә, ул шундуҡ тәртип боҙоусыны тотоп фаш итеү яғында булыр ине. Ләкин уның күңел күҙҙәре быға юл ҡуймай. Һәр хәлдә, ысын уҡытыусы шулай итә...

Намаҙ уҡыған һайын, "Күңел һәм маңлай күҙҙәребеҙҙе ас, баштарыбыҙға зирәк зиһен, үткер фекер, камил аҡыл, йомшаҡ фиғел, тулы иман бир", тип Аллаһы Тәғәләнән һорап, доға ҡылабыҙ икән, күңелдәребеҙгә һөйөү хисе тулмаймы ла, күңел күҙе асылмаймы ни? Был кинәйәнең йөкмәткеһен үҙемсә шулай аңлап ҡабул иттем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡайһылар уҡығайным: һәр әҫәрҙең йөкмәткеһе бер сюжетҡа ҡоролған - изгелек менән яуызлыҡтың көрәше. Һеҙ баррикаданың ҡайһы яғында? Күңел күҙҙәрегеҙ ни күрә?**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

✓ ***Стена буйындағы өйөлгән әйберҙәр араһынан ветеран гармунды һөйрәп сығарҙы. Рим менән Мир аталарының гармунын иҫләмәй ҙә инде. Шулай ҙа өмөт менән улар икәүләп гармунға барып йәбеште һәм... йә, Хоҙай!***






– Туктағыҙ, - тине ул тулҡынланып, - Ҡасабала бер һуғыш ветераны йәшәй. Ул да өйөндә үҙаллы байтаҡ иҫке әйберҙәрҙе йыйған. Беҙҙең музейҙа булмаған нәмәләр унда булырға мөмкин. Беҙгә тапшырам тип алып килгәйне ул күп йылдар элек, ҡыҙыҡлы, кәрәкле әйберҙәрҙе алып ҡалдыҡ та, артығын кире үҙенә бирҙек. Сөнки, мәсәлән, беҙҙә ун снаряд бар икән, ун беренсеһе нимәгә? Урын да сикле, бер үк экспонатты күпләп теҙеп һалыу ҙа әһәмиәтле түгел. - Ҡатынҡай аҡланғандай һөйләнеп, ветерандың адресын өйрәтеп, бер ара оҙатып барып, хушлашып тороп ҡалды.

Ҡасаба бик ҙур, бәләкәй ҡалаларҙан да ҙурыраҡ булып сыҡты. Ике-өс ҡатлы йорттар үҙәктә урынлашһа, ауыл өйҙәре әллә күпме ерҙе алып сыбарлаған. Ветеран йәшәгән ер - ябай ғына ауыл өйө. Тыштан матур итеп таҡта менән көпләнеп, йәшел төҫкә буялған. Ҡоймалары тигеҙ, бейек. Ҡапҡаһы семәрләп, һырланып эшләнгән.

Ветеран ятып торған икән, ишекте ҡыҙы асты.

- Үтеп ултырып торогоҙ, атайымды хәҙер саҡырам, - тип төпкө яҡҡа инеп китте. Әллә нисә бүлмәле ҙур ғына йорт икән. Уртанан оҙонса коридоры ла бар. Ике яҡҡа ишектәр эшләнгән. Коридорҙағы ҡыҫҡа ғына диванға ултырҙы килеүселәр. Көнөҙөн аяғөҫтө йөрөп, арытылған да икән. Аяҡтарын һуҙып, йомшаҡ диванға рәхәтләнеп терәлделәр.

- Арыткан, хәл юҡ, - тине Рим ағаһы иҙерәп күҙен йомоп. - Ошолай ғына ятып йоҡлап китһәң икән...

- Йоҡлар алдынан ҡапҡылап алғанда ла килешер ине, - тип йылмайҙы Мир. - Иртәнән ҡара кискә тиклем тәгәм ҡапҡан юҡ. Сарсатты ла.

Артынан тәпәш кенә буйлы, ҡаҡса ғына ҡартты эйәртеп, ҡатынҡай сыҡты.

- Бына ҡунаҡтар, үҙегеҙ танышырһығыҙ, - тип хужабикә кухня яғына үтеп, һауыт-һаба шылтырата башланы.

- Евгений Васильевич Васютин булам, - тине ҡарт тәҫһеҙ күҙҙәрен килеүселәргә төбәп. - Ҡайһы яҡтан килеп сыҡтығыҙ? Яҡын-тирәгә, таныш-белешкә оҡшамағанһығыҙ.

- Бик алыҫтан килдек, Евгений Васильевич, Башҡортостан тигән ерҙән. Бәлки, ишеткәнегеҙ барҙыр? - тине Зиннәтуллиндар.

- Бар, бар, уландар... Беҙҙең часта ла булды ул яҡтарҙан егеттәр, хәтәр ҡыйыу, батыр инеләр... Үкенескә күрә, Тыуған ил өсөн баштарын һалды инде күптәре... Ә бына мин һаман да йыбырлап йөрөп ятам әле... Бәлки окопташтарым өсөн дә йәшәйемдер, - тине ҡарт үҙенең оҙон ғүмерле, яуҙаштарының йөшлөй китеүендә үҙен ғәйепләгәндәй төҫ менән...

- Тимәк, һеҙ бәхетле! - тине ҡунаҡтар. - Хоҙай ғүмер биргән икән, әйҙә, йәшәгеҙ! Беҙҙең атайҙар өсөн дә!

Ҡарттың күҙҙәре йәшләнеп китте, икәүһен дә арҡаһынан тупылдатып яратты. Зиннәтуллиндар үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарын биреп, ҡарттың музейын ҡарарға теләктәре барлығын белдерҙе.

Бабай ҡулы менән иҙәп, уларҙы артынан эйәртеп, тышҡа алып сыҡты. Өйҙөң икенсе яғынан айырым инергә ишек эшләнгән икән. Шул яҡтан йәнә йортҡа инделәр. Айырым ҙур бүлмә ысынлап та мәктәп музейын хәтерләтә. Экспонаттар ҡуйырға стеллаждар ҙа эшләнгән. Стеналарҙа ла, витриналарҙа ла бик күп хаттар, документтар, фотолар. Иҙәндә иҫке онталған пулемет, каска, винтовка, снарядтар. Һалдат котелогы, кейемдәре, аш-һыу кәрәк яраҡтары, самолеттың бер өлөшө, танк гусеницаһының бер онтағы ... Бик күп әйбер туплаған икән ветеран.

- Һуғыш башланғанда мин 14 йәшлек кенә малай инем. Бер йылдан партизандар отрядына ҡушылып киттем... - тип үҙе тураһында ла һөйләп ташланы Васютин. - Ә Багерово һуғыш ҡайнаған ҡаҙанды хәтерләтте. Беҙҙең янда ғына хәрби аэродром теҙөнә фашистар. Нисә тапҡыр авиабомбаға тотоуҙарын һанап бөтөрөрлөк түгел. 1941 йылдың көҙөнән алып, 1944 йылдың яҙына ҡәҙәр аяуһыҙ һуғыштар барҙы. Йә беҙҙекеләр һөжүмгә күсә, йә фашистар баҫып ала. 44-тең апрелендә генә Керчь тулыһынса азатлыҡ яулап алды. Шуға тиклем бында ҡанҡойошта нисәмә мең ябай халыҡ һәм күпме меңдәрсә совет һалдаты һәләк булыуын әле лә теүәл генә һанап бөтә алмайҙар. Бер Багерово ровында ғына 7 мең кешенең ҡалдығы табылғас, каменоломняла 13 мең кеше һәләк булғас, башҡаһын үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ!..

Байтаҡ һөйләне ҡарт. Уны бүлдермәй тыңланы килеүселәр.

- Нимәләр табырға теләп тә таба алмаһағыҙ, ҡайғырмағыҙ, - тине ветеран. - Улар Енеү өсөн һәләк булған, Тыуған ил өсөн. Иң мөһиме ошо.

- Әлбиттә, - тип килеште туғандар. - Тик берәй документ табылһа ине тип теләгәйнек... Күптәр яуға үҙенең атын атланып киткән. Ә беҙҙең атай һуғышҡа гармуны менән киткән... Уйнап китәм, уйнап ҡайтырмын, тигән. Хатта беҙ икәүҙең исемен дә яҙған булған гармуны тышына.

- Гармун! Гармун! - тип бүлдерҙе уларҙы ҡарт. - Миндә бит гармун бар! Тәүҙә бында ғына торҙо ул, аҙаҡ гармундың һуғышҡа бер ҡатнашы ла юҡ, был экспонат түгел, тип музейға алыуҙан баш тартҡас, төпкәрәк йыйып ҡуйҙым мин уны.

Стена буйындағы өйөлгән әйберҙәр араһынан ветеран гармунды һөйрәп сығарҙы. Рим менән Мир аталарының гармунын иҫләмәй ҙә инде. Шулай ҙа өмөт менән улар икәүләп гармунға барып йәбеште һәм... йә, Хоҙай! Гармун күрегенең ике яғына Мир һәм Рим тигән яҙыуҙы күреп, аһ, иттеләр! Шул! Шул бит атайҙарының гармуны! Иҫтәре китеп гармунға йәбешкән ирҙәргә ҡарап, Евгений Васильевич та ҡыуанып китте. Рим менән Мир тигән яҙыуҙы үҙҙәренең исеме икәндә әйтҡәс:

- Таптығыҙмы ни? Шулмы? Мин бит Мир тигәне тыныслыҡты, тиҙерәк һуғыш бөтөүен теләп яҙылған тип уйланым. Ә Рим тигәне ҡала исемендәр тинем. Шуға күрә тәүҙә һәр килгән кешегә күрһәттем, хатта итальян һалдатынығылыр тип, итальян туристарына ла күрһәтеп ҡараным. Хатын да уҡый алманылар. Итальянса түгел, тинеләр.

- Хатын! Хаты ла бар инеме ни, Евгений Васильевич? - Зиннәтуллиндар һикереп китте.

- Бар ине шул! Документтары, яңылышмаһам, хаты ла бар ине. Хәҙер, хәҙер, - ҡаушауҙан ветеран хаттарҙы таба алмай ҡаңғырып китте. Унда һуғылды, бында тығылды. Уларға Мир менән Рим дә ҡушылып эҙләште. Ниһайәт, о, мөғжиҙә! Өскөл хаттар килеп сыҡты. Был әсәһенең атаһына яҙған хаттары ине. Бер осо йыртылған, бысранған, хатта ҡан таптары күренгән һуғыш йылы хаттары. Күп урындары юйылып, иҙерәп бөтһә лә, улар әсәйҙәренең ҡулын таныны. Хат латин хәрефтәре менән яҙылғайны. Яңы алфавитҡа күскәс тә әсәйҙәре латинса яҙып маташты шул, яңыса уҡыуға өйрәнә алманы. Өйҙәге атайҙарының хаттары ла латинса яҙылған ине. Хәрефтәре латинса булһа ла, эстәлеге башҡортса булғас, уларға уҡыу ауырлыҡ тыуҙырманы. Хат араһынан өйҙәрендәге кеүек фотоһүрәт тә килеп сыҡты: әсәһенең яурынына ҡулын һалып, атайҙары баҫып тора. Бәхетле рәсем! Иң аҫта атаһының ҡулы менән яҙыла башлаған ике-өс юллыҡ ҡына хат та килеп сыҡты: "Хөрмәтле вә ғиззәтле хәләл ефетем, уландарым Рим менән Мир! Һеҙгә алыҫ яу юлдарынан ҡайнар сәләм менән атайығыҙ. Ҡырымда икәнлегемде яҙғайным инде. Бик ҡаты һуғыштар бара, һөйөклөм, иҫәнимен сығып булһа, ошо диңгеҙҙе бер алып килер күрһәтер инем һеҙгә..." Хат ошо ерҙә өҙөлә... Атаҡаға күтәрелделәрме, әллә өҫтәренә бомба төшөп ғүмере ҡыйылдымы икән гәзиз аталарының?

Ирҙәрҙең күҙҙәренән сөбөрләгән йәште күреп, ветеран да танауын тартып, илап ебәрҙе. Үҙе:

- Иламағыҙ! Һеҙ бәхетле, һеҙҙән дә бәхетле кеше юҡ! Атайығыҙҙың гармунын да, үҙ ҡулы менән яҙған хаттарын да таптығыҙ! - тип йыуатып һөйләнде.

Оҙаҡ булды улар ветеран янында. Ҡыҙының әҙерләгән мул аш-һыуын ейеп, ҡарттың хәтирәләрен тыңлап, бындағы мәхшәрҙә үҙҙәре лә ҡатнашҡандай, уфтанышып, илашып, төн еткерҙеләр. Хатта алсаҡ хужаларҙың ҡыҫтауына ҡаршы тора алмай, ҡунып сығырға ла тура килде. Иртәгеһенә йәнә туғандар ҡәберлегенә барып, һуңғы тапҡыр баш эйеп, бәхилләшеп, ҡайтыр юлға сыҡтылар. Бабай күпме генә өгөтләмәһен, улар атайҙарының гармунын алманы. Үҙенең һуңғы төйәге янында ҡалһын, кешеләр килеп күрһен өсөн музейҙың яҡшы күренгән урынына ултырттып, атаһы тураһында бер аҙ мәғлүмәт яҙып ҡалдырҙылар...

### Эпилог

Мир Ғилман улы Зиннәтуллин, ҡалын көрән тышлы фотоальбомды күкрәгенә ҡыҫып, оҙаҡ уйланып ултырҙы. Унан альбом эсенән төрлө төҫтәге бик күп маркалар йәбештерелгән, немец телендә яҙылған бер хат алды ла, ҡытыршы устары менән, иркәләгәндәй итеп, иплән кенә һыйпап-һыпырып ҡуйҙы... Күптән түгел алыҫ Германиянан, ҡыҙы Миранан, килгәйне ул хат. "Әсәйем фанилыҡтағы юлын тамамланы... Был донъяла минең һинән башҡа яҡын кешем ҡалманы. Атай! Минең һине тағы бер ҡат күргем килә. Элекке осрашыуҙа беҙ бит бер ауыҙ һүҙ ҙә һөйләшмәнек. Миңә нимә - ул саҡтағы 23 йәшлек, донъяһы теүәл ҡыҙға? Барлығын да белмәгән, яңы табылған атай кәрәк инеме икән? Юҡтыр... Әле әсәйем үлем түшәгендә тағы ла һинең турала һөйләгәс, һине табырға ҡушҡас, уның һуңғы теләгенә ҡаршы килә алманым. "Минең яратҡан башҡортомдо тап! Ҡунаҡҡа саҡыр, йә үҙең эҙләп бар!" - тип үтенде әсәйем... Минең яратҡан башҡортом! Минең дә һине шулай тип йөрөткөм килә... Ерҙә ғүмер буйына етерлек мөхәббәт булған икән, тимәк, мин мөхәббәттән тыуған бала..."

Ҡыҙы Мира өҙөлөп саҡырһа ла, 83-сө йәшен ҡыуалап барған Мир Зиннәтуллин ундай йыраҡ ергә юлға сығырлыҡ ҡеүәт тойманы үҙендә. Дәрте бар ҙа, дарманы самалы шул уның... "Үҙең кил! Дүрт һеңлең менән таныштырып, Башҡортостанымды күрерһең!" - тип яҙҙы ул яуап хатында. Әле бына өлкән ҡыҙының, Мираһының, килгәнен көтөп, йәшлектә ҡалған гүзәл дә, хаяһыҙ йүләр ҙә ваҡыттарын иҫләп, фотоальбом аҡтарып ултыра... Бар тормошо бер альбомға һыйған. Беренсе биттә атаһы менән әсәһенең бергә төшкән берҙән-бер рәсеменән башланып, аҙаҡ Мирҙың армияла төшкәндәре, хәләле менән өйләнешкән сағы, ҡыҙҙары, хәҙер ейән-ейәнсәрҙәре менән арыу ғына йыйылып киткән икән. Тағы нисә бит өҫтәлер уға, өҫтәлерме икән әле? Мираһы килеп, һеңлеләре менән фотоға төшөр - ошо күренеш тә биҙәр әле был альбомды. Балалары уртаһында, бәлки, уға ла урын табылыр? Эйе, шул көндө еткерә алһа, бәхеттең үҙе булыр был!

**(Аҙағы. Башы 2022 йылдың 45-52-се, 2023 йылдың 1-2-се һандарында).**

✓ *Һәр ваҡыт өйҙә ултырыуҙың эмоциональ торош өсөн кире яғы ла бар. Көн һайын өйҙән сығыу иһә кешегә социаль әүҙемлекте һаҡлап ҡалырға булышлыҡ итә, был физик, шулай уҡ психик сәләмәтлек өсөн бик мөһим.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҺЫУ ҘА ДАУА ИКӘН...

■ Колумбия университеты ғалимдары ултырып эшләүселәргә ярты сәғәт һайын биш минут атлап йөрөп алырға кәңәш бирә. Ғалимдар күнегеүҙең ике төрөн тәҡдим иткән, беренсе төркөм ярты сәғәт һайын 1-әр минут хәрәкәтләнгән, икенсе төркөмдәгеләр сәғәт һайын - 5-әр минут. Һынауҙарҙа ҡатнашыусылар 8 сәғәт буйы креслола ултырған, ноутбукта нимәлер эшләгән, телефон ҡулланған һәм алда әйтелгән физик күнегеүгә генә торған. Уларҙың барыһы ла бер төрлө аҙыҡ ҡабул иткән. Тикшеренеүселәр ваҡыты-ваҡыты менән уларҙың ҡан баҫымын һәм ҡандағы шәкәр күләмен үлсәгән, тап улар йөрәк-ҡан тамырҙары сәләмәтлеге күрһәткесе булып тора. Һөҙөмтәлә ярты сәғәт һайын 5-әр минут физик әүҙемлек иң дөрөҫө тип билдәләнгән. Был ҡандағы шәкәрҙең дә, ҡан баҫымының да күтәрелеп китеүенә юл ҡуймаған, кәйеф күтәрелгән. 60 минут һайын атлап йөрөп алыуҙың бер ниндәй ҙә файҙаһы булмаған. Әммә ике төр күнегеү ҙә когнитив функцияларға тәьҫир итмәгән. Шулай ҙа эш ваҡытында аҙ ғына хәрәкәтләнеп алыу ҙа йөрәк сирҙәрен булдырмаҫҡа ярҙам итә.

■ Миндаль сәтләүегe насар холестерин кимәлен түбәнәйтә. Шулай уҡ спорт яратыусыларҙың физик күнекмәләрҙән һуң тән арыуын кәметә. Миндалде туҡланыу рационына мотлаҡ индерергә кәңәш ителә. Ике төркөмгә бүленгән 64 кеше физик күнекмәләр менән даими шөғөлләнә. Уларҙың араларында иң йәшенә - 30, иң олоһона 65 йәш була. Бер ай дауамында беренсе төркөм 57 грамм миндаль, икенсе төркөм калориялылығы ошо сәтләүектекенә тиң булған башҡа ризыҡ ашай. Һәр көн анализдар тапшырыла, ҡатнашыусыларҙың эмоциональ һәм физик торошо баһалана. Миндаль ашаусылар тренировкаларҙан һуң үҙен ныҡ арыған итеп тоймай, ҡан күрһәткестәре лә яҡшыраҡ була.

■ Эш, мәктәп, балалар баҡсаһы өйҙән йыраҡ, йөрөүгә ҡайын тип зарланаһығыҙмы? Ғалимдар мәжбүри рәүештә ошолай йөрөү сәләмәтлек өсөн файҙалы, тип билдәләй. Өйҙән эшләү популярлыҡ яулай барһа ла, һәр ваҡыт өйҙә ултырыуҙың кәйеф, эмоциональ торош өсөн кире яғы ла бар. Көн һайын өйҙән сығыу иһә кешегә социаль әүҙемлекте һаҡлап ҡалырға булышлыҡ итә, был физик, шулай уҡ психик сәләмәтлек өсөн бик мөһим. Өйҙә яҡшы ла, кешеләр менән аралашып, йөрөп ҡайтыу тағы ла күңеллерәк.

■ Иртә ҡартайыу, йыш ауырыуҙың сәбәбе организмдың етерлек кимәлдә һыу менән тәьмин ителмәүендә булыуы ихтимал. Быға тиклем үткәрелгән һынауҙарҙа ҡатнашҡан ҡомаҡтарҙы һыу эсеүҙә сикләйҙәр һәм уларҙың ғүмере лә ҡыҫҡа була. Яңы һынауҙар кешеләр өсөн дә һыуҙың мөһим булыуын раҫлаған. Кем һыуҙы күп эсә, хроник сирҙәр менән яфаланмай һәм оҙағыраҡ йәшәй. 11 кешелә үткәрелгән һынауҙар шуны асыҡларға ярҙам иткән: һыу эсмәгәнлектән организмда натрий күләме күтәрелгән, ә ул сәләмәтлектең күп кенә күрһәткестәре менән бәйле. Асыҡланыуынса, дөрөҫ һыу эсеү биологик ҡартайыуҙы тотҡарлай, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен булдырмай, үпкәләр сәләмәт була. Ер шарындағы халыҡтың яртыһы һыуҙы аҙ эсә. Шуға ла ғалимдарҙың һүҙҙәренә ҡолаҡ һалайыҡ һәм һыу эсеүҙе ғәҙәткә индерәйек.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**"Аҡыллы ир шул булыр: ҡулындағын алдырмаҫ,**
**Кеше һайын туҡталып,**
**Юҡ һүҙ тыңлап ҡаңғырмаҫ,**
**Барынан да бере шул:**
**Бөгөнгө эшен таңға ҡалдырмаҫ", - тигән боронғолар. Нәҡ шундай киләсәген бөгөн үк ҡайғыртҡан Белорет районы ир-егеттәре ошо көндәрҙә ҡор йыйҙы. Унда төбәктең һәр ауыл биләмәһенән килгән вәкилдәр РФ Дәүләт Думаһы депутаты, "Ир-егеттәр ҡоро" республика ойошмаһы рәйесе Зариф Байғусҡаров, Белорет районы хакимиәте башлығы Андрей Иванюта, "Ҡатай йыйыны"н ойоштороусы Рәнис Алтынбаев, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире, "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Янбаева һ.б. менән осрашты. Йыйын Белорет районының тау-урмандар ҡоршауында урынлашҡан хозур тәбиғәте, ихлас халҡы менән билдәле Манышты ауылында үтте.**

# ИР-ЕГЕТТӘР ӘҮҘЕМ БУЛЫРҒА,

## ҡатын-ҡыҙҙан алда йөрөргә тейеш

Һуңғы йылдарҙа ҡала яны ауылдарындағы шәхси йорт хужалары ғына түгел, боронғо башҡорт ауылдарында ла күршеләр бер-береһенән бейек ҡойма артына йәшеренеп бөтөүенә шаһит була йөрөй инек. Бының сәбәптәрен йәмғиәтебеҙҙең капитализмға йөҙ бороуына һәм "һәр кеше үҙе өсөн генә яуап бирә" тигән яңы тәғлимәт һәр мөйөштән тәкрарланыуына бәйләп аңлатып маташтыҡ. Әҙәмтәләрен инде күптәр үҙе лә яҡшы белә: күршеләрҙең бер-береһенә ярҙамлашыу, кәңәшләшеү, өмәләшеү, йәки бар ауылды борсоған бер эште күмәк хәл итеү түгел, ҡайсаҡ таныш та булмауҙары, сәләм биреп-алып йөрөмәүе лә ихтимал. Бына шундай "үҙаллылыҡ" башҡорт ауылдарындағы йолаға әүерелеп бөткән күркәм ғәҙәттәребеҙҙе лә юҡҡа сығара яҙҙы бит. Шөкөр, әүҙем генә эшләп килгән йәмәғәт ойошмаларының тырышлығы менән яйлап ҡына бындай битарафлыҡ, үҙенде генә ҡайғыртыуға сик ҡуйыла башланы. Бөгөн инде бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ әүҙем - күбеһе "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары һәм үҙҙәренең ҡулынан килгән эштәрҙе атҡарып, тормошобоҙға бер йәм, ҡот өҫтәп ебәрҙеләр. Бында уларҙың башҡорт халыҡ йолаларын, ҡул эштәрен, аш-һыуҙарын тергеҙеү, йәш быуынды тәрбиәләүгә ең һыҙғанып тотоноуын билдәләп үтмәй булмай. Республикабыҙҙа улар тырышлығы менән әллә күпме матур һәм әһәмиәтле саралар уҙғарылып тора. Тик күршеләр, ауылдаштар, милләттәштәр араһындағы вайымһыҙлыҡ, ғәмһеҙлек, битарафлыҡ кәртәләрен емереү өсөн гүзәл заттың ғына көсө етмәй. Һәм ошо хәҡикәтте аңлаған ир-егеттәребеҙ күптән түгел атайҙарҙың баһаһын күтәреү буйынса "Ир-егеттәр ҡоро" республика ойошмаһын булдырҙы, уға башланғысты РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров һалды.



Яңы ойошманың мөһим маҡсаттары Белорет районы ир-егеттәре күңеленә лә хуш килгән: улар ҙа ошо ойошма эшенә ҡушылырға ниәт иткән. Тәү башлап Манышты ауылынан Шакир Таһиров, Вилдан Абдрахманов, Хөрмәтулла Йомағужин дәрт итеп, уларҙы ғәмле ауылдаштары ла күтәреп алған. Сатлама һыуыҡ ғинуарҙың ҡояшлы бер көнөндә шулай итеп ҙур йыйын да ойоштороп ҡуйҙы улар: күңелле ярыштарҙан һуң борсоған мәсьәләләр буйынса етди һөйләшеүгә лә ваҡыт табылды.

Маныштылар халыҡты иртә менән Ҡәрләгән ерендә ауылдаштары һунарсы Бигарслан Солтанов исемендәге милли һәм этник спорт төрҙәре буйынса республика турнирына туплаНы. Турнирҙың үҙенсәлеге шунда булды: ҡатнашыусылар ҡалтағайҙа - һунар саңғыһында 1200 метрға уҙышты һәм юл ыңғайында туҡталып, традицион яндан һәм пневматик мылтыҡтан атып, һөңгө ташланы. Ойоштороусылар әйтеүенсә, был "башҡорт биатлоны" киләсәктә йыл да ғинуарҙың өсөнсө шәмбеһендә үткәрелеп торасаҡ. Көн һыуыҡ булыуға ҡарамаҫтан, быйылғы турнирҙа 29 кеше ҡатнашып, улар араһынан 9 еңеүсе билдәләнде. Ир-егеттәр араһында Манышты ауылынан Алмас Хажиәхмәтов беренселекте бирмәне, ә ҡатын-ҡыҙҙарҙан Олойылғанан Әлфиә Сәғәҙәтова, балаларҙан Рәсүл Миһранов еңеүсе булды. "Бигарслан Солтанов кем һуң?" тиһәгеҙ, ул 30 йәшендә 30 айыу, 16 бүре алған данлыҡлы һунарсы булған. Билдәле рәссам Ҡасим Дәүләткилдиевтың "Башҡорт һунарсыһы" картинаһында ла нәҡ ул һынландырылған. Бөгөн һунарсы тураһында ейән-ейәнсәрҙәре Вәлимә Өмөтбаева, Хәмит Солтанов ғорурла-



*Фазыловтар.*



*Раян Миһранов ярыша.*



*Шакир Таһиров.*

***✓ Ҡоймаланмаған һәм сүп-сар таралып ятҡан зыяраттар, "Айыҡ ауыл" конкурсында еңгән тораҡ пункттарҙа һатылған спиртлы эсемлектәр, ташландыҡ йорттар. Ҡайҙа был ауылдарҙағы ирҙәр?***

нып һөйләй, араларында эшен дауам итеүселәре лә бар. Олатайҙарының: "Тәбиғәт кешеһе булараҡ, ер атамаларын белеп, ошо ерҙе яратып йәшәү иң мөһиме", - тигән һүҙҙәренә тоғро улар.

"Башҡорт биатлоны"нан һуң, бар халыҡ ауыл мәктәбенә ағылды һәм Маныштының уңған хужабикәләре әҙерләгән мул табында төшкө аш тәғәмләп алғандан һуң, ағинәйҙәрҙең дәртле йырына сорналып, оҫта ҡулдарҙың күргәҙмәһен байҡарға кереште. Вилдан Абдрахманов менән Юнир Ғилманов септә һуғыу эшенә атайҙарынан өйрәнеп ҡалған һәм был эшкә ихлас тотонғандар. Ә бына сығышы менән Ноҡат ауылынан булып, әлеге көндә Белорет ҡалаһында йәшәүсе Азамат Заһиҙуллин солоҡтар, тәпән һәм көбөләр яһай. Ҡатын-ҡыҙҙарҙан зауыҡлы ҡул эштәрен Илгизә Юламанова, Сажидә Йомағужина, Зилә Сәмсетдинова, Миңһылыу Сәғитова күргәҙмәгә алып килгән. Шакир Таһиров иһә, үҙенең һәм оҫта ҡуллы уҡыусыларының да ағастан һырлап, көйҙөрөп һәм буяп биҙәк төшөрөп эшләнгән төрлө көнкүреш кәрәк-яраҡтарын күрһәтте. Ә бына Лилиә һәм Вәзир Фазыловтар ҡаҙы тултырыу эшенең айышы менән ихлас уртаҡлашты. Бына шундай һәр яҡлап та уңған, әүҙем Маныштың ауылы халҡының үҙҙәре үк "Ир-егеттәр ҡоро"н ойоштороуға теләк белдереүенә ғәжәп итерлек тә түгел инде. Хатта тыуған ауылдарынан ситтә тормош ҡороп, таралып йәшәһәләр ҙә, маныштылар тәпәй баҫҡан ерҙәрен һис онотмай, кәрәк булһа, кәңәше менән дә, эше менән дә ярҙам итеп тора, етмәһә. Был юлы ла шулай булған. Өфө поликлиникаларының береһен етәкләгән Раян Миһранов әйтеүенсә, ауылдаштар төрлө йәмәғәт ойошмаларының эшмәкәрлеге менән танышып, былтыр ноябрь айынан уҡ "Ир-егеттәр ҡоро"на үҙаллы берләшеп, әллә күпме мөһим эштәрҙе хәл итеп өлгөргән. Мәҫәлән, "Айыҡ ауыл - 2022" конкурсында актив ҡатнашҡандар, ойоштороу эштәрендә лә йөрөгәндәр, ауыл малы йыш ҡазаланған тимер юлы участкаһына электрон көтөүсе урынлаштырғандар, Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙарына арналған обелискыны, балалар майҙансығын тәртипкә килтергәндәр, балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре өсөн "Аҡбуҙат" журналына яҙылғандар, махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың ғаиләләренә кәрәк ярҙам күрһәтеп торалар. Артабан кәңәшмәлә РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров һүҙ алды һәм "Ир-егеттәр ҡоро" ойошмаһын булдырыу теләге ниҙән барлыҡҡа килеүе, ауыл халҡының көнкүрешен яҡшыртыуға йүнәлтелгән ниндәй закондар ҡабул ителеүе һәм ителәсәге тураһында һөйләне.

- Республика буйлап күп йөрөйөм, бигерәк тә Урал аръяғы районларына йыш юлланам һәм "Ҡайҙа бында ирҙәр?" тигән һорау тыуҙырған осраҡтар күп, - тип башланы сығышын Зариф Закир улы. - Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ актив һәм бөгөн улар көнкүрешебеҙҙе йәмләй, ата-бабаларҙың боронғо йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен һәм кәсептәрен тергеҙеү менән ағинәйҙәр шөғөлләнә. Ә бына ир-егетте шундай уҡ маҡсат менән берләштергән йәмәғәт ойошмаһы Башҡортостанда түгел, бөтә Рәсәйҙә булмай сыҡты. Атайҙарҙың баһаһын күтәреү буйынса "Ир-егеттәр ҡоро" ойошмаһын үҙемде борсоған әлеге һорауға яуап табыу маҡсатынан да, киләсәк быуындарыбыҙҙы тәрбиәләүҙә абруйыбыҙҙы арттырыу өсөн дә булдырҙым. Мине лә атайым: "Ир-егеттең төп бурысы илен, тыуған ерен һаҡлау", - тип үҫтерҙе. Мин өлкәндәр менән бер табын артына балалар ултырмай, урамдан үткән һәр кем менән һаулашырға, ауыр йөктәрен өйҙәренә тиклем алып барырға ярҙам итергә, өлкән кеше баҫып торғанда беренсе булып ултырмаҫҡа тигән тәрбиә алдым. Бөгөн беҙгә лә балаларыбыҙға шундай дөрөҫ тәрбиә биреп үҫтереү кәрәк. Ошо төп бурысты алдына ҡуя ла инде ойошмабыҙ.

Райондар буйлап сәфәрҙәрем ваҡытында ҡоймаланмаған һәм сүп-сар таралып ятҡан зыяраттар, "Айыҡ ауыл" конкурсында еңгән тораҡ пункттарҙа һатылған спиртлы эсемлектәр, юл ситтәрендә ҡолап ятҡан ағастар, законһыҙ рәүештә сығарылған ҡаҙылма байлыҡтарыбыҙ, төҙөкләндерелмәгән кәртә-ҡуралы һәм ташландыҡ йорттар кеүек хәлдәргә шаһит булам. Ҡайҙа был ауылдарҙағы ирҙәр? Нишләп улар ата-бабаларының һөйәктәрен мал-тыуарҙан тапатыуға, сүп-сар аҫтында ҡалыуына юл ҡуя? Йәки "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашҡан, хатта еңеү яулаған ауылдарҙа нишләп алкоголь һатыуҙы бөтөнләйгә тыймайҙар? Уйлап ҡарағыҙ: Рәсәйҙә йыл һайын 1,5 млн кеше үлә, шуларҙың 500 меңе спиртлы эсемлектәр ҡулланыу сәбәбендә яҡты донъя менән хушлаша. Урал аръяғындағы "Айыҡ ауыл"дарҙың береһен һынап ҡарамаҡҡа 3 магазинға индем - өсөһөндә лә спиртлы эсемлек һаталар, етмәһә, шул көндә барған өс туй табынында ла шешә ҡуйылған. Беҙ, депутаттар, ауыл халҡына спиртлы эсемлекте һатыуҙан баш тартыу юлын тәҡдим иттек, республиканың Көйөргәҙе районы Яҡут ауылы ғына ошо хоҡуҡ менән файҙалана. Был конкурста ҡатнашыусы ауылдар иң тәүге сиратта был хоҡуҡты алға һөрөргә тейеш. Ошондай ҡарар сығарылмаған ауыл "Айыҡ ауыл" кеүек конкурста ҡатнашырға хоҡуҡлымы икән, тигән шик тә тыуып ҡуя...

Дәүләт Думаһында экологияға ҡағылышлы мәсьәләләр буйынса ла эш алып барам. Ҡурсаулыҡтарыбыҙҙың сиктәре рәсми теркәлеү үтмәгән булған, был эшкә хәҙер финанс бүленде, тиҙҙән эштәр тамамланасаҡ. Артабан ул территорияларҙы һаҡланған зона итеү кәрәк, был осраҡта унда бөтә төр эштәр алып барыу тыйыласаҡ. Был иһә ҡаҙылма байлыҡтарҙы законһыҙ сығарыу осраҡтарына сик ҡуясаҡ. Әйткәндәй, Сәрмән ауылы эргәһендә әллә нисә йылдар буйы рөхсәтһеҙ карьер ҡаҙғандар, әммә урындағы халыҡ был турала өндәшмәгән. Ирҙәр нишләп шымып ятҡандыр, аңламайым.

Быйыл Башҡортостанда "Атайсалға - изге ғәмәлдәр" йылы һәм был беҙгә тыуған ауылдарыбыҙға ҡулдан килгәнсә ярҙам күрһәтеүгә тағы бер сәбәп булһын. Үрҙә һанап үтелгән эштәрҙе хөкүмәт, етәкселәр килеп эшләр, әмер бирер тип көтөп ултырмайыҡ. Беребеҙ ҡайтып, ауыл эргәһендәге берәй шишмәне кәртәләп, матурлап ҡуйһа ла файҙалы бит. "Ир-егеттәр ҡоро" ойошмаһының ниәтләгән эштәре байтаҡ, шулар араһында халыҡҡа эшҡыуарлыҡ буйынса оҫталыҡ дәресе үткәреү, атайҙар һәм улдар өсөн берҙәм саралар ойоштороу һәм башҡа файҙалы башланғыстарыбыҙ бар. "Минең генә ҡулдан килә торған эш түгел", - тип ҡул ҡаушырып ултырмайыҡ, ойошайыҡ һәм эшләйек. Ир-егеттәр әүҙем булырға, ҡатын-ҡыҙҙан алда йөрөргә тейеш тип уйлайым.

Йыйында артабан "Ҡатай йыйыны"н ойоштороусы Рәнис Алтынбаев, "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Янбаева, Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө юридик институты өлкән уҡытыусыһы Рөстәм Миһранов, Көньяҡ Урал дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы директоры Фәнүр Әлибаев, Сәрмән ауылының "Аҡһаҡалдар ҡоро" етәксеһе Хәкимйән Хәйретдинов сығыш яһаны. Улар һәр береһе Белорет районының ир-егеттәре әүҙемләшеүенә ҡыуаныс белдерҙе, үҙҙәренең борсолоуҙары менән уртаҡлашты, кәңәш бирҙе.

Йыйынға йомғаҡ яһап, "Ир-егеттәр ҡоро" ойошмаһының Белорет районы бүлексәһенә рәйес, һәр ауыл советында берәр вәкиле раҫланды. Шулай итеп, ойошма рәйесе итеп Сәфәрғол ауылынан Дим Йомағужин һайланды, уның урынбаҫары Илнур Әхмәтшин, секретары - Азамат Заһиҙуллин. Яңы ойошмаға 22 кеше беренселәрҙән булып рәсми теркәлде. "Беҙҙең район ойошмаһы йәмғиәттә, ғаиләлә ирҙәр абруйын арттырыу, ауыл кешеһенең матди хәлен яҡшыртыуға булышлыҡ итеү, айыҡ тормош өсөн көрәш алып барыу, төрлө социаль-иҡтисади шарттарҙы яҡшыртыу буйынса халыҡтың теләктәрен властарға еткереү һәм тығыҙ хеҙмәттәшлектә үҙ халҡыбыҙ мәнфәғәтендә эшләү бурысын алға ҡуясаҡ, тип уйлайым. Ҡулыбыҙҙан килгән эштәрҙе быға тиклем дә атҡарырға тырыштыҡ, хәҙер тағы ла кәңәшлерәк булырыбыҙға ышанам", - тине район бүлексәһенең рәйесе Дим Басир улы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тормошта үҙҙәре хужа булырға, киләсәген бөгөн ҡайғыртып йәшәргә теләгән аҡыллы ирҙәр шулай була икән, тигән инаныста ҡайттыҡ Маныштың ауылындағы ҡорҙан. Белорет ере киләсәктә нәҡ шундай ир-егеттәр арҡылы танылыр: халҡыбыҙ юҡҡа ғына "Ерҙең даны ирҙән" тимәгән. Ә башҡаларға был ваҡиға фәһем булып, Белорет районы ирҙәренән үрнәк алырға этәргес булһын.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**



*Азамат Заһиҙуллин.*

УҢЫШ ҠАҘАН



# АҠСА ҺӘМ ҒАИЛӘ

## Өлгө күрһәт

8 йәштә баланы аҡса яратырға өйрәтергә кәрәк. Хәҙер ул аҡсаһын теләһә нимәгә тотонмай, ҡиммәтерәк әйбер алырға йыя ала, сөнки аҡсаның ысын ҡиммәтен аңлай башлай. Тап ошо мәлдән унда аҡсаға ҡарата сәләмәт мөнәсәбәт тәрбиәләргә тырышығыҙ. Аҡсаға ҡәнәғәтлек килтереүсе тип ҡараған һайын, үҙегеҙгә аҡсаны күберәк тартаһығыҙ, быны ата-әсәләр үҙҙәре лә белергә тейеш.

Был йәштә бала мәктәптән класташының үҙенә оҡшаған әйберен һорауһыҙ алып ҡайтыуы ла ихтимал. Тынысланығыҙ, ғаиләлә буласаҡ енәйәтсе үҫеп килмәй, бары тик балала шул-шул әйбер миндә бар һәм уның булыуын теләйем тигән төшөнсәләр буталып китә. Алғыһы килә һәм кешенекен булһа ла ала. Ысынында был әйберҙең уға кәрәге булмауы ла ихтимал. Ошо хаҡта уға аңлайышлы итеп һөйләшегеҙ.

9 йәштә баланы аҡсаға һаҡсыл мөнәсәбәттә булырға өйрәтегеҙ. Уға иҫәп асығыҙ. Бала планлаштырырға ла өйрәнергә тейеш. Ошо пландың тормошҡа ашырына, тимәк, үҙенә ышанырға ла өйрәнә. Һәр өлгәшелгән маҡсат баланың үҙенә ышанысын арттыра. Айлыҡ аҡсаһын икегә бүлеп, яртыһын һаҡлап барырға күндерегеҙ.

10-11 йәштә бала үҙаллыға әүерелә. Аҡса эшләү теләге барлыҡҡа килә. Аҡса ауыр хеҙмәт менән табылырға тейеш, тигәнерәк аҡыл өйрәтеүҙәрҙән һаҡ булығыҙ, аҡса эшләү ҡәнәғәтлек килтерергә тейеш, тип әйтегеҙ. Һеҙ бәхетле кеше үҫтерергә теләйһегеҙ бит? Кеше башҡарған эше ҡәнәғәтлек килтергәндә генә бәхетле була, шул саҡта аҡса ла ҡулға күберәк килә. Яратҡан хоббийы ярҙамында балаға аҡса эшләргә ярҙам итһәгеҙ ҙә була.

12-14 йәштә бала сауҙа үҙәктәренә йөрөргә ярата башлай, көн һайын яңырып торған электрон ҡоролмалар баҙары үҙенең эшен эшләй. Тиҫтерҙәренең йоғонтоһо ла көсәйә. Бала ата-әсәһенең хистәре менән дә уйнарға өйрәнә, бына шуның шундай шәп телефоны бар, тийәсәк ул. Был миңә уҡыу өсөн кәрәк, тип тә өҫтәһә?

Атай менән әсәй былай ҙа үҙен гел ғәйепле тоя. Эштән ҡайтып инә алмағандары өсөн. Айырылышҡандары өсөн. Етерлек аҡса таба алмағандары өсөн. Балаға тейешле иғтибар бүлә алмағандары өсөн. Әммә был етешһеҙлектәрҙе аҡса рәүешендәге бүләктәргә алыштырырға ярамай. Ошо осорҙа ул үҙаллы хәл итергә өйрәнергә тейеш. Яңы телефон кәрәк икән, аҡса табыу юлдарын эҙләһен. Ата-әсә менән конфликттар көсәйеүе лә ошо йәшкә тура килә, бала тейешленән күберәкте талап итә башлай.

15-19 йәштә бала һаман үҙаллы аҡса эшләй башламаған икән, конфликттар, баланың ҡәнәғәтһеҙлеге көндән-көн арта барасаҡ. Икенсе яҡтан, эшләп тапҡанға ҡарағанда, әсәйҙән аҡса алыуы еңел дә инде. Ала алмай башлағас ҡына бала үҙенсә юлдар эҙләргә тотона. Был йәштә өйҙә иҙән, һауыт-һаба йыуған өсөн балаға өҫтәп аҡса биреү дөрөҫ түгел. Өйҙә ул һеҙгә былай ҙа ярҙам итергә тейеш, уның көн һайын башҡара торған бурыстары булһын. Һеҙ ашарға бешергән өсөн аҡса алмайһығыҙ бит, улар ҙа өйҙәге тәртип һәм матурлыҡ өсөн үҙен фиҙаҡәр рәүештә "ҡорбан итһен". Баланы тормоштоң ауырлыҡтарынан азат итергә тырышыу ҙа дөрөҫ тәрбиәгә килтермәй.

**Бодо ШЕФЕР.**



### 30 ЯНВАРЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20 Д/ф "Владимир Высоцкий и Марина Влади. Последний поцелуй". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.35 Д/ф "Отважные". Специальный репортаж. [16+]
12.45, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Пробуждение". [16+]
22.40 "Большая игра". [16+]
0.00 Т/с "Краткий курс счастливой жизни". [18+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 2.55 Т/с "Каменская-3".
3.45 Т/с "Личное дело". [12+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.15 "Тәмле. Мы вместе!" [12+]**
**10.00 "Байыҡ" представляет… [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Спортивная история. [12+]**
**12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**12.45, 3.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 23.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 Преград. Net. [6+]**
**16.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Пофутболим? [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 "Алтын тирмә". [0+]**
**1.00 Спектакль "Прерванная свадьба". [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 Следопыт. [12+]**

### 31 ЯНВАРЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Пробуждение". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
0.00 Т/с "Краткий курс счастливой жизни". [18+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 2.55 Т/с "Каменская-3".
3.45 Т/с "Личное дело". [12+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Ете егет". [12+]**
**10.45 Специальный репортаж. [12+]**
**11.00, 16.00, 6.00 "Дорога к храму". [0+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**12.45, 3.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 23.30 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Детей много не бывает. [6+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**17.00 Автограф. [12+]**
**17.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.00 "Елкән". [6+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**0.45 Спектакль "Зятья Гюргюри". [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**

### 1 ФЕВРАЛЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Пробуждение". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
0.00 Т/с "Краткий курс счастливой жизни". [18+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 2.55 Т/с "Каменская-3".
3.45 Т/с "Личное дело". [12+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**10.30 "Ҡурай даны". [12+]**
**10.45 Әлләсе… [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 20.15 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [12+]**
**12.15 Пофутболим? [12+]**
**12.45, 3.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 23.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.45 Интервью. Доступная среда. [12+]**
**15.00 "МузКәрәҙ". [6+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "КультУра". [6+]**
**16.00, 6.00 Тайм-аут. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 История признания. [12+]**
**18.00 Автограф. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.50 Хоккей. "Торпедо" (Нижний Новгород) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**1.15 Спектакль "Белый пароход". [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 2 ФЕВРАЛЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Пробуждение". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
0.00 Т/с "Краткий курс счастливой жизни". [18+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 "Живые и мёртвые". Спектакль к 80-летию победы в Сталинградской битве. Трансляция из Волгограда.
3.00, 3.50 Т/с "Каменская-3".
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Алтын тирмә". [0+]**
**10.45 История одного села. [12+]**
**11.00 Д/ф "Дорога домой". [6+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45, 3.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 "Сулпылар". [0+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Формула меда. [12+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**1.15 Спектакль "Москва-Васютки". [12+]**
**2.45 "Бай". [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 "Это моя профессия". [12+]**

### 3 ФЕВРАЛЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.35 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос. Дети". 10-й юбилейный сезон. [0+]
23.25 Д/ф "Олег Целков. Единственный из многих". [12+]
0.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.30 Ну-ка, все вместе! [12+]
23.55 Х/ф "Операция "Ы" и другие приключения Шурика". [6+]
1.30 Х/ф "Французы под Москвой". [12+]
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**10.30, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 20.45, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45, 6.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Слово Земли. 2.0. [12+]**
**12.45, 5.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.15, 17.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**13.30, 14.45, 18.30, 0.00, 3.00 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Д/ф "Забих Искужин: парень с берегов Сакмары". [12+]**
**15.00 "Городок АЮЯ". [6+]**
**15.15 "МузКәрәҙ". [0+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 Патриот РФ. [12+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [0+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**19.00, 3.30 "Честно говоря". [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 "Аксаковская елка". [0+]**
**21.20 Хоккей. ЦСКА (Москва)- "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**0.30 Спектакль "Без вины виноватые". [12+]**
**4.15 "Ете егет". [12+]**
**5.30 Автограф. [12+]**

### 4 ФЕВРАЛЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота". [0+]
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Х/ф "Самогонщики". К 100-летию великого режиссера Леонида Гайдая. [12+]
10.35 Д/ф Премьера. "Леонид Гайдай. Все бриллианты короля комедии". [12+]
11.40, 19.25 Х/ф "Кавказская пленница, или Новые приключения Шурика". [0+]
13.10 Д/ф "Как Иван Васильевич менял профессию". [12+]
14.05 Х/ф "12 стульев". [0+]
17.10 Д/ф "Бриллиантовая рука". Рождение легенды". [12+]
17.50 Х/ф "Пес Барбос и необычный кросс". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 Д/ф "Леонид Гайдай. Все бриллианты короля комедии". [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.15 Д/ф "Нина Гребешкова. "Я без тебя пропаду". [12+]
0.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.05 Т/с "Только ты". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Нарисуй меня счастливой". [12+]
0.30 Х/ф "Доктор Улитка". [12+]
3.50 Х/ф "Леший". [16+]
5.51 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ете егет". [12+]**
**8.30 "Это моя профессия". [12+]**
**9.00 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Елкән". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 Преград. Net. [6+]**
**11.00 "КультУра". [6+]**
**11.15 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**13.00, 2.15 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00, 2.45 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Все песни о прекрасном. [12+]**
**19.00 Специальный репортаж. [6+]**
**19.15, 3.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байыҡ" представляет… [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 1.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Байыҡ-2022". Гала-концерт. [12+]**
**4.30 Тормош. [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 "Мистический Башкортостан". [12+]**

### 5 ФЕВРАЛЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Д/ф "Как Иван Васильевич менял профессию". [12+]
7.00 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.45 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Премьера. "Жизнь своих". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
13.25 Х/ф "Сталинград". К 80-летию окончания Сталинградской битвы. [12+]
17.00 Д/ф Премьера. "Добровольцы". Специальный репортаж. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 "Время".
22.35 Т/с Премьера. "Контейнер". [16+]
23.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

6.10 Х/ф "За чужие грехи". [12+]
6.15, 2.20 Х/ф "Однажды и навсегда". [16+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
12.00 Большие перемены.
13.05 Т/с "Только ты". [16+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Д/ф "Тушенка. Солонина. Разведка". [12+]
4.07 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [0+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 "Дорога к храму". [0+]**
**16.00, 4.30 Историческая среда. [12+]**
**16.30 Надо знать. [12+]**
**16.45 "Честно говоря". [12+]**
**17.30 Спектакль "Деревья умирают стоя". [12+]**
**20.00, 4.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**20.30 Д/ф "Назар Наджми. Сотканный из пламени и чувств". [12+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Гала-концерт, посвященный 110-летию со дня рождения Ф.Гаскарова. [12+]**
**1.15 Спектакль "Дама без камелий". [12+]**
**3.30 Автограф. [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

*КЕМ АЛЫҠ?*

# ИҢ ШӘП БҮЛӘК - КИТАП!

(Башы 1-се биттә).

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Октябрьский ҡалаһынан** Урал Мостафин, **Салауат ҡалаһынан** Сабит Яҡупов, **Межгорье ҡалаһынан** М. Азакова, Нефтекама ҡалаһынан Л. Рәхмәтов, **Баймаҡ районы** Мерәҫ ауылынан Мәфрүзә Зәйнәғәбдинова, **Баймаҡ ҡалаһынан** Сафия Әсәнова, **Дыуан районы** Иҫке Хәлил ауылынан З. Низамова, **Миәкә районы** Ҡырғыҙ-Миәкә ауылынан Фаил Шәймәрҙәнов, **Әбйәлил районы** Салауат ауылынан Мәрхәбә Ноғоманова, **Хәйбулла районы** Түбәнге Исмәк ауылынан Ханнан Мөхәмәтйәров, **Ейәнсура районы** Кинйәбулат ауылынан Марат Маликов, **Салауат районы** Ишембай ауылынан Альмира Хизбуллина, **Учалы районы** Наурыз ауылынан Миңнур Байғарина, **Күгәрсен районы** Тирмән ауылынан Рәшит Байғөбәков, **Әлшәй районы** Ҡармыш ауылынан Рәйсә Зиннәтуллина - **Вәлиәхмәт Бәҙретдиновтың "Башҡорт ырыуҙары"**;

**Әбйәлил районы** Әлмөхәмәт ауылынан Нур Заманов, **Баймаҡ районы** Аҡморон ауылынан Ғәлиә Исламғолова, Ишмөхәмәт ауылынан Сәфәрғәли Ярмуллин, Йәрмөхәмәт ауылынан Һиҙиәт Мөъминов, Урғаҙа ауылынан Фәниә Әминева, Мерәҫ ауылынан Әхәт Әсмәндийәров, Ярат ауылынан Зәлифә Ҡасҡынова, Билал ауылынан Рафиҡ Әбйәлилов, **Балаҡатай районы** Түбәнге Үтәш ауылынан Рәилә Фатихова, **Учалы районы** Мәҫкәү ауылынан Зәкиә Шәһәрғазина, Иҫке Байрамғол ауылынан А. Сәйфетдинова, Ишкенә ауылынан Хафаса Әлхәмова, Бөйҙө ауылынан Зифа Әсфәндийәрова, Ҡунаҡбай ауылынан И. Закирова, **Ғафури районы** Ибраһим ауылынан Фәниә Ғәлиуллина, Еҙемҡаран ауылынан Фәниә Килмөхәмәтова, Ҡауарҙы ауылынан Миңзәлә Нәзирова, **Көйөргәҙе районы** Кинйәбай ауылынан Мәймүнә Сәғитова, **Хәйбулла районы** Мәмбәт ауылынан Фәрит Мәмбәтов, Таштуғай ауылынан Р. Рахманғолова, Уфимский ауылынан Ғилминур Такалова, **Стәрлетамаҡ ҡалаһынан** Сажидә Шәрипова, **Ауырғазы районы** Мораҙым ауылынан С. Сафин, Сынтимер Исәнбаев, **Салауат районы** Тирмән ауылынан Фәүзиә Шакирова, Фәриә Ниғмәтова, **Йылайыр районы** Ҡашҡар ауылынан Ф. Сәлимова, **Ҡырмыҫҡалы районы** Иҫке Бәпес ауылынан Ғәлиә Абдуллина, **Федоровка районы** Юлдаш ауылынан Гөлимә Кинйәбаева, **Сибай ҡалаһынан** Рүзидә Үтәшева, **Мәсетле районы** Ләмәҙтамаҡ ауылынан Любовь Ғатауллина - **2023 йылға "Башҡортса дини календарь"**;

**Өфө ҡалаһынан** Н. Закирова, З. Ҡунаҡасова, Лилиә Нафиҡова, Лена Йосопова, **Баймаҡ районы** Ишмырҙа ауылынан Миләүшә Бүтембаева, Мерәҫ ауылынан Мәғрифә Кейекбаева, **Межгорье ҡалаһынан** З. Ғәлиева, **Ауырғазы районы** Мораҙым ауылынан З. Насырова, **Учалы районы** Мәҫкәү ауылынан Флүрә Садиҡова, Ҡунаҡбай ауылынан Рәйес Шәймәрҙәнов, **Стәрлетамаҡ ҡалаһынан** Шәүрә Булатова, Стәрлетамаҡ районы Васильевка ауылынан Флүзә Рәхмәтуллина, **Ейәнсура районы** Бикбау ауылынан Ләлә Түләгәнова, **Мәләүез ҡалаһынан** Рәйхана Вәлиева, **Салауат районы** Малаяҙ ауылынан Зилә Садыҡова - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика и здоровье"**;

**Ауырғазы районы** Төрөмбәт ауылынан А. Вәлиева, **Салауат районы** Әлкә ауылынан Ильвира Заһиҙуллина, **Дыуан районы** Арый ауылынан Зөһрә Байтуллина, Мәрйәмғол ауылынан Венера Минһажева, **Баймаҡ районы** Мерәҫ ауылынан Фәүзиә Ямантаева, 2-се Эткол ауылынан Әкрәм Ҡәйепҡолов, **Мәләүез районы** Арыҫлан ауылынан Рәйфә Камалетдинова, **Ғафури районы** Сәйетбаба ауылынан Шәһит Килмөхәмәтов, **Стәрлебаш районы** Стәрлебаш ауылынан М. Әһлиуллин, **Учалы районы** Ҡунаҡбай ауылынан Гөлнара Йосопова - **Нуриман Мусин "Мөхәббәт сере"** китаптарына лайыҡ булды.

Ҡотлайбыҙ һәм был акциябыҙ киләһе миҙгел өсөн дә үҙ көсөндә икәнен белеп ҡуйығыҙ. Квитанцияға ҡушып, гәзитебеҙ тураһындағы фекерегеҙ теркәлгән ҡош телендәй генә хатығыҙҙы ла һалһағыҙ, тыуған көндәрегеҙ тураһында ла хәбәр итһәгеҙ, бик шат булырбыҙ. Шулай уҡ квитанцияларығыҙҙа адрестар тулы, аңлайышлы итеп тултырылһын ине, тигән теләк тә бар.

**Иҫкәрмә. Бүләкләнеүселәр китаптарҙы үҙҙәренең почтальондары аша алыр. Кемдәргә китаптар барып етмәгән, улар Өфөләге балалары, туғандары, таныштары аша Революцион урамы, 167/1 адресы буйынса урынлашҡан редакциябыҙҙан алдыра ала.**

**Беҙҙең сайт:** www.kiskeufa.ru
**Беҙҙең электрон почта:** kiskeufa@mail.ru

**МӨХӘРРИРИӘТ.**



## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ғинуар айында тыуған көндәрен билдәләүсе - **Шишмә районы** Түбәнге Хәжәт ауылынан Н. Иҙрисова, Эльвира Ҡорбанова, **Ауырғазы районы** Мораҙым ауылынан Нурия Ильясова, **Белорет районы** Әзекәй ауылынан Таңһылыу Басирова, Рәлиә Таһирова, Инйәр ауылынан Рафиға Ғәлиуллина, **Белорет ҡалаһынан** Сатура Минһажетдинова, **Өфө районы** Шамонино ауылынан Мәүлиҙә Тимербаева, Рәйлә Ҡалҡаманова, Флүрә Супанова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Ҡоростай ныҡлы һаулыҡ, ап-аҡ бәхеттәргә төрөнөп, оҙаҡ йылдар ғүмер итегеҙ, тип теләйбеҙ. Ғаиләләрегеҙ имен, эштәрегеҙ уң һәм тыуыр таңдарығыҙ тыныс булһын!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**3 февраль Премьера! "Ҡыҙыл паша"** (Н. Асанбаев), драма. 12.00, 19.00 12+
**4 февраль "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш). 18.00 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**31 ғинуар "Новогодние приключения Длинноуха"** (Л. Исҡужина), әкиәт. 12.00 0+
**2 февраль "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 11.00 0+
**"Үәт, исмаһам, ахырызаман!"** (М. Багаев), комедия. 16+
**3 февраль "Мөхәббәт һәм нәфрәт"** (З. Биишева), музыкаль риүәйәт. 12+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**31 ғинуар "Мөхәббәт"** Сәйҙә Ильясова концерты. 6+
**4 февраль "Музыку слушаем вместе".** 11.00 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

*Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:*
**4 февраль "Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 12.00, 14.00 0+
**5 февраль "Буратино"** (А. Толстой). 12.00, 14.00 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**4 февраль Премьера! "Сказка о рыбаке и рыбке"** (А. Пушкин, Л. Ниғмәтуллина инсц.), әкиәт. 13.00 0+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**31 ғинуар "Сражаться, выстоять и победить"** музыкаль-әҙәби лекторий. 6+
**4 февраль "Ҡарауыл! Атай өйләнә!"** (Б. Рацер, В. Константинов), комедия. 18.00 12+
**5 февраль "Золотой осел Насретдина"** (Ш. Казиев), әкиәт. 12.00 0+
**"Минең ҡатынымдың исеме Морис"** (Р. Шарт), комедия. 18.00 16+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

Учалы районы ауылдарында **"Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков) лирик комедияһы менән гастролдәр:
**30 ғинуар -** Ҡунаҡбай, **31 ғинуар -** Миндәк, **1 февраль -** Уральск, **2 февраль -** Илсе, **3 февраль -** Ҡобағош. 19.00 12+

## БР Милли музейы

**30 ғинуар - 10 февраль "Ике бабай", "Өфө картография күҙлегенән", "Ленинградты немец-фашист ғәскәрҙәре ҡамауынан азат итеүҙең 79 йыллығы"** күргәҙмәләре эшләй. 6+
**2 февраль "Сталинград һаҡсылары"** батырлыҡ дәресе. 15.00 6+
**3 февраль "Башҡаса ҡараш"** (И. Никифоров), күргәҙмә. 15.00 6+
**4 февраль "Этноквест".** 13.00 6+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Ғинуар - Февраль (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 30 (8) дүшәмбе | 7:42 | 9:12 | 13:30 | 16:20 | 17:46 | 19:16 |
| 31 (9) шишәмбе | 7:40 | 9:10 | 13:30 | 16:22 | 17:48 | 19:18 |
| 1 (10) шаршамбы | 7:38 | 9:08 | 13:30 | 16:24 | 17:50 | 19:20 |
| 2 (11) кесе йома | 7:37 | 9:07 | 13:30 | 16:26 | 17:52 | 19:22 |
| 3 (12) йома | 7:35 | 9:05 | 13:30 | 16:28 | 17:54 | 19:24 |
| 4 (13) шәмбе | 7:33 | 9:03 | 13:30 | 16:30 | 17:57 | 19:27 |
| 5 (14) йәкшәмбе | 7:31 | 9:01 | 13:30 | 16:32 | 17:59 | 19:29 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ИҪКӘРТӘБЕҘ!*

# БАРЫБЕР ҺАҠЛАНЫУ КӘРӘК!



Роспотребнадзор сайтында коронавирус инфекцияһының "кракен" штамы тураһында киң таралған һорауҙарға яуаптар баҫылған. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, йыл башында күҙәтеү ведомствоһы Рәсәйҙә "кракен"дың теркәлмәүен хәбәр иткәйне. Был штамм Америка Ҡушма Штаттарында әүҙем тарала, ул Европала өҫтөнлөк итер тип күҙаллана. Хәҙер Рәсәйҙә "омикрон-стелс" һәм Көньяҡ Африка штамдары менән ауырыусылар күбәйә. Роспотребнадзор "кракен"дың үтә ныҡ йоғошло булыуы хаҡында иҫкәртә. Коронавирустың был төрөнән үлем осраҡтары күп түгел, ләкин ул йоғошлораҡ һәм тиҙ тарала. "Кракен", башҡа киҫкен респиратор вирус инфекциялары кеүек үк, һауа юлы менән йоға. Хәүеф төркөмөнә балалар, ололар һәм хроник сирҙәр менән яфаланғандар ҡарай. Рәсәйҙә "кракен"дың таралыу ихтималлығы бар, сөнки илдең сиктәре асыҡ, самолеттар оса. Нисек һаҡланырға? Әлеге ваҡытта һәр кешелә тиерлек коронавирусҡа иммунитет бар. Шуға күрә Роспотребнадзор яңы штамдарҙан ҡурҡмаҫҡа саҡыра, ләкин шәхси гигиена талаптарын үтәү мөһим. Әлегә "кракен" 25 илдә асыҡланған, ләкин уны йоҡтороу осраҡтары арта бара. Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһында донъяла инфекцияның яңы тулҡындарын көтәләр, ләкин был үлемдең яңы тулҡындарына килтермәҫ тип фаразлайҙар.

МӘҘӘНИӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# СКУЛЬПТОР НИСЕК КҮҘАЛЛАЙ?

**Билдәле скульптор Салауат Щербаков "Башинформ" мәғлүмәт агентлығына Башҡортостандың Беренсе Президенты Мортаза Рәхимовҡа һәйкәлде нисек күҙаллауы тураһында һөйләгән.**

- Һәйкәлдән йылылыҡ, ихласлыҡ бөркөләсәк, Мортаза Ғөбәйҙулла улының характерын сағылдырасаҡ, ҡыҫҡаһы, Рәхимовса буласаҡ: ялған-пафослы түгел, ә эшлекле, лайыҡлы, дәрәжәле. Объект Өфөгә хас булғанса, классик, архитектура йәһәтенән дөрөҫ ҡараш менән эшләнәсәк, шул уҡ ваҡытта башҡорт декоратив сюжеттары ла урын аласаҡ - башҡорт характеры күренеп торорға тейеш, - ти ул.

Скульптор шулай уҡ эш алдынан уға баш ҡалала Мортаза Ғөбәйҙулла улын яҡындан белеүселәр менән аралашырға, уның характеры, ҡылыҡтары тураһында мәғлүмәт тупларға теләй.

- Һәйкәл артыҡ ҙур булмаясаҡ, әммә уртаса дәүмәлдә, классик постаментта яҡынса өс метрлыҡ булыуы күҙаллана. Постамент граниттан, фигура үҙе бронзанан эшләнәсәк, - ти скульптор.

Һәйкәл урыны уның күренешен билдәләйәсәк. Салауат Щербаков тиҙ арала эскиз эшләүгә тотонасаҡ һәм һәйкәлде быйыл ҡуйырға мөмкин буласаҡ, тип белдерә.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

# БАЛАЛАР ҺӨЙЛӘРГӘ ӨЙРӘНӘ



**Үҙ ижадың тураһында һөйләй белеү оҫталығы - бөгөнгө заман талабы. Ошо талапҡа яуап рәүешендә Башҡортостанда музыка, художество, сәнғәт мәктәптәре тәрбиәләнеүселәрен һөйләү оҫталығына өйрәткән "КультУРА!" мәктәп студиялары медиа селтәре барлыҡҡа килде. Яңы проектты Президенттың мәҙәни башланғыстар фонды ярҙамында "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр каналы "Бишек" автономиялы коммерция булмаған ойошма менән берлектә бойомға ашыра.**

Проект буйынса эш үткән йылдың октябрь айында башланды. "КультУРА!" медиа селтәренә республиканың 10 мәктәбе һәм колледжы ҡушылды. Һәр белем усағында 5-7 уҡыусынан торған төркөм ойошоп, йыл дауамында профессионалдар ҡулы аҫтында контент эшләнеләр, онлайн һәм офлайн оҫталыҡ дәрестәрендә, интенсив-тренингтарҙа, воркшоптарҙа, тапшырыуҙар төшөрөүҙә ҡатнаштылар. Балалар үҙҙәре ҡатнашҡан саралар, өлгәштәре, мөһим мәсьәләләр тураһында киң аудиторияға һөйләп өйрәнеү мөмкинлеге алды. Улар музыка, бейеү, һынлы сәнғәт, тыуған мәҙәниәтенең тарихы, бөгөнгөһө һәм киләсәге, ил һәм шәхсән үҙе өсөн ижадтың әһәмиәте хаҡында ла бәйән итте. Йәш хәбәрселәрҙең эштәре БСТ һәм "Тамыр" каналдарында аҙна һайын "КультУРА!" мәғлүмәти тапшырыуы булып күрһәтелеп барҙы. Шулай уҡ "КультУРА!" беренсе фестивале ойошторолоп, унда төп дүрт номинация: "Төшөрөү һәләте" - видеосюжет, "Яҙыу һәләте" - текст, "Таратыу һәләте" - социаль селтәрҙәр, "Күреү һәләте" - фотоһүрәт буйынса еңеүселәр тәбрикләнде. Еңеүселәр рәтенә Урта махсус музыка колледжы, Р. Нуриев исемендәге Башҡорт хореография колледжы, Өфө, Салауат ҡалалары, Нуриман, Күгәрсен, Асҡын районлары балалар сәнғәт мәктәптәре уҡыусылары инде. "КультУРА!" проекты мәҙәниәт өлкәһен республика һәм ил кимәлендә лайыҡлы яктырта алырлыҡ медиа хеҙмәткәрҙәр тәрбиәләү маҡсатын ҡуйған. Бынан тыш, уны бойомға ашырыу барышында барлыҡҡа килгән сағыу, ынғай көйләнештәге контент сәнғәт донъяһына тағы ла күптәрҙе ылыҡтырыр, тамашасылар йәлеп итер тип тә көтөлә.

# БЕР БЫУАТЛЫҠ ЮБИЛЕЙ

**Үҙенең бер быуатлыҡ юбилейын Өфө сәнғәт училищеһы студенттар, уҡытыусылар, ижади коллективтар һәм уҡыу йортоноң билдәле сығарылыш уҡыусылары ҡатнашлығындағы ҙур байрам концерты менән билдәләне.**

Уҡыу йортоноң мәртәбәле юбилейы менән Башҡортостан Республикаһының мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова тәбрикләне: "Училищены асыуҙа ҡатнашҡандарҙы, уның сығанағында торғандарҙы билдәләп үткем килә. Ваҡытында улар Башҡорт сәнғәт техникумын асыу тураһында аҡыллы ҡарар ҡабул иткән. Уҡыу йорто ветерандарын, шулай уҡ бөгөнгө көндә ижади кадрҙар әҙерләүсе уҡытыусыларға рәхмәт. Сәнғәт эшмәкәрҙәрен әҙерләү - белем биреү генә түгел, һәр дәрес - ул ижад, яңы үрҙәр эҙләү, камиллашыу", - тине ул һәм Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың ҡотлау һүҙҙәрен уҡып ишеттерҙе.

Ижади коллективтың ветерандарына һәм хеҙмәткәрҙәренә дәүләт наградалары тапшырылды. Уҡыу йортоноң элекке етәксеһе Виктор Линник һәм вокал бүлеге уҡытыусыһы Тәнзилә Үҙәнбаева Салауат Юлаев ордены менән, Наилә Килдеева, Василий Слягузов, Фаина Улановская һәм Наталья Камаева "Хеҙмәт батырлығы" миҙалы менән бүләкләнде. Шулай уҡ байрам тантанаһында училище хеҙмәткәрҙәре араһында "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре" исемен алыусылар, Башҡортостан Республикаһының Маҡтау ҡағыҙына һәм башҡа күп төрлө дәүләт наградаларына лайыҡ булыусылар байтаҡ ине.

Өфө сәнғәт училищеһы - Рәсәйҙең иң оло колледждары рәтендә. Күп профилле уҡыу йортонда балалар сәнғәт мәктәбе, театраль-концерт ойошмалары, киностудиялар һәм башҡа өлкәләр өсөн белгестәр әҙерләнә. Унда мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһендә уңышлы хеҙмәт итеүсе меңәрләгән белгестәр уҡып сыҡҡан.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КҮРӘСӘГЕҢ БУЛҺА...

## күркә талап үлтерер

Күршенең тауығы ҡаҙҙай, ҡатыны ҡыҙҙай була.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡыҙ-ҡатынды яулау өсөн ирҙәр гәжәйеп матур ялған уйлап сығара. Ҡыҙ-ҡатынды ташлау өсөн ирҙәр иң ахмаҡ һәм иң мәғәнәһеҙ ялған уйлап сығара.

**(Колетт).**

Ир-егеттең холҡо тураһында уның ҡатынының һаулыҡ торошо һөйләй.

**(Сирил Конноли).**

Кешеләр үҙҙәренең етешһеҙлектәренән арынырға ятратмай һәм уларҙы ниндәйҙер дәрәжәгә күтәреүҙе өҫтөн күрә.

**(Тадеуш Котарбинский).**

Әгәр ҙә кеше сусҡаларса эш итһә, үҙен: "Кисерегеҙ, мин бары тик кеше генә бит!" тип аҡлай, әгәр ҙә уның менән сусҡаларса ҡыланһалар: "Туҡтағыҙ, мин дә кеше бит!" тип тауыш күтәрә.

**(Карл Краус).**

Бер нәмә лә эшләмәгәндәр генә яңылышмай. Бер нәмә эшләмәү ҙә яңылышлыҡ, әлбиттә..

**(Эмиль Кроткий).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ҡарт донъя ҡуйыр алдынан улына шундай васыятын әйткән. "Мин һиңә өс кәңәшемде бирәм, шуны тотһаң, һин бай ҙа, сәләмәт тә, бәхетле лә, мөхәббәтле лә булырһың, - ти.- Һин иртән берәүгә лә үҙең башлап сәләм бирмә - быныһы тәүге кәңәшем. Ауыл һайын йорт һал - икенсе кәңәшем шул. Ай һайын кәләш ал - быныһы өсөнсө васыятым". Атаһы үлгән. Улы атаһын юғалтыу ҡайғыһынан бер аҙ арынғас, уның баяғы өс васыяты тураһында уйлана башлаған. Уйлай торғас, тағы ла олораҡ ҡайғыға ҡалған был. "Ҡара әле, атайым миңә ҡалай насар васыят ҡалдырған. Уларҙы нисек үтәмәк кәрәк? Нисек кешеләргә сәләм бирмәй үтеп булһын? Нисек итеп ауыл һайын йорт һалмаҡ кәрәк? Нисек итеп ай һайын өйләнергә була?" Шулай оло ҡайғыға ҡалып йөрөгәндә был бер аҡыллы аҡһаҡалға тап була. Уға үҙ хәлен һөйләп бирә. Аҡһаҡал уға былай ти: "Улым, һин бит атайыңдың васыятын дөрөҫ аңламайһың. Иртән берәүгә лә сәләм бирмә, тигәне, бар халыҡтан алда йоҡонан тор, эштәреңде теүәллә, һинән һуң торғандар һиңә сәләм бирһен, тигәнде аңлата. Ауыл һайын йорт һал, тигәне, ауыл һайын яҡшы дуҫтарың булһын һәм һин уларҙың йортона үҙ йортоңа барып ингәндәй инерһең, тигәнде аңлатыр. Өсөнсө васыяты шул: ир кеше гел генә өйҙә ултырмай, ил гиҙә, мал таба, ана шул эш менән йөрөп килгәндән һуң ҡатынын һағынып ҡайта, һәр ҡайтҡан һайын күрешеү яңынан ҡауышыу һымаҡ була..."**

ЯҢЫ КИТАП СЫҠТЫ

# V БЫУАТТАН БАШЛАНА...



**Үткән йыл аҙағында Өфө Фән һәм технологиялар университетының башҡорт филологияһы, көнсығышты өйрәнеү һәм журналистика факультетында "Башҡорт яҙма әҙәбиәте" антологияһының исем туйы булды. Сарала Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғалимдары, М. Аҡмулла исемендәге башҡорт педагогия университеты уҡытыусылары, Өфө университетының ғалимдары ҡатнашты.**

Антология ике томдан тора. Беренсе томға V-XVIII быуаттарға ҡараған төрки-башҡорт яҙма ҡомартҡылары ингән. Орхон-Йәнәсәй ташъяҙмаларындағы текстар, төрки шағирҙары Йософ Баласағунлының "Ҡотаҙғу белек", Әхмәт Йүгнәкиҙең "Һибәт әл-хакаик" әҫәрҙәре, Ҡорҡот ата китабы, Ҡол Ғәлиҙең "Йософ ҡиссаһы", Сәиф Сараи, Ҡотоб һәм башҡа авторҙарҙың әҫәрҙәре хәҙерге башҡорт теленә бирелә.

Икенсе томға XVI-XVIII быуаттарҙа ижад ителгән тарихи-функциональ текстарҙан, сәйәхәтнамәләрҙән, Батырша хатынан, Тажетдин Ялсығолов әҫәрҙәренән өҙөктәр, Мәүлә Ҡолой, Утыҙ Имәни, Салауат Юлаев шиғырҙары индерелгән. Антология Өфө Фән һәм технологиялар университетының башҡорт әҙәбиәте, фольклоры һәм мәҙәниәте кафедраһы уҡытыусы-ғалимдары профессор М.Х. Иҙелбаев, филология фәндәре кандидаты З.Ғ. Мырҙағолова тарафынан төҙөлгән. Мирас Хәмзә улы билдәләүенсә, кафедра ғалимдары тарафынан төрлө дәреслектәр күп яҙылһа ла, антология үҙ эсенә алған дәүерҙе сағылдырған китап ҡына озағыраҡ яҙылған. "Бөтөн студенттарҙың да боронғо төрки телендә һаҡланып ҡалған текстарҙы уҡырға мөмкинлеге юҡ. Шуға ла беҙҙең уларҙы башҡорт теленә тәржемә итеү теләге күптән бар ине. Башҡорттарҙың тамырҙары менән V быуаттың мәҙәни-әҙәби традицияларына барып тоташҡан бай әҙәбиәте бөтәһенә лә таныш булырға тейеш. Ә ҡомартҡыларҙы үҙ телендә уҡыу бигерәк тә әһәмиәтле", - ти Мирас Иҙелбаев.

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 23003

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
27 ғинуар 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3267
Заказ - 113